ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 ноябрь (ҡырпағай) 2019

№47 (881)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Баҙарҙы кем көйләй?



3

Дөрөҫ яҙайыҡ, дөрөҫ һөйләйек!




6

Атанан күргән уҡ юнған,



йәғни Хирургтың хирург улдары менән әңгәмә

8-9

Советтар Союзы дәүере... халыҡтар дуҫлығы өлгөһө ине



12-13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ әлеге ваҡытта 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индексы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы мәғлүмәтте таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Төрлө кимәлдәге бәҙҙе бер закон сығарыусыларҙың йыш ҡына тупа яҙмаған идеялар менән сығыш яһап, ниндәйҙер закон проекттары, төҙәтмәләр тәҡдим итеүенә шаһитбыҙ. Ҡабул ителгән закондарҙың да барыһы ла файҙаға эшләй, тип әйтеп булмай. Ошо хаҡта ниҙәр уйлайһығыҙ?

*Мәүҙиҙа МӨХӘМӘТЙӘНОВА, Әбйәлил районы, Ҡырҙас ауылының ветерандар советы рәйесе:*

Һуңғы ваҡыт ауыл халҡына социаль ярҙам күрһәтеү сараларына бер аҙ иғтибар артҡандай тойола. Мәҫәлән, 2019 йылдың 1 ғинуарынан алып ауыл хужалығында 30 йыл эш стажы булғандарҙың пенсияларына 25 процент өҫтәмә түләнә башланы. Ауыл ерҙәрендә фельдшер-акушер пункттары асыла, улар медицина хеҙмәткәрҙәре менән тулыландырыла, ауыл мәктәптәренә уҡытыусылар йәлеп итеү буйынса ниндәйҙер саралар күрелә. Күп балалы ғаиләләргә матди ярҙам күрһәтелә. Былар барыһы ла ҡыуандыра, әлбиттә. Әйткәндәй, күптән түгел ил президенты В. Путин тағы ла бер законға ҡул ҡуйҙы: ауыл ерендә йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙарға 36 сәғәтлек эш аҙнаһы индереү хупланды. Дәүләт Думаһы Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексына ошондай төҙәтмәне икенсе уҡыуҙа ҡабул итте. Унда эш хаҡы 40 сәғәтлек эш аҙнаһына ҡарағанда кәм булмай тип билдәләнә. Бер яҡтан, был закон ҙур агросәнәғәт комплекстарында эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙар өсөн дан инде: улар ғаилә хәстәрҙәренә күберәк иғтибар бүлә аласаҡ, йорт-хужалыҡ, мал-тыуар ҡарау, баҡса эштәренә лә ваҡыт ҡаласаҡ. Үкенескә, быҙдай үҫешкән хужалыҡтар, агрофирма һәм холдингтар илдә күп түгел. Ауыл ерҙәре нигеҙҙә эшһеҙлектән интегә. Үҙебеҙҙең республика ауылдарын ғына алып ҡарағанда ла был асыҡ күренә: беҙҙең ауылдарҙа күпселек ҡатын-ҡыҙ эшләмәй, йорт хужалығы алып бара, балалар ҡарай. Ә инде ауылда эш менән тәьмин ителгән бер нисә ҡатын-ҡыҙ: уҡытыусылар, медицина хеҙмәткәрҙәренә был закондың ҡағылышы юҡ тиһәң дә була. Бының менән мин шуны әйтергә теләйем: ауылдарҙа тәүҙә эш урындары булдырыу тураһында хәстәрлек күрелһен ине: баҡсасылыҡ, малсылыҡ, ҡошсолоҡ тармаҡтары йә булмаһа теген оҫтаханалары, икмәк бешереү, кондитер изделиелары етештереү кеүек хеҙмәт урындары булғанда, беҙҙең ауыл ҡатындары ла дәртләнеп эшләр һәм үҙҙәренә тейешле ташламаларҙан файҙалана алыр. Бына шул саҡ әлегеләй закондар күпселек мәнфәғәтен күҙәтер һәм эшләп йөрөүсе ауыл кешеһенә реаль ярҙам булыр.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## БАШҠОРТОСТАН...

### Өфө һәм Баймаҡ ҡына түгел

**"Киске Өфө" гәзите биргән мөмкинлекте файҙаланып, әйтер һүҙҙәремде киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарам.**

Мин үҙем республикабыҙҙың Тәтешле районында йәшәйем. Беҙҙең ауыл үҙенең матурлығы һәм төҙөклөгө менән һәр килгән ҡунаҡтың күңелендә уйылып ҡала. Илдең күп төбәктәрендә социаль объекттарҙың ябылыуы тураһында көн дә хәбәрҙәр килеп тора, ә беҙҙә иһә бәләкәйерәк булһа ла сауҙа үҙәге бар, спорт комплексы уңышлы эшләй. Күптән түгел Пермь өлкәһенән килгән таныштар әйтеүенсә, уларҙағы бөтә тиерлек спорт комплекстары, бассейн һәм башҡа халыҡ өсөн файҙалы социаль объекттар, беҙҙекенән айырмалы рәүештә, шәхси ҡулдарҙа. Ә улар, тәбиғи, хаҡтарҙы үҙбелдегенсә, арттырып ҡуя. Шулай уҡ ҡунағымдың күҙенә салынған тағы яҡшы күренеш - юлдарҙың төҙөк, юл буйҙарының тәртиптә булыуы. "Һеҙҙә халыҡ үҙенең көнитмешенә, тирә-йүненә иғтибарлы, үҙе йәшәгән ергә хөрмәтле ҡарашта, өй-ҡураһы тәртиптә", тип үҙ фекерен белдерҙе ул. Тимәк, беҙҙең төбәктә лә хөрт йәшәмәйҙәр, халыҡ булдыҡлы тип тулы ышаныс менән әйтергә хоҡуҡлыбыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## СОВЕТ МАЙҘАНЫНДА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Совет майҙанында генерал Миңлеғәли Шаймуратовҡа һәйкәл ҡуйылырға тейешлеге тураһында күптән хәбәр иткәйне. Ошо көндәрҙә уҙғарылған сираттағы "Төҙөлөш сәғәте" барышында был майҙан халыҡтың яратҡан ял итеү урындарының береһенә әйләнергә тейешлеге тағы ла һыҙыҡ өҫтөнә алынды.**

Кәңәшмәлә "ПСК-6" компаниялары генераль директоры Андрей Носков Совет майҙанында генерал Шаймуратовҡа һәйкәл ҡуйыласағын иҫәпкә алып (һәйкәлдең нигеҙе 7 метрға аҫҡа төшөп торасаҡ), эргәһенә фонтандар, уйын майҙансыҡтары урынлаштырырға, ә аҫтына күп ҡатлы роботлаштырылған автомобиль парковкаһы эшләргә тәҡдим итте. Әммә быға тиклем Өфөнөң баш архитекторы Олег Байдин, Совет майҙаны территорияһында ауышлыҡ кимәле 3,5 метрға етеүе сәбәпле, ер аҫты парковкаһын төҙөү мөмкин түгел тип билдәләгәйне. Республика Башлығы Радий Фәрит улы ла парковка төҙөү тураһындағы проектты хупламаны. "Совет майҙанын беҙ бик мөһим йәмәғәт һәм мәҙәни киңлек итеп күрәбеҙ, ә бында автомобилдәр бер туҡтауһыҙ үтеп торасаҡ. Был ауыраны боҙасаҡ", - тине ул.



12+

✓ Бик аҙ күләмдәге түләүҙәр бар. Айына 150 һум түләүҙең мәғәнәһен күрмәйем. Социаль ярҙам үҙен аҡлаһын, ғаиләләргә ысынлап та файҙа килтерерҙәй булһын.



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!



# БАШҠОРТОСТАН...
## Өфө һәм Баймаҡ ҡына түгел

(Башы 1-се биттә).

Үҙемде борсоған бер мәсьәлә тураһында ла яҙып үтәйем. Ул да булһа, тәбиғәткә ҡарата булған вәхшиҙәрсә ҡараш. Мәҫәлән, тыуған районым Хәйбуллала Таналыҡ йылғаһы бар. Беҙ бәләкәй саҡтан шунда ҡармаҡ һалып, балыҡ тотоп үҫтек. Хәҙер иһә балыҡты ҡармаҡҡа эләктерермен тимә, бөтә йылғаға ау һалынып бөткән. Тейешле органдар бындай хәлгә юл ҡуймаҫҡа тейеш түгелме ни? Ни эшләп үҙ эштәренә яуапһыҙ ҡарайҙар һәм иртәгә йылғаларыбыҙ бөтөнләй балыҡһыҙ тороп ҡалһа, кем яуап бирер?

Беҙҙең халыҡ ҡышҡа йәйҙән үк әҙерләнеп өйрәнгән. Бесәнен эшләп, йәшелсә-маҙарын баҙына тултырып, утынын ярып өйөп ҡуя. Ҡар көрәргә көрәге лә көҙҙән үк ишек алдына сығып тора. Ләкин бына ҡайһы бер ҡалаларҙа ҡышҡа әҙерлек тик декабрь айы тыуғас ҡына дәррәү башлана. Тәүге ҡар күҙе төшөп, бер аҙ ямғыр һибәләп үткәйне, ҡала урамдары боҙлауыҡҡа әйләнде. Ләкин күп урында ҡом һибелмәй, кеше ауатүнә йөрөргә мәжбүр. Аңлауымса, һәр учреждение, офис үҙенең алдындағы майҙансыҡтың таҙа һәм йәйәүлеләр өсөн уңайлы булыуын тәьмин итергә бурыслы. Ни өсөн һуң улар был талапты үтәмәй? Шундай битарафтарҙы төрлө күләмдәге штраф ҡына уятып ебәрергә мөмкин, күрәһең.

"Һаулыҡ - ҙур байлыҡ", тибеҙ. Ысынлап та, һаулыҡ булмаһа, йәшәүҙең йәме лә, рәте лә китә. Бигерәк тә балалар сирләһә, донъя емерелгән ише була. Яңыраҡ, Өфөлә йәшәгән ҡыҙымдың сабыйы ауырып, 17-се дауаханаға яттылар. Уларҙың янына барып, аптырап сыҡтым: палаталар ғына түгел, хатта коридорҙағы карауаттарҙа бәләкәй пациенттар ята, уларҙың барыһына ла, дауаланыусыларҙың әйтеүенсә, бер үк антибиотик ҡаҙайҙар һәм әлеге лә баяғы урын етмәүе һөҙөмтәһендә йүнәлеп тә бөтмәйенсә сығарып ебәрәләр. Шуға күрә күптәрҙең ҡабат дауаханаға эләгеүенә аптырарға ла түгел. Балалар - беҙҙең киләсәк, уларҙың һаулығы өсөн беҙ яуаплы, тимәк, бөтә яҡлап та яҡшы һәм сифатлы дауалау тәҡдим иткән дауаханалар булдырыу тәү бурыстарыбыҙҙың береһе.

**Гөлсөм БАЯЗИТОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Төрлө кимәлдәге бәғзе бер закон сығарыусыларҙың йыш ҡына тұҙға яҙмаған идеялар менән сығыш яһап, ниндәйҙер закон проекттары, төҙәтмәләр тәҡдим итеүенә шаһитбыҙ. Ҡабул ителгән закондарҙың да барыһы ла файҙаға эшләй, тип әйтеп булмай. Ошо хаҡта ниҙәр уйлайһығыҙ?***

(Башы 1-се биттә).

***Айрат ӘЙҮПОВ, Баймаҡ районы Йомаш ауылы хеҙмәт ветераны:*** Ҡабул ителгән закондарҙың, ҡарарҙарҙың һәр ваҡытта ла "сәпкә теймәүе" хаҡында мин дә үҙ фекеремде әйтеп китергә теләйем. Ошо көндәрҙә генә республика киң мәғлүмәт сараларында, Башҡортостан парламенты депутаттары күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһындағы законға үҙгәрештәр ҡабул итте һәм 600 мең күләмендә түләү алырға тейешле категориялар исемлеген киңәйтте, тип хәбәр ителде. Асыҡланыуынса, бындай матди ярҙам һигеҙ һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләргә ҡағыла икән. Һис һүҙһеҙ, ҙур ярҙам, тик... ҡайҙа һуң бөгөн улар, һигеҙ балалы ғаиләләр? Тотош республикала ундайҙар ни бары 200-ләп кенә икән, ә бына үҙебеҙҙең һәм мин белгән күршетирә ауылдарҙа ундайҙар юҡ. Бәлки, был закон күберәк бала табыуҙы дәртләндереү йөҙөнән дә ҡабул ителәлер инде. Биш, алты, ете бала тәрбиәләгән ғаиләләр ҙә юҡ түгелдер бит, был да бөгөнгө көндә ата-әсә өсөн ҙур ҡаһарманлыҡ, тик уларҙың имен һәм тәрбиәле ғаилә булыуҙары шарт. Шуға күрә күп балалыларға матди ярҙам саралары мөмкин тиклем күберәк ғаиләләрҙе үҙ ҡурсалауына алһын һәм күберәк файҙа килтерһен өсөн биш- алты бала ҡараған ғаиләләрҙе лә ошо категорияға индереү кәрәк булғандыр, тигән фекерҙәмен. Юғиһә, беҙҙә берәй яҡшы сараны ҙур хәбәр итеп һөйләргә яратһалар ҙа, асылда уның килтергән файҙаһы әллә ни "ҙур һәм киң" булмай сыға ла ҡуя түгелме?

Әйткәндәй, яңыраҡ ошо мәсьәләгә ҡағылышлы тағы бер яңылыҡ ишеттем: республикабыҙҙың финанс министры Лира Иғдисамова күп балалы ғаиләләргә финанс ярҙамы системаһын ҡарап сығырға һәм ғаиләләргә ысынлап та һиҙелерлек файҙа булырҙайҙарын ғына ҡалдырырға тәҡдим итә. "Бик аҙ күләмдәге түләүҙәр бар. Айына 150 һум түләүҙең мәғәнәһен күрмәйем. Социаль ярҙам үҙен аҡлаһын, ғаиләләргә ысынлап та файҙа килтерерҙәй булһын. Беҙ дәүләт ярҙамы менән файҙаланыусы категориялар һанын арттырыуға ла бара алабыҙ. Бының өсөн бит ифрат ҙур сумма күсерелә: әле 33 млрд. һум түләнде лә инде. Социаль ярҙам күләме арта икән, кешеләр уның файҙаһын да тойорға тейеш",- тине ул. Быға тулыһынса ҡушылам, бик дөрөҫ фекер.

***Фәйрүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Ысынлап та, ҡайһы саҡ депутаттар ҡабул иткән ниндәйҙер закондар йә уларға төҙәтмәләр, өҫтәмәләр тураһында күп итеп, ҡабартып һөйләнһә лә, уның файҙаһы, халыҡ әйтмешләй, "биш тинлек" кенә була ла сыға. Беҙҙе, гәҙиттә, "пенсияға өҫтәмә"ләр менән шулай йыш һемәйтәләр. 75 һумдан алып 250-гә тиклем өҫтәлә икән, был турала тәүҙә йыл буйы ҙур хәбәр итеп һөйләйҙәр әле. Бынынһы ярай, ә бына закон ҡабул итә торған етди юғары органдарға, мәҫәлән, Дәүләт Думаһына, еңелсәрәк фекер йөрөткән сәйер кешеләрҙең барып эләгеүен һис аңлап булмай. Улар төрлө туҙға яҙмаған идеялар менән Думаның ғына түгел, халыҡтың да башын ҡатыралар, эш хатта абсурдҡа барып етә. Яңыраҡ ҡына "АиФ" аҙналығы (№42, 2019) ана шундай "тәҡдим һәм фекер"ҙәрҙән асыҡтан-асыҡ көлөп яҙып сыҡты. Бер депутат, мәҫәлән, үҙгәртеп ҡороу йылдары осоронда һаулыҡтарын юғалтып, "ауыр сирҙәргә дусар булғандар өсөн" һәр төрлө ташлама һәм субсидиялар бүлергә, уларҙың пенсияларын арттырырға кәрәк, тип тәҡдим итә. Дәүләт Думаһында тағы бер идея - эшләмәй өйҙә ултырған йорт хужабикәләренә эш хаҡы түләү һәм уларға хеҙмәт стажы булдырыу тураһында фекер алышыу булып үткән. Ә инде Виталий Милонов тигән берәү (әллә ни маҡтанырлыҡтан булмаған үткәненә ҡарамаҫтан, ни мөғжизә менәндер "Берҙәм Рәсәй" партияһынан депутат итеп һайланған) күптән кеше башын ҡатыра: йә ул депутаттарҙың мундир кейеп йөрөүҙәрен теләй, йә булмаһа сит илдән енесе билдәләнмәгән Барби ҡурсаҡтарын индереүҙе тыйыуҙы талап итә; велосипедсыларға водитель таныҡлығы индереүҙе һорай һ.б. Дәүләт Думаһындағы иң йәш депутат Василий Власов, 23-25 йәшкә еткәндә кешенең үҙ фатиры булһын өсөн 14 йәшлек үҫмерҙәргә ипотека бирә башлауҙы һорай; уның хеҙмәттәше Александр Васильев Рәсәй тимер юл пассажирҙарын гигиена талаптарын үтәмәгәндәре һәм бысраҡ носкиҙары өсөн штраф яҙаһына дусар итмәксе һ.б. Ошо һуңғы тәҡдим Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володинды тамам сығырынан сығара ла:"Федераль Йыйылышҡа президент мөрәжәғәтнамәһенән һуңғы тәүге көндә Дәүләт Думаһында ниндәй яңылыҡтар бар икән, тип ҡыҙыҡһынһағыҙ, унда пассажирҙарҙың плацкарт вагондарҙа уңайһыҙлыҡ тыуҙырыусы бысраҡ носкиҙары тураһында һүҙ барыуын күрерһегеҙ...Яҡшы башланғыстар һәм етди закон проекттары ана шундайҙар арҡаһында күренмәй ҙә" ,- тип ризаһыҙлығын белдерә ул. Кемгә ҡарап үпкәләйҙер инде Дума рәйесе - аңлашылмай. Уйлап ҡараһаң, бындай ахмаҡлыҡтарға юл ҡуйыу йә тыйыу хоҡуғы уның үҙ ҡулында түгелме ни? Мәғлүм булыуынса, һәр депутатты аҫрау-тотоу ҡаҙнаға 1,5 миллионға төшә, тип яҙалар; өҫтәүенә, улар һәр төрлө ташлама-өҫтөнлөктәр менән файҙалана, эш хаҡтары иһә беҙҙең төшкә лә инеп сығырлыҡ түгел - был ҡайһы берәүҙәргә үҙҙәрен "гәҙиттән тыш" кеше итеп тойорға сәбәп булһа, киләһе һайлауҙар яҡынлашҡан һайын (2021) улар йәмәғәтселек иғтибарын ана шундай юл менән йәлеп итергә тырыша, күрәһең. Эйе, кем нимәгә һәләтле бит...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ЭНЦИКЛОПЕДИЯ...
## Википедияны алыштыра аламы?




**Ошо көндәрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Википедияға ҡағылышлы репликаһын медиаресурстарҙың төрлөсә аңлатыуына, хатта уны "Рәсәй территорияһында тыйыу" тураһындағы имеш-мимешкә бәйле социаль селтәрҙәрҙә дуҫтарымдан һәм таныштарымдан бик күп һорауҙар килә. Шуға күрә, донъяла популярлыҡ яулаған интернет-энциклопедия тураһындағы фекерҙәрем менән бүлешмәксемен.**

Бер нисә йыл элек Башҡортостан Фәндәр академияһы етәкселегендә: "Башҡорт Википедияһы бар икән, нимәгә беҙгә Башҡорт энциклопедияһы?" - тигән фекер яңғырағайны. Бөгөн килеп ил Президенты үҙе "Википедияны Рәсәй аналогы менән алмаштырырға" тәҡдим итә. Был йәһәттән башҡа иң элек шундай уй килә: ни өсөн милли энциклопедиялары күптән инде цифрлаштырылған һәм дөйөм милеккә сығарылған милләттәр - инглиздәр, немецтар, француздар һ.б. был ике сығанаҡты бер-береһе менән алмаштырыу тураһында уйланмай? Хатта интернет киңлеге сикләнгән һәм ысын мәғәнәһендә популяр булған онлайн энциклопедияға эйә ҡытайҙар ҙа бер нәмәне икенсеһенә алмаштырырға йыйынмай. Ни өсөн бары тик Рәсәйҙә генә мотлаҡ аналогка алмаштырылырға тейеш, ә бер үк ваҡытта икеһе лә

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров - "Медиалогия" компанияһының киң мәғлүмәт сараларында телгә алыу буйынса губернаторҙар рейтингында өсөнсө урында. Шулай уҡ ул Волга буйы федераль округы губернаторҙары араһында беренсе урында. Федераль рейтингта Башҡортостан Башлығын Санкт-Петербург губернаторы Александр Беглов һәм Мәскәү губернаторы Сергей Собянин ғына уҙып киткән.

✓Австрияла республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Андрей Назаров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы ASFINAG компанияһы вәкилдәре һәм эшлекле даирәләре менән осрашты. Фирмаға Башҡортостанда пилот майҙансығын ҡарау тәҡдиме индерелде. Австрияның транспорт министры Андреас Райхарт хәрәкәтте ойоштороу, транспорт ағымдарын контролдә тотоу системаларын өйрәнеү өсөн республика белгестәрен Австрияға саҡырҙы.

✓Башҡортостан властары Европа иле менән бәйләнештәргә ҙур иғтибар бүлә. Быйыл июнь айында Венала республика вәкиллеге асылды. Дипломатик майҙансыҡ Европаның башҡа илдәре менән бәйләнештәр булдырыуҙа мөһим роль уйнар һәм төбәктең тышҡы иҡтисади эшмәкәрлеген үҫтереүгә булышлыҡ итер тип күҙаллана. Шулай уҡ йәй көнө Өфө - Вена тура авиабәйләнеше асылды.

✓Башҡортостандың Сәнәғәт һәм инвестиция сәйәсәте министрлығы 2020 йылға "Эшлекле календарь" өҫтөндә эште тамамлай. Уға 300 сара һәм 89 сәнәғәт күргәҙмәһе индерелгән. "Календарь власть органдарының һөҙөмтәле эшләүе өсөн кәрәк, - тип билдәләне Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров. - Чиновниктар туризмын бөтөрөргә ваҡыт. Һәр сәфәр буйынса отчет бирергә кәрәк, бының өсөн формат индерелә".

✓Башҡортостанда Яңы йыл алдынан "Иң яҡшы яңы йыл ҡаласығы" конкурсы башлана. Конкурс 10 декабрҙән ҡала округтары һәм ауыл биләмәләре араһында ойоштороla. Конкурсҡа йомғаҡ 2020 йылдың 19 ғинуарына тиклем яһала. Иң яҡшы яңы йыл ҡаласыҡтары урынлашҡан муниципаль берәмектәрҙең хакимиәттәренә аҡсалата премия тапшырыла: беренсе урын - 500 мең, икенсе урын - 200 мең, өсөнсө урын - 150 мең һум. Бүләк фонды муниципаль берәмекте төҙөкләндереүгә йүнәлтелә.

✓ *Йә уны алкоголле продукция исемлегенән алып ташларға, йә, киреһенсә, ундағы алкоголь кимәле градусын күтәрә бирергә, һыраны футбол тамашаларында ла һатыуҙы ойоштороорға кәрәк, тигән аҡылһыҙ тәҡдимдәр яңғырай.*



*БЫНАҒАЙЫШ!*

# БАҘАРҘЫ КЕМ КӨЙЛӘЙ?

**Рәсәй алкоголь ҡулланыу буйынса иң "алдынғы" илдәр рәтендә тороуға ҡарамаҫтан, илдә һаман да иҫерткес эсемлектәрҙе етештереү, төрләндереү һәм шуның менән уны артабан да әүҙемерәк ҡулланыуға ылыҡтырыу саралары дауам итә.**

Яңыраҡ ҡына Иҡтисади хеҙмәттәшлек һәм үҫеш мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара ойошма рейтингында күренеүенсә, Рәсәй иң күп эсеүсе ун ил иҫәбендә 7-се урында килеүе мәғлүм булды. Шул уҡ ваҡытта әйтеп китеү кәрәк: илдә эскелек законһыҙ рәүештә етештерелгән спиртлы эсемлектәр (контрафакт, көмөшкә, аптека төнәтмәләре, парфюмер изделиелар һ.б.) әйләнешенә тейешле контролдең булмауы сәбәпле лә киң ҡолас йәйҙе. Шуға күрә лә РФ Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары О. Салагай тигән чиновниктың: "...ойошма сағыштырыу өсөн 2017 йылғы мәғлүмәтте файҙаланған, былтырғы мәғлүмәтте алырға кәрәк ине", - тип әлеге халыҡ-ара рейтинг һөҙөмтәһен кире ҡағып маташыуы көлкө тойола. Беҙҙә араҡы-шарапты ғына түгел, һыраны ла бик яратып һемереүҙәрен беләбеҙ: кесеһенән алып - ололарға, ир-аттан алып - ҡыҙ- ҡырҡынғаса. Урамда осраған һәр өсөнсөнөң тип әйтерлек ҡулында һыра шешәһе булыуға ҡарамаҫтан, етештереүселәрҙә был спиртлы эсемлекте артабан популярлаштырыу буйынса идеялар тыуып ҡына тора. Йә уны алкоголле продукция исемлегенән алып ташларға, йә, киреһенсә, ундағы алкоголь кимәле градусын күтәрә бирергә, ә иң "яҡшыһы", һыраны футбол тамашаларында ла һатыуҙы ойоштороорға кәрәк, тигән аҡылһыҙ тәҡдимдәр әленән-әле яңғырай. Һуңғы ун ике-ун өс йыл эсендә Рәсәй тулыһынса тип әйтерлек "һыра ҡорһаҡ"ҡа әйләнде, тип иҫәпләй эксперттар. Уның ҡарауы, шуның иҫәбенә араҡы ҡулланыу кәмей, тип тә ҡыуанғандар бар, ләкин был күренештең эҙемтәһе күпкә хәүефлерәк булып килеп сығыу ихтималлығын улар күҙ алдына ла килтермәй, күрәһең...



Тотош йәмғиәт, бигерәк тә йәш быуын вәкилдәре һыра ҡоло булып үҫә. Етмәһә, яңыраҡ ҡына ҡабул ителгән "Алкоголь продукцияһы хәүефһеҙлеге тураһында" яңы технология регламентын тупаҫ рәүештә боҙорға, үҙҙәренә ҡулай булғанса үҙгәртергә тәҡдим итә етештереүселәр. Ҡағиҙә буйынса һыраның ҡеүәте 7 градустан артырға тейеш түгел, ләкин халыҡ-ара баҙарҙа уның 20, хатта 60 градусҡа тиклем көслөрәктәре лә етештерелә. Мәҫәлән, Бельгия һыраһы йә булмаһа, крафт тип аталған махсус рецепт технологияһы буйынса етештерелгәндәре. "Рәсәйҙәр бындай һыраның ни икәнен дә белмәй",- тип эсе боша Efes һыра компанияһының хоҡуҡ мәсьәләләре буйынса директоры О. Дурдыев һәм ул һыра етештереүселәрҙең был эсемлектең градус ҡеүәтен сикләүҙе бөтөрөргә тигән талабын яҡлай. Уның фекеренсә, донъя баҙарында булған ошондай продукциянан Рәсәй ҡулланыусыһын мәхрүм итеү алкоголь сауҙа мәсьәләләрен көйләүсе закондағы етешһеҙлек булып тора икән, үәт бәлә ҡайҙа!

Алкоголь баҙарын федераль һәм төбәк тикшеренеүҙәр үҙәге етәксеһе Вадим Дробиз әйтеүенсә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, Рәсәй һыраһы ла һеүләп ултыра: былтырғы мәғлүмәттәр буйынса илдә 654 миллион декалитр һыра һәм 78 миллион декалитр һыра эсемлектәре һатылған. Был үҙебеҙҙә етештерелгән продукцияның ҙур ихтыяж менән файҙаланыуы хаҡында һөйләй, ти ул, сөнки һыра беҙҙә нигеҙҙә нормативта ҡаралған тәбиғи ингредиенттарҙан, атап әйткәндә, 80 проценты ҡурҙан етештерелә. Шуға күрә, тип дауам итә ул, Рәсәй ҡулланыусыһы градус юғарылығы менән ҡыҙыҡтырған эсемлекте ҡабул итерме, юҡмы - әйтеүе ауыр. Ысынында иһә, таяҡтың ауыр башы шунда: бындай темптарҙа һәм ҡапма-ҡаршылыҡ шарттарында халыҡ араһында алколголь ҡулланыуҙы кәметеү һәм алкоголизмды иҫкәртеү буйынса дәүләт сәйәсәтенең 2010 йылдан алып ғәмәлдә иҫәпләнгән (?) ун йыллыҡ Концепцияһы, үкенес, бойомға ашырылмай ҡаласаҡ. "Демография" милли проекты буйынса ла алға китеш һиҙелмәй. Документта ҡаралыуынса, йән башына ваҡлап алкоголь продукцияһы һатыу йыл һайын 1,1 - 1,3 процентҡа, йәғни 2020 йылдағы 6,3 литрҙан 2022 йылға 6,15 литрға тиклем кәмеүгә табан барыу күҙалланһа, бөгөнгө көн иһә илдә алкоголь эсемлектәр етештереү һәм уның әйләнешен күҙәтеү тулыһынса тип әйтерлек монополистар ҡулында.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

булһа, ярамаймы ни? Күрәһең, "бер нәмәне булдырыу өсөн икенсеһен емерергә кәрәк" икәне ҡаныбыҙға һеңгән, булмышыбыҙға һалынғандыр. Фән чиновниктарының һәм хәҙерге журналистарҙың интеллектуаль кимәле милли энциклопедия менән "Википедия" краудсорсинг проекты араһындағы ябай ғына айырманы ла аңларлыҡ кимәлдә түгелме икән ни? Бына, әйтегеҙ әле, Ҙур Рәсәй энциклопедияһында йәки Башҡорт энциклопедияһында һеҙ башҡорт телендә Париж тураһында мәҡәлә таба алаһығыҙмы? Эҙләмәгеҙ ҙә, тапмаҫһығыҙ ҙа. Шулай уҡ ике энциклопедияла ла башҡорт ауылы Париж тураһында ла мәҡәлә тапмаясаҡһығыҙ. Ә Википедияла уларҙың икеһе лә бар. Ниндәй милли энциклопедия үҙенә шундай мөмкинлек бирә ала? Википедия - киң тематикалы, күп телле проект, ә энциклопедияларҙың тематикаһы, ваҡыты, теле финанстарға бәйле сикләнгән. Википедия ирекле - ирекмәндәргә эш хаҡы түләнмәй, уларға бәрәү ҙә күрһәтмә бирмәй һәм мәҡәлә темаһын сикләмәй. Шуға күрә теләһә ҡайһы илдең милли һәм төбәк энциклопедиялары бер ваҡытта ла Википедияны алмаштыра алмаясаҡ.

Википедияның Энциклопедияны алмаштыра алмауын да аныҡ миҫал менән аңлатам. Кеше йәшәй, эшләй, ижад итә, Питерҙа, Мәскәүҙә, Өфөлә юғары вазифалар биләй. Элекке партия, хәҙерге Башҡортостандың йәмәғәт ойошмалары архивында уның бер нисә шәхси эштәре папкаһы һаҡлана. Ил яҙмышын хәл иткән ҡарарҙар, шул иҫәптән төрки халыҡтары яҙмаһын ғәрәп хәрефенән латин графикаһына күсереүҙе ҡабул итеүҙә ҡатнаша. Милләттәр эштәре буйынса комиссариат эше буйынса шәхсән Сталин менән таныш була. Төрки халыҡтарының яҙмаһы мәсьәләһен "дөрөҫ хәл итмәгәне" өсөн, беренсе дәүләт комиссияһы ағзаларының барыһы кеүек үк, Мәскәүҙән провинцияға "һөрөлә", 1937 йылда беренсе "халыҡ дошмандары" иҫәбендә ҡулға алына, 1938 йылда атыла һәм онотолоуға дусар ителә. Уның биографияһы тураһында бер кем бер юл да яҙмай. Асышым тураһында Башҡортостан мәғарифы һәм фәне тарихы китабы авторы Юрий Ергинға, "Башҡорт энциклопедияһы" дәүләт автономиялы фән учреждениеһы директоры урынбаҫары Клара Әһлиуллинаға шылтыраттым һәм БАССР-ҙың мәғариф комиссары, уҙған быуаттың 20-се йылдарындағы БАССР Ауыл хужалығы советтары рәйесе тураһында мәҡәлә баҫтырыуҙы үтендем. Рәхмәт, баҫтырҙылар. Һуңынан ғына беҙ Википедияла А. Т. Ғисмәтуллин тураһында мәҡәлә яҙҙыҡ, сөнки Башҡорт энциклопедияһы беренсел сығанаҡ статусына эйә, ул башҡа энциклопедиялар кеүек үк, быға саҡ баҫылмаған мәғлүмәттәрҙе баҫтыра ала. Википедия тәүҙән үк әгәр мәҡәлә быға саҡ бер ҡайҙа ла донъя күрмәһә, уны баҫтырыу ярамағанлығы тураһында белдерҙе (Орисс - оригиналь тикшереү тыйыла). Иҫләһәгеҙ, рус Википедияһында 2011 йылда "Өфө әҙәбиәте" һәм 2013 йыда "Өфө амфитеатры" мәҡәләләрен юйҙырҙылар, сөнки улар ғәмәлдә булһа ла, быға саҡ бер ҡайҙа ла яҙылмаған күренештәр ине. Википедия - икенсел сығанаҡ, абруйлы сығанаҡтарҙағы белемде тапшырыусы ғына. Бына ни өсөн Википедияның башҡорт бүлеге Башҡорт энциклопедияһын, руссаһы - Ҙур Рәсәй энциклопедияһын, инглизсәһе - Британиканы алмаштыра алмай. Йәғни ике сығанаҡ та кешеләргә белем илтһә лә, уларҙың тәғәйенләнеше төрлө һәм уларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйырға йәки алмаштырырға тырышырға ярамай.

Шундай уҡ Энциклопедиялағы һәм Википедиялағы мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгө һәм актуаллеге тураһында яҙырға ла мөмкин булыр ине, әммә ул үҙе айырым ҙур тема. Бары тик шуны ғына әйтергә теләйем: ике сығанаҡта ла хаталар ҙа, иҫкергән мәғлүмәттәр ҙә бар. Уларҙы тапҡанда мин һәр саҡ Башҡорт Энциклопедияһына хат яҙам һәм Википедияла үҙем төҙәтәм.

**Рөстәм НУРЫЕВ,**
**Башҡорт энциклопедияһының бер нисә мәҡәләһе авторы, 2005 йылдан Башҡорт Википедияһы ирекмәне һәм хакимы.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Хәйбулла районы хакимиәте башлығы Раил Ибраһимов үҙ теләге менән эштән китеү тураһында ғариза яҙған. Ҡарар юғары хаҡҡа сифатһыҙ материалдарҙан автобус туҡталыштары ҡуйыу осрағы буйынса тикшереү һөҙөмтәләренән һуң ҡабул ителгән, тип белдерҙеләр республика Башлығы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

✓Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 75 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Алдан беренсе вице-премьер Андрей Назаров Башҡортостан хөкүмәтенең тейешле бойороғона ҡул ҡуйғайны. 22 ноябрҙә "Торатау" конгресс-холында юбилейға арналған тантаналы сара булып үтте. Уҡыу йорто ауыр Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында республика башҡорт урта мәктәбе итеп асылған. 1956 йылда интернат статусын алған.

✓Башҡортостан спортсылары Александр Георгиев һәм Тамара Танһыҡҡужина Кюрасаолағы этаптан һуң халыҡ-ара шашка буйынса Донъя кубогына эйә булды. Кариб диңгеҙенең көньяғындағы дәүләттә уҙған халыҡ-ара турнирҙа 19 илдән 62 шашкасы ҡатнашты. Донъя кубогының дөйөм иҫәбендә Тамара Танһыҡҡужина ваҡытынан алда еңеү яуланы. Алты тапҡыр донъя чемпионының 535 мәрәйе бар, һәм уны бер кем дә ҡыуып етә алмай. Айгөл Иҙрисова - турнирҙа өсөнсө һәм кубок иҫәбендә дүртенсе урында.

✓Өфөлә полиция генерал-лейтенанты Артур Фәрүәз улы Әхмәтханов иҫтәлегенә көрәш буйынса Бөтә Рәсәй турниры үтте. Унда Рәсәйҙең 12 төбәгенән 253 көрәшсе һәм Ҡаҙағстан Республикаһы вәкилдәре сығыш яһаны. Башҡортостандан - 87 ир-егет һәм 135 егет. Һигеҙ финалда Башҡортостан дүрт "алтын", Татарстан - ике "алтын", Ырымбур бер "алтын" яуланы. Туғыҙ финал алышының һигеҙенсеһендә Башҡортостан вәкилдәре еңеүгә лайыҡ булды, 100 килограмдан ашыу ауырлыҡ категорияһында Ырымбур көрәшсеһе еңде.

✓18 ноябрҙә Рәсәйҙә Ҡыш бабайҙың тыуған көнөн билдәләнеләр. Ошо көндә уның биләмәһендә - Бөйөк Устюгта - ысын ҡыш башлана. Ә 1999 йылда Бөйөк Устюг рәсми рәүештә Рәсәй Ҡыш бабайының тыуған төйәге тип аталды. Башҡортостанда йәшәүселәр Ҡыш бабайҙы тыуған көнө менән ҡотлауға ҡушыла һәм уға уға хат яҙа ала. Ҡотлауҙарҙы 2019 йылдың 25 ноябренә тиклем 450098, Өфө ҡалаһы, "Ҡыш бабайға" а/й адресына йәки pismo-dedumorozu@list.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк.

ҠЫҪҠАСА

# ИХАТАЛА - ҠУМТАЛАР

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә ихата "кумта"ларын ҡышҡа әҙерләү тураһында хәбәр итте.** "Бөгөн "кумта"ларҙы ҡышҡа әҙерләү ваҡыты тамамланды. Улар бөтәһе 231, һырғалаҡтарҙы, футбол һәм уйын майҙансыҡтарын да бергә ҡушһаҡ - 499. Өфө минә ҡалала барлығы 84 "кумта"ның һәм 19 боҙ һырғалагының әҙер булыуы тураһында отчет бирҙе, һалҡындар башланғас та боҙ менән ҡаплай башлайбыҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. Шулай уҡ ул республикала яңы "кумта"лар төҙөү һәм иҫкеләрен тергеҙеү дауам ителеүен билдәрҙе. Башҡортостан етәксеһе һүҙҙәренсә, тиҙҙән Өфөнөң Затон биҫтәһендә, "Тулкын" скверында, яңы майҙансыҡ асыла.

✓ **Рәсәйҙә студенттар өсөн гранттар күбәйҙе. Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин һәләтлеләргә дәүләттән өҫтәмә ярҙам саралары тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.** Указға ярашлы, 2020 йылдың 1 сентябренән Рәсәй Федерацияһы Президенты гранттары һаны 6,5 меңгә тиклем арттырыла. Шуларҙан 5 мең грант - урта звено, бакалавриат һәм специалитет белгестәрен әҙерләү программалары, 1,5 мең грант магистратура программалары буйынса уҡығандарға бирелә. 2020/2021 уҡыу йылынан билдәле эшмәкәрлек өлкәһендә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкәндәр һәм һөнәри белем биреү ойошмаларына, юғары уҡыу йорттарына йәки ғилми ойошмаларға уҡырға ингәндәр Президент гранттарын алыу хоҡуғына эйә. Гранттарҙың күләме - 20 мең һум.

✓ **Көньяҡ Уралда "Еҙәлгә" милли паркы булдырыла. Тейешле ҡарарға Дмитрий Медведев ҡул ҡуйҙы. Яңы объект Силәбе өлкәһенең Ҡытау-Ивановск районында, ә бер өлөшө Башҡортостан биләмәһендә урынлашҡан.** Уның майҙаны - 45 мең гектар. Яңы парк ағымдағы йылда "Экология" милли проектына ярашлы ойошторолған тәүге махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһе була. Рәсәй Премьер-министры һүҙҙәренсә, яңы парк булдырыу Рәсәйҙә туризмды үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш. Еҙәлгә - Көньяҡ Уралда Йүрүҙән йылғаһының һул ярындағы тау һырты. Силәбе өлкәһе Ҡытау-Ивановск районының көньяҡ-көнсығышында урынлашҡан. Еҙәлгәнең көньяҡ сиге - Ҙур Шолом һыртының иң юғары нөктәһе (1427 метр) Башҡортостандың Белорет районында Көньяҡ Урал тәбиғәт ҡурсаулығы биләмәһендә урынлашҡан.

✓ **Өфө хакимиәтендә эшкә һәләтле халыҡтың өҫтәмә ялға хоҡуклы булыуын иҫкә төшөрҙеләр.** Закон буйынса, хеҙмәткәрҙәр диспансеризация үткән ваҡытта өс йылға бер таплыҡ бер көнгә эштән азат ителеү хоҡуғына эйә. Шул уҡ ваҡытта уларҙың вазифаһы, эш урыны һәм уртаса хеҙмәт хаҡы һаҡлана. Ведомстволың матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәренә ярашлы, пенсия алды һәм пенсия йәшендәге хеҙмәткәрҙәр йылына ике эш көнөнә хоҡуклы. Был көн өсөн хеҙмәткәр алдан ғариза яҙырға һәм эш биреүсе менән һайлаған көн тураһында һөйләшеп килешергә тейеш. Әгәр эш биреүсе хеҙмәткәргә диспансеризация үтеү өсөн көн йәки көндәр бирмәһә, уға иҫкәртеү йәки 5-10 мең һум штраф янай. Ҡабаттан хоҡуҡ боҙған өсөн 10-20 мең һум штраф ҡарала. Ойошмаға иҫкәртеү йәки 30-50 һум штраф янай (ҡабаттан хоҡуҡ боҙған өсөн 50-70 мең һум штраф һалына).

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ ЙЫЛ ЕТӘ...

**Республика Башлығы Радий Хәбиров "Башҡортостан Республикаһында Яңы 2020 йылды байрам итеү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы.**

Башҡортостан Республикаһында Яңы йыл байрамы сараларын ойошҡан рәүештә үткәреү маҡсатында ойоштороу комитеты составы раҫлана. Ойоштороу комитетына Яңы йыл байрамын билдәләү буйынса саралар планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелде. План буйынса 2019 йылдың 20 декабрендә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында республика Яңы йыл шыршыны ойоштороласаҡ. Республика Яңы йыл шыршыһында ҡатнашҡан балалар өсөн өс көнлөк ял ҡаралған. Муниципаль районлар һәм ҡала округтары хакимиәттәренә, профсоюз һәм башҡа йәмәғәт ойошмаларына мәғариф һәм мәҙәниәт учреждениеларында, тораҡ пункттар майҙандарында карнавалдар, театрлаштырылған тамашалар һәм Яңы 2020 йылды байрам итеүгә арналған башҡа төрлө саралар әҙерләп үткәреү тәҡдим ителде. 18 йәшкәсә биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләнгән ғаиләләргә 14 йәшкә тиклемге балаларға бүләктәр һатып алына. Һөнәри белем биреү ойошмаларында уҡыған етем һәм ата-әсә ҡарауынан ҡалған балаларға матди ярҙам күрһәтелә. Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы район-ҡалалар араһында Яңы йыл байрамы һәм каникул осоронда халыҡтың ял итеү урындарын иң яҡшы ойоштороуға конкурс уҙғара.

# ҮҪМЕР - МАШИНАҒАМЫ?

**Ошо көндәрҙә Мәскәүҙә Транспорт форумы булды, унда Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы ҡатнашты.**

Киләһе йылда Салауат Юлаев проспектының тамамланмаған участкаларын проектлау башлана, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров форумда. "Салауат Юлаев проспекты артабан үҫтереүҙе талап итә. Ул Сипайлово биҫтәһенә барып еткән һәм туктап ҡалған. Бөгөн беҙ федераль финанслау шарттарында Росавтодор менән берлектә эш башлау тураһында һөйләшеп килештек. Киләһе йылда тамамланмаған участкаларҙы проектлай башларбыҙ тип уйлайым, был Салауат Юлаев проспектын Бөрө трактына тиклем сығарырға мөмкинлек бирә", - тине республика етәксеһе. Салауат Юлаев проспекты әҙлөкһөҙ хәрәкәт итеү магистрале булып тора, 2007 йылда һалынған. Көньяҡтан Ағиҙел йылғаһы күперенән ингән ерҙә башлана һәм Сипайловоға ингән урында тамамлана. 2025 йылға тиклем Өфө үҫешенең генераль планына ярашлы, проспекты Черниковка аша Бөрө трактына тиклем дауам итеү күҙ уңында тотолған. Башҡа проекттарҙы (Яңы Затон күпере, Өфө арьяғында трамплин аҫтындағы тоннель) бойомға ашырыуға бәйле 2008 йылдан һуң проспектты үҫтереү туҡтатылған.

Әйткәндәй, форумда Дәүләт автоинспекцияһы оҙайлы уҡытыу курсы ойоштороу шарты менән балиғ булмағандарға водитель таныҡлығы тапшырыу идеяһын хупланы. Идея балиғ булмағандарҙың юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен өс ай түгел, ә күпкә оҙағыраҡ өйрәнеүенә ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, 14 йәшкәсә үҫмерҙәр - йәш юл хәрәкәте инспекторҙары отрядында, ә өлкәнерәк балалар үҫмерҙәр өсөн автомобиль мәктәптәрендә уҡый ала. ЮХХДИ-да билдәләүҙәренсә, Йәш юл хәрәкәте инспекторҙарын үҫтереү концепцияны 2024 йылға Рәсәйҙә 41 мең йәш инспектор отряды барлыҡҡа килер, ә балиғ булмағандар хәрәкәтенә йәлеп ителгәндәр һаны ярты миллион тәшкил итер тип күҙ уңында тота.

# ТАБИПТАР ЭШЕ...

**Башҡортостанда быйыл республиканың медицина ойошмаларында эшләгән табиптар һанын 371 кешегә арттырыуға өлгәшелгән. Башланғыс звенола был һан 234 тәшкил иткән. Ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәтенең штаты 22 хеҙмәткәргә артҡан.**

Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә быйыл "Ауыл табибы" федераль программаһы сиктәрендә Башҡортостандың 99 табибы - 1 миллион, 10 фельдшер 500 мең һум аласағын һөйләне. Түләү 1 декабргә тамамланырға тейеш. Тағы 72 фельдшерға "Ауыл фельдшеры" республика программаһы буйынса 500 мең һум түләнә. "Ауыл фельдшеры" программаһына эләкмәгән 150 фельдшерға ла 1 миллион һум бирелгән. Коллегалары менән бергә бер миллион һум алған 8 табип та ошо исемлеккә индерелгән. Башҡортостан башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме менән башланған программа буйынса 135 махсус йүнәлешле белгескә бер миллион һум түләнгән. Маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡыған 1033 студентка - 5 мең һум, ә 416 ординаторға 8 мең һум тапшырыла. Радий Хәбиров 2020 йылда медицина хеҙмәткәрҙәренә ярҙам программаларының дауам ителәсәген һәм быны өсөн бюджетта аҡса ҡаралғанын билдәрҙе. Башҡортостан Башлығы Һаулыҡ һаҡлау министрлығы етәкселегенең иғтибарын маҡсатлы йүнәлтмә менән уҡыған студенттарҙың мотлаҡ өс йыл эшләргә тейешлегенә йүнәлтте. Ул шулай уҡ һаулыҡ һаҡлау һәм башланғыс звеноға ярҙам күрһәтеү мәсьәләләре яныраҡ Рәсәй президенты Владимир Путин етәкселегендәге Дәүләт Советы ултырышында ҡаралыуын билдәләне.

# ӘЙҘӘ, КИТАП УҠЫЙЫҠ!

**Өфөлә, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала, "Туған телгә 100 аҙым" акцияһына старт бирелде. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тәҡдим иткән проект балаларҙы һәм йәштәрҙе нәфис әҙәбиәткә, туған телгә ылыҡтырыуға, республика яҙыусыларының ижадын киң йәмәғәтселек араһында популярлаштырыуға йүнәлтелгән.**

Уҡыусыларға, студенттарға, китапханаға килеүселәргә башҡорт авторҙарының 100 китабын уҡырға тәҡдим ителә. Улар араһында Мостай Кәрим, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Рауил Бикбаев һәм башҡа яҙыусыларҙың әҫәрҙәре бар. "Республикабыҙ әҙәби традицияларға, яҙыусыларға һәм шағирҙарға бай, - тине республиканың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Яҙыусылар берләшмәһендә яңы исемдәр барлыҡҡа килә, заманса хикәйәләр, повестар һәм романдар, шиғри йыйынтыҡтар донъя күрә. Авторҙар менән ижади осрашыуҙарҙы йышыраҡ ойошторорға, уларҙың әҫәрҙәрен тикшереүҙә ҡатнашырға, баһа бирергә, фекер алышырға кәрәк. Иң мөһиме, халыҡ күберәк уҡый башлаһын ине". Спикер һүҙҙәренсә, йәштәр араһында бөтөнләй китап уҡымаусылар йылданйыл арта, ҡайһы берәүҙәр үҙ фекерен анлайышлы итеп әйтеп бирә алмай. "Халыҡҡа ошо китаптар хаҡында мәғлүмәт бирергә, уларҙы ҡыҙыҡһындырырға кәрәк, ләкин мәжбүр итергә ярамай", - тип өҫтәне Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе. Уҡырға тәҡдим ителгән китаптар исемлеге менән тиҙҙән Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана сайтында танышырға мөмкин.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда, синоптиктар вәғәҙә иткәнсә, ҡапыл һыуытты. Аҙна башында төбәккә һалҡын арктик һауа үтеп инә башланы. Һауа температураһы ныҡ түбәнәйҙе. 19 ноябрь төндә Белорет районының Үткәл ауылында минус 33 градус теркәлде. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: Белорет районында бындай температураға күнегеп бөткәндәр.

✓Үҙәк банк 50 һумлыҡ тимер аҡса сығарыу кәрәклеген ҡарауы мөмкин. Үҙәк банк вәкиле аңлатыуынса, 50 һумлыҡ аҡса сығарыу өсөн вендинг индустрияһы вәкилдәре сығыш яһай. Уларға бындай аҡса ҡайтарым биреү өсөн кәрәк. Шуға ҡарамаҫтан, яңы тәңкә сығарғанда уның 20-30 йыл булһа ла хеҙмәт итәсәгенә ышанырға кәрәк, тип билдәләй белгестәр. Әле Үҙәк банк ош0о мәсьәләне өйрәнә. Әгәр 50 һумлыҡ тимер аҡсаға ихтыяж бар икән, уларҙы сығара башлауҙары ихтимал.

✓Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы поликлиникаһын төҙөү өсөн яңы аукцион иғлан ителде. Унда 1 миллиард һумға яңы корпус һалыу буйынса документтар яңыртылған. Алты ҡатлы бинаны 2021 йылдың ноябрендә сафҡа индереү күҙаллана.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостанда кисҡен респиратор йоғошло ауырыу менән 16 мең 376 сирле теркәлгән. Был күрһәткес эпидемик сиктән түбәнерәк, һәм ул арта бара, тип хәбәр иттеләр республика Роспотребнадзорының уҙған матбуғат конференцияһында. Ведомство белгестәре айырыуса вакцина эшләтергә кәрәклегенә иғтибар итте. Быйылғы миҙгелдә Башҡортостан халҡының 45 процентына прививка яһау күҙаллана, улар араһында 418 мең бала, 1,3 миллион өлкән кеше һәм ике мең йөклө ҡатын-ҡыҙ бар.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле коллективының 80 йыллығына арналған концерттар менән сығыш яһай башланы. 12 ноябрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залы сәхнәһендә ансамбль "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" юбилей концерт программаһын тәҡдим итте. Тантаналы юбилей концерты 13 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була. 80 йыллыҡҡа бағышланған концерттарҙың һуңғыһы 20 апрелдә Йәштәр һарайында уҙа.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылы.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЯНДЫ-ЯНДЫ...

## миллиондар янды

**Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә бер тема күңелде өйкәп тик торҙо. Янғындар һәм янғындар тураһындағы ялған шылтыратыуҙарға ҡағылышлы һандар ине ул. Баш ҡалала янғын һүндереүселәр бер аҙна эсендә 37 тапҡыр янғын һүндерергә барһа, 33 тапҡыр ялған саҡырыу буйынса йөрөп ҡайта.**

Эйе, беҙгә бала саҡтан ҡайһы бер осраҡтарҙа ниндәй телефон номеры буйынса ярҙам һорап шылтыратырға кәрәклеген, телефон булмаған йорттарҙағы кескәйҙәргә өйҙә ҡалмаҫҡа, ә күршекүләнгә йүгереп барырға кәрәк, тип өйрәтә инеләр. Һәр хәлдә, нисек тә булһа ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән ине был аҙым. Шулай уҡ ваҡытында ярҙам килеүе: янғын һүндереүселәр булһынмы ул, тиҙ ярҙаммы, полициямы - кеше ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыу икәнен дә барыбыҙ ҙа белә. Ләкин һуңғы ваҡыттағы мәғлүмәттәр ысынбарлыҡ менән ялғандың бер үк кимәлдә булыуын һәм һәр саҡ йәнәш йөрөүөн дәлилләй. Оператив кәңәшмәлә килтерелгән һандар ҙа шуны раҫлай: 37 һәм 33. Йәғни кемгәлер ысынлап та ярҙам кәрәк булған ваҡытта, шунса уҡ кеше ваҡытын нисек уҙғарырға белә алмай, үҙенсә күңел асҡан булып килеп сыға түгелме? Ә шул арала, ялған шылтыратыу буйынса йөрөгән ярҙам барып өлгөрмәйенсә, кемдер һәләк булыуы ла ихтимал.

Икенсе яҡтан, ниндәй генә ашығыс саҡырыу булмаһын, ваҡиға урынына барып етмәйенсә берәү ҙә уның ысынмы, ялғанмы икәнен белмәй, шылтыратыуҙы ҡабул итеүсе диспетчерҙар һәр сигналды еткерергә бурыслы һәм улар мәғлүмәтте анализлап ултыра ла алмай. Һөҙөмтәлә ярҙам бригадаһы йыйынып, юлға сыға: транспорт, ҡорамалдар эксплуатациялана, бензин яндырыла, бушҡа ваҡыт сарыф ителә.

Ялған шылтыратыуҙарға нимә этәрә? Ғәҙәттә, ул үҫмерҙәр өсөн сираттағы күңел асыу, ваҡытты күңелле итеп үткәреү булып тора. Ә инде өлкәндәр араһында күҙәтелгән бындай ҡылыҡтар - кемдәндер үс алыу билгеһе.

Әгәр шылтыратыусының кем икәне асыҡланһа, уны ниндәй ҙә булһа яза көтәме? Хоҡуҡ күҙлегенән ҡарағанда, янғын һүндереүселәрҙе ялған шылтыратыу буйынса саҡырыу өсөн енәйәти йәки административ яуаплылыҡ ҡаралған. Балиғ булмаған бала шылтыратһа, уға бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ ҡаралмай, бары тик балиғ булмағандар эше буйынса комиссияға иҫәпкә ҡуйылыуы ихтимал — ... 

комиссияға иҫәпкә эләгергә мөмкин. Бик йыш балаларҙың уйнап ҡына шылтыратыуының бер сәбәбе уларҙың ял ваҡыты дөрөҫ ойошторолмауы булһа, икенсеһе - бындай күңел асыу өсөн ата-әсә яуап бирергә тейешлеген дә, штрафты ла улар түләйәсәген уйламау. Шуға күрә бәләкәй саҡтан уҡ яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләргә, етди мәсьәләләр буйынса шаярыуҙың ярамағанлығын аңлатырға кәрәктер.

Бөгөнгө техника алға киткән заманда, барыбер белмәйҙәр, тип ҡасып ҡалып булмай. Аҡыллы техника шылтыратыу буйынса теләһә кемде табырға мөмкин. Әгәр инде оло кеше шаярһа, Рәсәй Федерацияһының Енәйәт кодексы уға түбәндәге "бүләктәрҙе" әҙерләгән: 200 мең һум штраф һәм 12-18 ай эсендә шул сумманы эш хаҡынан тотоп ҡалыу; ике йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәре; 3-6 ай ҡулға алыу йәки өйҙәге арест; 3 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү.

Штраф тигәндән, ошо эшһеҙлектән йонсоп күңел асыу ниәтенән генә эшләнгән шылтыратыуҙың дәүләт кеҫәһенә йылына күпмегә барып баҫҡанын белгегеҙ киләме? Яҡынса иҫәпләгәндә, 70 миллион самаһы. Уны аҡса ғына тип ҡарамағыҙ, был сумма эсенә әрәм булған ваҡыт, ярҙам көтөп тә ала алмай яҡты донъя менән хушлашҡан ғүмерҙәр хаҡы инмәгән әле... Ә елгә осҡан 70 миллион - ул яңы янғын һүндереү ҡорамалы, ҡайҙалыр һалыныр юл, ауырыу балаларға ярҙам, миллионлы ҡаланы йыл дауамында кәрәкле ресурстар меәнн тәьмин итеү.

"Бер тапҡыр ғына шаярҡандан нимә булһын..." - тип тә уйлауы мөмкин бәғзеләр. Әммә һәр кем шулай уйлай башлаһа, "бер тапҡыр" яйлап тиҫтәләргә, йөҙгә етеүе бар. Ошо ялған шылтыратыуҙар һаны менән елгә осҡан миллиондар һаны ла, ваҡытынан алда өҙөлгән ғүмерҙәр иҫәбе лә арта...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ӨФӨ УРТАҺЫНДА...

## өрәк-йорттар

**"Киске Өфө"нөң 45-се һанында Мәхмүт Яҡшығилдиндың Черниковка биҫтәһенең Орджоникидзе урамындағы иҫке йорттоң һаман да һүтелмәй ултырыуы, уны үҙҙәренә төйәк иткән маргиналдарҙың йорт янынан үтеп йөрөүсе балалар өсөн хәүеф тыуҙырыуы хаҡында әсенеүле фекерен уҡып, ҡулыма ҡәләм алырға мәжбүр булдым.**

Ошо көндәрҙә генә телевизорҙан күрһәтеүҙәренсә, баҡтиһәң, Өфөлә ошондай 40 өрәк-йорт бар икән! Документ буйынса унда йәшәүселәр күптән яңы фатирҙарға күсерелһә лә, улар һаман да торлаҡ йорт булып иҫәпләнә, сөнки теркәлеүселәр араһында күсенергә риза булмаусылар ҙа бар. Һөҙөмтәлә йортто һүтеп тә, уны һыу, электр тәьминәтенән өҙөп тә булмай. Асарбаҡтар өсөн ҡулайлы урын!

Һәм беләһегеҙме, ул әллә ҡайҙа ҡала ситендә түгел, ә уның тап йөрәгендә - ҡап уртаһында урынлашҡан. Ҡайҙа тиһегеҙме? Якутов исемендәге парктан алыҫ түгел, уның артында ғына. Әлбиттә, территория ҡоймалап алынған, әммә унда транспорт менән генә үтеп булмай, ә теләгән кеше инер-сығыр тишек таба.

Уйлап ҡараһаң, паркта бит көндөҙ ҙә, кис ҡырын да, хатта төнгә тиклем кеше була, балалар уйнай. Күрәһең, урыҫ әйтмешләй, күк күкрәмәй тороп, мужик суҡынмаған кеүек, проблеманы хәл итеү өсөн ниндәйҙер фажиғә йәки бәхетһеҙлек булыуын көтәләрҙер.

Әйткәндәй, видеосюжетта бындай йорттарҙы һүтеү өсөн яуаплы чиновниктар күсенергә теләмәүсе теркәлеүселәрҙе суд аша күсерергә уйлай. Милек хужаларына торлаҡтың баҙар хаҡын түләргә ниәтләйҙәр. Әгәр улар был суммаға риза булмаһа, йорттар тағы ла нисә йыл шулай ҡала ҡотон ебәреп, хәүеф сығанағы булып ултырыр микән?

**Самат СЫНБУЛАТОВ.**

*АФАРИН!*

# ЫШАНЫС КҮРҺӘТЕЛДЕ

**Ошо көндәрҙә, аныҡлап әйткәндә, 11-15 ноябрҙә Көньяҡ Африка Республикаһының Дурбан ҡалаһында Берләшкән Милләттәр ойошмаһы ҡарамағындағы урындағы власть органдарының Консультатив комитеты (ЮНАКЛ) "Берләшкән ҡалалар һәм урындағы властар" Бөтә донъя ойошмаһының VI Конгресын үткәрҙе. Ул донъяның 323 мең муниципалитетын берләштерә. Сарала Консультатив комитеттың яңы рәйесе һайланды һәм был вазифаға беренсе тапҡыр Рәсәй вәкиле - Ҡаҙан ҡалаһы мэры Илсур Метшин тәғәйенләнде. Быға тиклем БМО-ла урындағы власть мәнфәғәттәрен Йоханнесбург мэры Мфо Франклин Паркс Тау, Истанбул мэры Ҡадир Топбаш һәм Париж мэры Бертран Деланоэ яҡлаған.**

Быйылғы дәғүәселәр араһында Лиссабон мэры Фернандо Медина, Барселона мэры Ада Колау һәм Марокко Берләшкән короллеге мэрҙары ассоциацияһы президенты Мөхәммәд Будра булыуына ҡарамаҫтан, Устав комитеты ҡарары менән өҫтөнлөк Рәсәй вәкиленә бирелә. Был - илебеҙ вәкиленең шундай юғары вазифа биләүенең беренсе осрағы. Консультатив комитет рәйесе 3 йылға һайлана.

- Был донъя аренаһында Рәсәй Федерацияһының абруйы юғары булыуын раҫлай, - ти Илсур Метшин. - Бөгөн, донъяның ҡайһы ғына мөйөшөндә булмаһын, ҡалалар алдында торған проблемалар бер үк. Беҙгә муниципалитеттар араһында хеҙмәттәшлекте нығытырға, глобаль проблемаларҙы хәл иткәндә уларҙың ролен күтәрергә, ҡала халҡының тормошо тағы ла уңайлыраҡ булһын өсөн иң яҡшы тәжрибәләр менән уртаҡлашырға кәрәк.

- Һис шикһеҙ, был Илсур Рәйес улының ҡаҙанышы. Был йәһәттән ҙур эш башҡарылған. Өфө ҡала хакимиәте исеменән уны юғары вазифаға тәғәйенләнеүе менән ҡотлайым, - тине Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин. - Бөтөн донъя муниципалитеттары һәм төбәктәре мәнфәғәтен яҡлау берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙағы хеҙмәттәшлеккә яңы этәргес булыр. Өфөнөң "Берләшкән ҡалалар һәм урындағы власть Бөтә донъя ойошмаһының Евразия төбәк бүлексәһе" Халыҡ-ара ассоциацияһының Евразия советына инеүе лә быға асыҡ миҫал. Беҙ хеҙмәттәшлеккә һәр саҡ әҙер...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Рәсәй һәм БДБ илдәре 1998 йылда ошоға оҡшаш ойошма - коммерцияға ҡарамаған йәмәғәт ойошмаһын - Баш ҡалалар һәм эре ҡалаларҙың халыҡ-ара ассамблеяһын төҙөй. Уның маҡсаты - мегаполистарҙы социаль-иҡтисади йәһәттән үҫтереү маҡсатындағы эшмәкәрлекте берләштереү була. Ойошмаға 7 баш ҡала, 19 ҙур ҡала һәм БДБ-ның 9 иле инә. Бөгөн МАГ 87 ҡала һәм БДБ-ның 9 илен бергә туплаған. Ойошманың Президенты, РФ Федерация Советының иҡтисад сәйәсәте буйынса ағзаһы, Өфө ҡалаһының экс-мэры - Ирек Ялалов. Был инде Башҡортостан да киләсәктә урындағы власть органдары эшмәкәрлеген яҡшыртыу һәм камиллаштырыу йәһәтенән донъя кимәлендәге партнерҙары менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләр, тигән өмөт уята.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бик ныҡ йүтәлләгәндә

❖Тәбиғәт миҙгеле алышынғанда ныҡ йүтәлләтә башлай. Шул мәлдә кипкән баланды 6 сәғәт буйы ҡайнар балда төнәтергә, шунан уға 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу өҫтәргә, һауытты сепрәк менән төрөп, 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә бер нисә мәртәбә 1/3-әр стакан эсергә.

### Ҡан таҙартыу

❖Ҡабаҡ тештәрен он хәленә еткерергә, 100 гр шул онға 0,5 л бал ҡушырға ла 14 көн төнәтергә, марля аша бер нисә ҡат һөҙөргә. 1 ҡалаҡ төнәтмәне сирек стакан һыуға һалып, ашауҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә. Был дауаны йылына 2 тапҡыр 2-3 аҙна эшләргә.

### Сөгөлдөр һыҙлауҙы баҫа

Һыҙлаған быуындарға бал һөртөргә һәм ҡыҙыл сөгөлдөр япрағын тышҡы яғы менән ҡапларға ла полиэтилен ябып, өҫтөнән марля йә яулыҡ менән бәйләргә, мамыҡ шәл менән урап, йоҡларға ятырға. Иртәнсәк бәйләгән нәмәләрҙе алырға. Хәл яҡшыра.

### Тымауҙан ҡотолоу өсөн

❖Ваҡланған 1 ҡалаҡ керәнгә (хрен), 1 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ арыш оно ҡушып болғарға, ҡамыр итеп баҫырға һәм танау өҫтөнә һалырға. Дауаны көнөнә 3-4 мәртәбә эшләргә кәрәк. Керән тын юлын таҙарта, йоғошло сирҙән һаҡлай.

### Шифалы төнәтмәләр

❖Юл япрағы төнәтмәһе тиреләге йыйырсыҡтарҙы бөтөрә.

### Ҡалҡан биҙе

❖Шалҡан орлоҡтарын һауыҡҡансы муйынға тағып йөрөргә.

### Ҡан тамырында эре төйөрҙәр булһа

❖Бал, төрлө йәнлек майҙары менән даими массаж яһарға кәрәк.

Сәләмәт булығыҙ!

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Һәр фигураны элмә менән (обычный тамбур) тағы бер ҡат ҡаймалап ҡуйыу көньяҡ-көнсығыш нағышының үҙенсәлеге булып тора. Ғәҙәттә туҡымаға һыҙылған һүрәт һыҙатын элмә менән эшләп, шунан эсен ҡайығандар.**

XX быуатта ҡатмарлы ҡуш элмә техникаһы юҡҡа сыҡҡас, ҡайһы бер оҫтабикәләр һүрәттең һыҙат элементтарын (кәкерсәктәрен) тултырыу өсөн борондан билдәле "тәкәмөгөҙ" йәки "ҡыя сәнсем" нағыш йөйөн ҡуллана башлай; сәнсемде тәүҙә бер, аҙаҡ икенсе йүнәлешкә ҡаратып эшләйҙәр.



*Серге нағышы (БР, Белорет районы, Аҙналы ауылы) Т.К. Сурина фотоһы. 1976*

Көньяҡ-көнсығышта кәкерсәкле орнаментты "ҡусҡарлы" тип йөрөткәндәр. Ул күн, тимер, ағас, кейеҙ әйберҙәрҙе биҙәүҙә ҡулланылған, ҡайыу һәм аппликацияла өҫтөнлөк иткән. Халыҡта һаҡланып ҡалған йәки музей фондтарына эләккән бик күп боронғо әйберҙәргә ҡарап, көньяҡ-көнсығышта туҡыманы биҙәүҙә ҡайыу ҙур роль уйнаған, ә аппликация уны тулыландырып килгән, тип уйларға кәрәк.



*Элмә һәм суҡтар менән биҙәкләнгән боронғо янсыҡтар (БР, Баймаҡ районы) ВЭМ. XX б. башы.*

Башҡа төбәктәрҙә кеүек үк, күпселек биҙәкле әйберҙәр туй өсөн әҙерләнгән. Нағышланған әйберҙәр теҙмәһе малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорттарҙың көнкүреш үҙенсәлектәренә бәйле булған. Кейемдәрҙән тула һәм туҡыма сәкмән, еләндәрҙе биҙәгәндәр. Көньяҡ-көнсығышҡа хас туйға мотлаҡ кәрәкле әйберҙәр араһына серге, сергетыш, түшәктәр, ат егеүгә кәрәкле тартҡы, урын тартмаһы, бүләк янсыҡтар ингән.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ДӨРӨҪ ЯҘАЙЫҠ, ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘЙЕК!




## Нисә йәш һиңә, Башҡортостан?

Ни өсөн ошондай һорау бирҙем һуң әле? Сөнки гәзит-журналдарҙа ла, йәнәһе, "Башҡортостанға 100 йыл" тиҙәр ҙә хәбәр һөйләйҙәр. Әммә ләкин Башҡортостанға түгел, ә Башҡортостан Республикаһына йәки, ҡыҫҡараҡ әйтергә кәрәк икән, республикабыҙға 100 йыл, тип һөйләргә һәм яҙырға тейешбеҙ. Ә Башҡортостан улай уҡ 100 йыллыҡ ҡына ил түгел дә баһа. Боронғо яҙмаларҙа ул бынан мең йыл элек үк Башҡорт иле булараҡ телгә алына. Рәсәйгә ҡушылғас, Башҡортостан урыҫ телендәге документтарҙа Башкирия, һирәкләп Башкирь, Башкирская орда тип теркәлә.

Бер нисә миҫал килтереп үтәйем. Яңыраҡ бөйөк А.С. Пушкиндың "Пугачев тарихы" һәм "Капитан ҡыҙы" әҫәрҙәрен яңынан уҡып сыҡтым. "Пугачев тарихы" әҫәренән ошондай һүҙҙәрҙе килтереп үткем килә: "Вся Башкирия восстала, и бедствие разгорелось с вящей силою". Иғтибар итегеҙ: Башкирия ғына түгел, ә "вся Башкирия" тигән шағир. Ғөмүмән, А.С. Пушкин был тарихи әҫәрендә Башкирия атамаһын ете тапҡыр телгә ала.

Йәиһә бына "Материалы по истории Башкирской АССР" тигән күп томлы документтар йыйынтығының бер генә томын асып ҡараһағыҙ ҙа, уҙған быуаттарҙа урыҫ телендәге рәсми һәм ҡульяҙма сығанаҡтарҙа Башкирия атамаһын йөҙҙәрсә тапҡыр осратырһығыҙ.

Хөрмәтле журналистар, мөхәррирҙәр! Башҡортостанға, Башҡорт иленә йөҙ генә түгел, ә кәмендә мең йыл икәнен бер-берегеҙгә әйтә йөрөһәгеҙ, бик урынлы булыр ине. Эйе, дөрөҫ яҙайыҡ һәм дөрөҫ һөйләйек: Башҡортостан Республикаһына, республикабыҙға 100 йыл тулды быйыл.

## Хәреф үҙ урынындамы?

Был мәсьәлә миңә күптән инде тынғы бирмәй. 1990 йылдар аҙағында, мәҫәлән, урыҫ телендә бер томлыҡ ҡыҫҡаса "Башҡортостан" энциклопедияһы донъяға сыҡҡас, уның башҡортса баҫмаһын әҙерләү эшенә тотоноп киттек. Шул ваҡытта, бына ғәжәп, энциклопедиялағы ***А*** хәрефенән башланған мәҡәләләрҙең күбеһен томдың баш өлөшөнән иң аҙаҡҡы тип әйтерлек ***Ә*** хәрефенә күсерергә тура килде. Сөнки беҙҙең алфавитта ***а*** менән ***ә***, Саҡ менән Суҡ кеүек, береһе алда, икенсеһе бөтөнләй тиерлек аҙаҡта тора. Ә инде, билдәле булыуынса, башҡорт телендәге ***ә*** менән башланған һүҙҙәр, исем-фамилиялар, атамалар урыҫ телендә ***а*** хәрефе аша әйтеп һәм яҙып йөрөтөлә. Мәҫәлән: Әй - Ай, әйле - айле, әйтеш - айтыш, Әбүбәкер - Абубакир, Әбйәлил районы - Абзелиловский район, Әлшәй районы - Альшеевский район, Әлмөхәмәтов - Альмухаметов, Әсфәндийәров - Асфандияров һ.б. Әгәр ҙә ***а*** менән ***ә, о-ө, у-ү, ы-и*** һымаҡ, береһе - ҡалын, икенсеһе нәҙек әйтелешле һуҙынҡылар булараҡ, алфавитта йәнәш торһа, энциклопедияны төҙөүселәргә алда әйтеп үткән мәшәҡәткә тарырға тура килмәҫ ине. Хәйер, ул ғынамы ни? Бына ете томлы "Башҡорт энциклопедияһы"-ның башҡорт телендәге I томы ***А*** хәрефе менән асыла, ***Ә*** хәрефенә башланған һүҙҙәр иһә иң аҙаҡҡы, VII томға тура килгән. Былар бөтәһе лә - ошо ***а-ә*** хәрефтәренең алфавитта, йәнәш торорға тейеш булһалар ҙа, әлеге Саҡ менән Суҡ хәлендә тороп ҡалыуында.

Алфавитта ***а-ә*** хәрефтәрен йәнәш урынлаштырайыҡ, тип телселәргә әйткәнем дә бар, әммә әлегә бер кем дә ҡолағына элгәне юҡ. Ә шулай ҙа боҙ урынынан ҡуҙғалды булһа кәрәк. Бына, мәҫәлән, 2016 йылда Мәскәүҙең "Наука" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Башкиры" тигән монографияның (яуаплы мөхәррирҙәре Р.Ғ. Кузеев, Е.С. Данилко) 128-се битендә "Башҡорт алфавиты ниндәй тәртиптә бирелгән: ***Аа, Әә, Бб, Вв, Гг, Ғғ*** һ.б. Афарин тип әйтергә генә ҡала.

Телдә һәр һүҙ, хатта һәр хәреф үҙ урынында булырға тейеш. Башҡорт теленә арналған хеҙмәттәрҙең авторҙары был тәҡдимгә иғтибар итһендәр ине.

## Тел нескәлек талап итә

Яңыраҡ бер гәзиттә "Красноусол" шифаханаһы тураһындағы мәҡәләне бик ҡыҙыҡһынып уҡып ултырҙым да, иң аҙаҡта бер фото аҫтындағы "Һамрау" SPA үҙәге" тигән тексты күреп, йығылып китә яҙҙым. Нисек инде "Һамрау" булһын, ти, ундағы алтаҡтала ла "Самрау" тип дөрөҫ яҙылған да баһа! "Самауыр"ҙы "һамауыр" тип әйткән һымаҡ килеп сыға түгелме һуң? "Урал батыр" эпосын белгән башҡорт журналисы бындай хатаға юл ҡуйырға тейеш түгел ине.

"Тейеш түгел", тинем дә ул, ләкин телгә, һүҙгә иғтибарһыҙлыҡ әленән-әле осрап тора шул. Шуға күрә, әгәр ҙә бер-беребеҙҙең хатаһын ваҡытында күреп, үпкәләшмәйенсә генә үҙебеҙҙең фекерҙәребеҙ менән уртаҡлашып торһаҡ, тик файҙаға ғына булыр һымаҡ. Бына, мәҫәлән, "Киске Өфө"лә (№44, 2019) "Эш юҡ түгел, халыҡ ялҡаулана бара" тигән мәҡәлә баҫылып сыҡты. Ҡайҙан килеп сыҡты һуң әле ул "юҡ түгел" тигән һүҙ? Беҙ бит бындай осраҡта элек-электән "бар" тип кенә әйтә торғайныҡ. Әлеге мәҡәләнең авторы ла "Эш бар ҙа ул, халыҡ ялҡаулана бара" тип яҙһа, нәйәт булыр ине түгелме икән?

Гәзит мәҡәләләренең береһендә "аманати һүҙҙәр" тигәнде күреп, шулай уҡ аптырауға ҡалдым. Ә бит автор "аманат булырҙай һүҙҙәр" тип яҙһа, әҙәм рәтлерәк булыр ине. Фольклорсылар "хөрәфәтле әкиәттәр" тигәнде "хөрәфәти әкиәттәр" тип индереп ебәрҙеләр ҙә ул, ләкин "аманати" тигән һүҙ инеп китерме телебеҙгә, әйтә алмайым - бигерәк сәйер яңғырай.

Фольклорсылар тигәндән, уларҙың ҡайһы берҙәренә Мәскәүҙә Рәсәй Фәндәр академияһының Донъя әҙәбиәте институтында аспирантурала уҡып ҡайтыу бәхете тейҙе. Ләкин нишләптер шул ғилми учреждениены телгә алғанда, "бөтә" һүҙен өҫтәп, "Бөтә донъя әҙәбиәте институты" тип яҙа башланылар. "Бөтә (бөтөн) донъя" тигәс, "всемирный" булып сыға түгелме һуң. Ә ул - Институт мировой литературы, всемирной түгел.

Телдә бик йыш ҡулланылған, шуның өсөн дә бик иғтибарлы булыуҙы талап иткән һүҙҙәр бар. Мәҫәлән, "аяҙыҡканда" тигән һүҙ телевидение аша көнөнә әллә нисә тапҡыр ҡабатлана. Ә бына ҡайһы бер дикторҙар уны, боҙоп, "аяҙайыҡканда" ти ҙә торалар. Иртәнге "Сәләм" программаһын алып барыусылар ҙа көн һайын тиерлек "Әйҙәгеҙ фото төшәйек" тип һөйләйҙәр. Фото төшмәйҙәр, ә фотоға төшәләр!

"Беҙҙең районда буш ултырған иҫке йорттарҙың күплеген билдәләп үткем килә", - тип яҙа бер автор. Ә бит "күплеген" урынына "күп булыуын" тип яҙһа, дөрөҫөрәк булыр ине. Сөнки "күплек" ул - нимәнендер күберәк булыуын белдергән грамматик категория. Телдә һүҙҙәр йә күплектә, йә берлектә ҡулланылырға мөмкин.

"Сәксәк" тигән бик киң билдәле ашамлығыбыҙ бар. Ләкин башҡортса-урыҫса һүҙлектәргә уны "сак-сак" тип алаһы урынға "чак-чак" тип керетеп ебәргәндәр. Ә бит ашамлыҡ үҙе лә, уның атамаһы ла беҙҙең милли колорит билдәһе. Шуға күрә һүҙлектәрҙең киләһе баҫмаларында был һүҙҙең урыҫса яҙылышын "сак-сак" тип төҙәтергә кәрәк буласаҡ. Ә инде төрлө сауҙа маркаларында ҡулланғанда уның урыҫса яҙылышын "сак-сак" тип алырға тейешбеҙ.

Беҙҙә "тип" киҫәксәһе алдынан һәр ваҡыт өтөр ҡуйылырға тейеш тип уйлайҙар, ахыры. Әммә бына был һөйләмдә "тип"тең алдынан өтөр ҡуйыу мотлаҡмы? "Йәштәрҙең Санкт-Петербургҡа йә Мәскәүгә юлланыуын мин "көнбайыш дрейфы", тип атар инем". Өтөр бында бөтөнләй кәрәк түгел. Ә хәҙер ни өсөн бер үк һөйләмдә өҫтөөҫтөнә "итеү" һүҙе ҡулланылғанлығын асыҡлап ҡарайыҡ. Гәзит мәҡәләләренән миҫалдар: "Быны барса төбәктәргә лә хас дөйөм тренд ***итеп*** ҡабул ***итергә*** кәрәк"; "Бая үрҙә әйтелгәнсә, кешене тәмле ризыҡ биреүсе ***итеп*** кенә ҡабул ***итә***"; "Уның һәр яңы шиғырын, йырын үҙемә сәләм ***итеп*** ҡабул ***иттем***". Был һөйләмдәрҙә, минеңсә, авторҙар, өтөр ҡуйырғамы, юҡмы, тип икеләнгәнгә күрә, күрәләтә "тип" урынына "итеп" һүҙен ҡулланғандар. Әммә, мәҫәлән, "үҙемә сәләм тип ҡабул иттем" тип алынған булһа ла, бер ниндәй өтөр ҡуйырға кәрәк булмаҫ ине.

Хәҙерге ваҡытта мәктәптә туған телде уҡытыу алымдары тураһында һүҙ барғанда нигеҙҙә телмәр үҫтереү, коммуникатив принциптан сығып эш итеүгә өҫтөнлөк бирелә. Эйе, тел өйрәнгәндә иң мөһиме фекерләү ҡеүәһен үҫтереү. Әммә әҙәби әҫәрҙәр, матбуғат, радио һәм телевидение теле өсөн дөрөҫ яҙыу һәм дөрөҫ һөйләү барыбер һәр ваҡыт мөһим талап булып ҡала. Яҙабыҙ икән, телебеҙгә тел тейҙерерлек булмаһын, йәмәғәт!

**Рәшит ШӘКҮР.**

✓ *Әлеге ваҡытта йәшәгән ерҙәренә килгәнгә тиклем түңгәүерҙәр Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында көн итә, был территорияға хәҙерге Татарстандың төньяҡ-көнсығыш районадары ла инә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҠУРАЙСЫЛАР ИЛӘҮЕ ТҮҢГӘҮЕР ЫРЫУЫНАН БЕҘ



Ошо тарихи фараздарҙы дөйөмләштереп, шуны әйтергә була. Ысынлап та, түңгәүерҙәрҙең боронғо этник тамырҙары монгол ҡәбиләләренә ҡараған кунграттарҙың бер тармағынан булып, Евразияның төньяҡ-көнбайыш тарафтарында Сыңғыҙ хан һәм уның варистары заманында, XIII быуатта ғына билдәле була. Тарихи Башҡортостан ерлегендә, XVIII быуат башында Себер даруғаһында Конрат олоҫо теркәлгән. 1735 - 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалынан аҙаҡ ул олоҫ башҡаса документтарҙа телгә алынмай. Күрәһең, конграт (ҡуңрат) олоҫо башҡорттары Ҡыуаҡан олоҫона индерелә. Ә түңгәүер ырыуы составына улар менән тығыҙ бәйләнештә булған бөрйәндәрҙең бер өлөшөнән башҡа, байлар һәм юрмый башҡорттарының вәкилдәре лә инеп китә. Бәлки, киләсәктә геногеографик тикшеренеүҙәр аша был мәсьәләгә билдәле кимәлдә асыҡлыҡ индереп булыр.

Әлеге ваҡытта йәшәгән ерҙәренә килгәнгә тиклем түңгәүерҙәр Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында көн итә, был территорияға хәҙерге Татарстандың төньяҡ-көнсығыш районадары ла инә. Р.Ғ. Кузеев билдәләүенсә, ошо заманда түңгәүерҙәр төньяҡ-көнбайыш башҡорттары менән тығыҙ бәйләнештә инә. Был түңгәүер ырыуында өпәй, имес, юрмый, бай кеүек түбәләр барлыҡҡа килеүенә сәбәп була. Тикшеренеүселәр С. Мираҫов һәм П.С. Назаров булғар һәм мишәр төркөмдәренең дә үҫәргән һәм түңгәүерҙәр составына инеү мөмкинлеге хаҡында яҙа. Көнбайыш башҡорттарынан булған юрмый вәкилдәренең түңгәүерҙәргә ҡушылыуын тыумышы менән Йылайыр районының Ишембәт ауылынан булған яҙыусы-фронтовик Төхвәт Мораттың (1906 - 1944) шәжәрәһе раҫлай: Ҡуңрат бей - Түңгәүер бей - Хаҡҡолай - Иламан - Ҡыстәнә - Һарса - Юрмый хан - Бүкәй - Бикбулат - Морат - Ҡоломбәт - Юламан - Аллағуат - Фаттах - Төхвәт.

Р.Ғ. Кузеев, Р.З. Йәнғужин түңгәүерҙәрҙең Көньяҡ Уралға күсеп килеүен монгол-татар яуы менән бәйләп аңлатһа, археолог, крайҙы өйрәнеүсе Р.Б. Әхмәров уларҙың башҡа башҡорт ырыуҙары менән бергә бынан күпкә алдараҡ, халыҡтарҙың бөйөк күсеше дәүеренән (VI быуаттан) һәм унан да әүәлерәк ошо ерҙәрҙә төпләнеүе хаҡында фараз итә.

Төньяҡ (урман) түңгәүерҙәр Ағиҙел йылғаһы үрендә, Урал арьяғында урынлашҡа, көньяҡ (ялан) түңгәүерҙәр Һаҡмар, Йылайыр һәм Яйыҡ буйҙарында таралып йәшәй. Рус документтарында Түңгәүер (Тангаур) олоҫтары XVII быуаттан башлап теркәлә башлай. Ә.З. Әсфәндиәровтың бер хеҙмәтендә күрһәтелгән архив документына ярашлы, 1672 йылда түңгәүер ырыуынан булған, хәлле генә көн итеүсе Дәүләтсура Тинсаровтың аҫаба ерҙәре һәм балыҡ тотоу биләмәләре Яйыҡ йылғаһының ике ягында ла булыуы теркәлгән.

XVIII быуатта түңгәүерҙәрҙең бер өлөшө көнбайышҡа күсеп китеп, Кәрәлек йылғаһы буйҙарында йәшәй башлай. М.М. Маннаповтың мәғлүмәттәре буйынса, Волга арьяғы далаларындағы Бобров Гай (Ҡондоҙло, Бигәнәш), Диңгеҙбай, Кинйәғол, Кочкиновка, Мәҡсут, Моратша һәм Ташбулат ауылдарына түңгәүер башҡорттары нигеҙ һала.

1725-1726 йылдарҙа Кунгур бургомистры Юхнев Нуғай даруғаһында Түңгәүер (Тангаур) олоҫо булыуын үҙе тәҙәткән исемлеккә индергән, әммә башҡорттар ошо батша чиновнигының хеҙмәткәрҙәренә үҙ биләмәләренә инергә рөхсәт итмәгәнлектән, бындағы хужалыҡтар һәм кеше иҫәбе билдәһеҙ булып ҡала. 1730 йылда камерир Ф. Жилин, Өфө кешеләре С. Третьяков һәм И. Гавренев мәғлүмәттәре буйынса төҙәлгән реестрҙа Нуғай даруғаһында Ағиҙел һәм Һаҡмар йылғалары буйҙарында биләмәләре булған Түңгәүер олоҫо, шулай уҡ Ҡазан даруғаһында Ыҡ йылғаһы буйында тағы ла бер Түңгәүер олоҫо теркәлгән. 1739 йылда кенәҙ Урусов бойороғо буйынса төҙәлгән документта түңгәүерҙәрҙең Нуғай даруғаһында ике олоҫо күрһәтелә. Урман-Түңгәүер ("Урман-Тимгаурская волость") олоҫонда 80 хужалыҡта ир-атҙан 161 кеше, Ялан-Түңгәүер ("Елан-Тиргаурская волость") олоҫонда 74 хужалыҡта 198 ир заты теркәлә.

1863 йылда таблица формаһында төҙәлеп, "Список башкирских деревень с разделением их на волостные и сельские общества", тип исемләнгән документта ла түңгәүер башҡорттарының ике олоҫо теркәлгән. 1-се Ырымбур кантоны булегендә 14-се һан аҫтында идара үҙәге Исмәғил ауылында булған Түңгәүер олоҫо теркәлгән, унда барлыһы 28 ауылдан торған 6 ауыл йәмғиәте (обществолары) күрһәтелә. 2-се Верхнеуральск кантоны бүлегендә 6-сы һан аҫтында идара үҙәге Аҫҡар ауылында булған айырым Түңгәүер олоҫо булып, уның Ишҡол, 1-се Аҫҡар һәм 2-се Аҫҡар ауыл йәмғиәттәренә барлыһы 10 ауыл индерелгән. Ырымбур губернаһы хакимиәтенең 1865 йылдың 17 ғинуарындағы ҡарары менән берләштерелгән Тамъян-Түңгәүер олоҫо булдырыла.

1915 йылда көньяҡ түңгәүерҙәре биләмәләре ике айырым олоҫҡа - 1-се һәм 2-се Түңгәүер олоҫтарына бүленә. 1923 йылда теркәлгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, был ике олоҫта барлыһы 11 497 башҡорт кешеһе теркәлгән. 1-се Түңгәүер олоҫоноң үҙәге Юлдыбайҙа, 2-се Түңгәүер олоҫо үҙәге тәүҙә Смакта (Исмәғил), 1924 йылдың 25 июненән Мөхәмәтрәхим (Матрай) ауылында була. 1926 йылда 2-се Түңгәүер олоҫоноң 57 ауылында 2119 хужалыҡ була. Олоҫ башҡарма комитетының (волисполком) тәүге рәйесе Далха Йомағужин, 1922 йылдан - М. Ҡаҙаҡҡолов, 1927 йылдан - Мәхмүт Әхмәтов тигән кешеләр эшләй.

Хәҙерге Йылайыр, Хәйбулла, Баймаҡ һәм Күгәрсен райондарында көн иткән ялан түңгәүерҙәренең Татлыбай (Мишәр-Татлыбай), Түңгәүер, Ситәй, Туҡһары, Сабай, Нуғайлар, Мышылар, Һәркәй, Бүкәт, Ҡара-Ҡыпсаҡ, Ҡалмаҡ түбәләре булыуы билдәле. Информаторҙарҙан яҙып алынған мәғлүмәттәргә ярашлы, ялан түңгәүерҙәрендә түбәндәге ырыу бүлемдәре - бүре, күк мейе, суҡмар аяҡ, төрөй, теләнсе, юрмый, бур, ҡалмаҡ исемле аралар була.

Урман түңгәүерҙәре хәҙерге Әбйәлил, Бөрйән, Белорет райондарындағы ауылдарҙа йәшәй, уларҙың биксәнтәй, ҡолтай, яубаҫар, ҡауҫы (селән ҡошо), сөйөш, булдыҙ, түмәй, мышаяҡ, аптраҡ аралары булыуы билдәле. Мәҫәлән, ғалим А.А. Камалов Беренсе Аҫҡар ауылында түмәй, мышаяҡ, өпәй, аптраҡ, Икенсе Аҫҡар ауылында - түмәйҙәр, мышаяҡтар, упайҙар, аптраҡтар, тупыстар, сыуаштар, иместәр аралары булыуын иҫкә ала.

Ялан түңгәүерҙәренең иң боронғо ауылдары - Юлдыбай (Бәкер), Мәҡсүт (Юлуш), Исҡужа (Бүтүк), Ҡашҡар (Мамыт), Ғүмәр (Букәт), Ишембәт, Түңгәүер (Дүңгәүер, Смаҡ-Түңгәүер), Тимер, Алғаҙы, Ҡыуат, Әбәйҙулла. Шуныһы ҡыҙыҡлы: хәҙерге Күгәрсен районындағы берҙән-бер түңгәүер башҡорттары ауылы Смаҡ-Түңгәүер VIII ревизия (1841-1842 йй.) материалдарында IX башҡорт кантонының 21-се йортона (юртаһына) ҡараған Түңгәүер олоҫо Түңгәүер түбәһе ауылы итеп теркәлгән. Был ауыл бик асыҡ булмаған сәбәптәр арҡаһында үҙ ырыуҙаштарынан айырылып китеп, бөрйән һәм ҡыпсаҡ ауылдары араһында ер биләмәләренә эйә була алған. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр билдәләүенсә, был тарафҡа уларҙың бөрйән-ҡыпсаҡ конфликты заманында килеп сығыуы мөмкин. Ошо хаҡта 1907 йылда Ырымбур ҡалаһында нәшер ителгән ғилми хеҙмәттәрҙең береһендә, "К статье о башкирских тамгах Д.Н. Соколова", тип аталған мәҡәләлә бына ниҙәр бәйән ителә: "Ырымбур өйәҙе Бөрйән-Ҡыпсаҡ олоҫоноң төньяҡ-көнсығыш мөйөшөндә, Ыҡ йылғаһының урта ағымынан йыраҡ түгел урынлашҡан ҙур булмаған Смаҡ-Түңгәүер ауылында бөрйән тамғалары өҫтөнлөк итә. Ауыл исеменең икенсе яртыһының ни өсөн шулай аталыуын һорашҡас, ауыл кешеләре үҙҙәренең ата-бабаларының бынан биш быуын әүәлерәк ысынлап та Түңгәүер еренән килеүе хаҡында әйтте. Был бөрйән тамғаларын (сығыштары буйынса - түңгәүерҙәрҙеке, йәшәгән урындары буйынса ҡыпсаҡтарҙыҡы түгел) былай аңлатып була: был башҡорттар бында бөрйәндәр менән, әйтергә кәрәк, уларҙың әләмдәре аҫтында килә, шунлыҡтан күрһәтелгән ваҡытты мин Бөрйән баҫымсылығы менән бәйләйем... Ғәҙәттә ҡабул ителгәнсә, йөҙ йыллыҡ ос быуындан хасил була икән, ул саҡта баҫымсылыҡ ваҡыты XVIII быуаттың баштарына (уның тәүге ос тиҫтә йылына) ҡарай."

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы. Башы 46-сы һанда).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Был миҫалдарҙан дәүләттең милләтте ойошторoccoуҙағы урынын асыҡ күрергә була. Йәғни төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙе, халыҡтарҙы бергә уҡмаштырып, кешеләргә уртаҡ идеяны һеңдереп, уларҙа уртаҡ бер аң, донъяуи ҡараш формалаштырып, төрлө сығышлы кешеләрҙе бер халыҡ итеп ойоштороп донъяға танытыусы көс дәүләт була. Аҙаҡ дәүләт эсендә йәшәүсе халыҡ ошо дәүләт атамаһы менән билдәле булып китә. Был тарих ҡануны. Шулай булғас, беҙ, башҡорттар ҙа, тәүҙә төрлө сығышлы төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙән Башҡорт атамалы дәүләт эсендә уҡмаша башлап, аҙаҡ ошо дәүләт атамаһын ҡабул итеп, аңыбыҙға һеңдереп, Башҡорт тигән халыҡ атамаһына күскәнбеҙ, тип әйтергә була.

Беҙҙең халыҡ өсөн генә тарих айырым ҡанундар уйлап сығармаған. Беҙ ҙә дөйөм тарихи ҡанундарға буйһонғанбыҙ, буйһонабыҙ. Был хәҡиҡәт. Тарихтағы төрлө ваҡиғалар арҡаһында тәүҙә Башҡорт дәүләте бигүк көсәйеп китә алмаған. Икенсенән, Башҡорт тигән дәүләт һәм ошо атаманы ҡабул иткән халыҡ бик иртә, әле яҙма тарих бигүк алға китмәгән дәүерҙәрҙә, ҡеүәтле Ҡытай, Иран, Греция, Һиндостан кеүек дәүләттәр формалашҡан ерҙәрҙән ярайһы уҡ йыраҡта, ситтәрәк формалашыу арҡаһында уның тураһында мәғлүмәттәр ҙә беҙгә бик аҙ килеп еткән. Әммә килеп еткәндәрен тикшереү, анализлау ҙа беҙҙең халыҡтың дәүләте булғанлығын күрһәтә. Халҡыбыҙҙың боронғоһона ҡараған төрлө мәғлүмәттәр киләсәктә лә табылыр. Әле беҙгә эҙләнергә лә эҙләнергә кәрәк.

Шуны ла әйткем килә: Башҡорт тигән дәүләт үҙаллылығын юғалтҡан көндә лә был дәүләт эсенә инеп киткән ырыу, ҡәбиләләр үҙҙәренең башҡортлоғон, дөйөм телен, мәҙәниәтен быуаттар һинауы аша һаҡлап беҙҙең көндәргә еткерә алған. Тимәк, уларҙы Башҡорт итеп берләштереүсе мәнфәғәттәр, ихтыяждар әле лә йәшәй һәм үҙ көсөн һаҡлай. Шуға күрә үҙебеҙҙең тарихсылар, философтар, психологтар һәм башҡа һөнәр эйәләре башҡортто (төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙе) Башҡорт иткән ихтыяж, мәнфәғәттәрҙе өйрәнеүгә лә иғтибарҙарын йүнәлтһендәр ине, тип өндәшке килә.

Башҡорттоң боронғо тарихы, дәүләтселеге, мәҙәниәте тураһында һүҙ йөрөткәндә, улар халҡыбыҙҙың иҫ киткес бай фольклорын сығанаҡ булараҡ гел күҙ унында тоторға тейештәр. Башҡорт халыҡ ижадында халыҡтың боронғо үткәне тураһында бихисап фактар, миҫалдар һаҡланған. Уларҙы күрә белергә, ихтирам итергә генә кәрәк. Ихтирамлы, объектив ҡараш булһа, улар беҙгә әллә күпме мәғлүмәт бирер ине.

Был мәҡәләгә өҫтәп, башҡорттоң боронғо дәүләтенең булғанлығына кире ҡаҡҡыһыҙ бер дәлил тәҡдим итәм. 1982 йылда Берлин ҡалаһында "Славяне и Скандинавы" исемле китап донъя күрә. Ошо китаптың 74-се, 75-се биттәрендә XII быуат ғәрәп географы Идриси картаһы баҫылған. Был картала Иҙел болғарҙарынан әҙ генә төньяҡ-көнсығыштараҡ, йәғни хәҙерге башҡорт ерҙәрендә Табын ханлығы (дәүләте) күрһәтелгән. Ғәрәп географы Идриси тураһында күптәр уҡыған, ишеткәне барҙыр. Беҙҙең тарихсыларыбыҙ башҡорттар тураһында яҙғанда Идрисиға йыш һылтанма яһайҙар. Был географтың хеҙмәтендә карталар бик күп, улар араһында башҡорттар айырым күрһәтелгән карта ла бар.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Олатайыбыҙ Рамаҙан Ҡотошевтың фронтовик-яҙыусы булыуы, унын әлеге 96 йәшендә лә яҙыу-һыҙыу өҫтәле артында ултырыуы, тормошон ҡәтғи эш тәртибендә тота алыуы беҙгә, йәш быуынға, шулай уҡ ҙур өлгө.*

# АТАНАН КҮРГӘН

## йәғни Хирургтың

**Ошо көндәрҙә танылған ғалим-хирург, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Вил Мамил улы Тимербулатовтың улдары, шулай уҡ профессорҙар, медицина фәндәре докторҙары Мәхмүт һәм Шамил Тимербулатовтар менән осрашып-аралашыу мөмкинлеге тыуҙы. Башҡорт дәүләт медицина университеты уҡытыусылары, дауалаусы хирургтар ҙа булған егеттәрҙең буш ваҡытын тотоп алыу ауыр булһа ла, улар "Киске Өфө" гәзитенә хөрмәт күрһәттеләр. Башҡортостан хирургтары ассоциацияһы тарафынан булдырылған "Алтын скальпель" юғары наградаһын да яулаған хирургтар менән медицинаға бәйле һәм бик үк бәйле булмаған темалар хаҡында ла һөйләштек. Ә материалдың маҡсаты - уҡыусыларыбыҙға мәртәбәле, эшлекле, һөнәрле башҡорт ир-егеттәрен күрһәтеү.**

**Әйҙәгеҙ, ғәҙәти һорауҙан башлайыҡ: хирург һөнәрен атайығыҙ өлгөһөндә һайлағанһығыҙҙыр, шулай бит?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Беҙҙең иғтибар үҙәгенә башҡа һөнәрҙәр эләкмәне лә, ҡаралманы ла, тип әйтергә була. Бөтөн ғаиләбеҙ менән шул бер һөнәр, шул бер эш, бер темалар солғанышында йәшәгәсме, миңә, мәҫәлән, факультетты ғына һайларға ҡалды. Бала саҡтан табип һөнәренең абруйлы, яуаплы һөнәр икәнен аңлап үҫкәйнек бит инде.

**Шамил Тимербулатов:** Бала саҡтан беҙ өйөбөҙҙә атайҙың дуҫтарын, коллегаларын ғына күреп өйрәнгәнбеҙ. Ҡунаҡтар араһында ла һөйләшеү шул дауахана, ауырыуҙар, операциялар, төрлө медицина алымдары хаҡында барҙы. Шуға ла медицина беҙгә иң аңлайышлы өлкә булып тойолдо.

**Һеҙ Өфө егеттәре бит инде, шулаймы? Бала саҡ хәтирәләре ниндәй?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Мин тыуғанда атай-әсәйем әле студенттар ғына була. Һуңынан улар йүнәлтмә буйынса Ишембай районының Маҡар ауылына эшкә ебәрелә. Әсәйем уҡытыусы, ә атайым һигеҙ ауылға берҙән-бер доктор булып хеҙмәт юлын башлайҙар. Мине мәктәп ашнаҡсыһына ҡалдырып йөрөйҙәр. Шул апайҙың алты улы менән аралашып, телем саф башҡортса асылып, ауыл малайы булып үҫтем. Унан Благовещен ҡалаһына күстек һәм унда ла атай-әсәй көнөтөнө эштә булды. Атайыбыҙ артынан теләһә ҡайһы ваҡытта "тиҙ ярҙам" машинаһы килеп етә ине. Хатта ҡунаҡҡа йә киноға киткәндә лә, ҡайҙалығыбыҙҙы белдереп, ишектә ҡағыҙ ҡалдырып йөрөйбөҙ. Әсәй киске мәктәптә лә уҡыта, дәрестәре төнгәсә бара. Ҡайһы саҡ атай артынан килгән машина яңғыҙ ҡалдырмаҫ өсөн мине лә алып китә лә, мәктәпкә индереп ҡалдыра. Унда иһә әсәйҙең дәрестәре бөткәнен көтөп, коридорҙа йөрөп торам. Шулай бик ҡыҙыҡлы үтте бала саҡ.

Мәктәптә уҡығанда ла шулай үҙаллы булынды. Атай-әсәйебеҙҙең минең һәм ҡустымдың дәрес әҙерләүҙәргә ҡыҫылғанын, нимәгәлер әрләгәнен, язаға тарттырғанын хәтерләмәйем. Шул уҡ ваҡытта уларҙы борсолдормаҫҡа, уларҙың ризаһыҙ ҡарашын тоймаҫҡа ла тырыштыҡ. Уларҙың шулай үҙҙәрен тотошлайы менән эшкә биреп, көйөп-янып йәшәүҙәре үҙе үк өлгө ине. Һәм ошо күренеш беҙҙе стимулда тотҡандыр ҙа инде.

Мин бала саҡта русса белмәй инем, русса аңламағанмындыр ҙа әле. Ишембайҙан Благовещенға күскәс, шул русса белмәү арҡаһында күңелһеҙ хәлдәр ҙә булғыланы. Рус телле балалар минән көлә лә, миңә иһә, намыҫымды яҡлап, дөмбәҫләшергә тура килә. Өфөлә лә беҙҙең ғаиләлә туған тел үҙәктә булды, өйҙә башҡортса аралаштыҡ. Һәр хәлдә, беҙ әле лә башҡортса аңлай, аралаша ғына түгел, уҡый ҙа, яҙа ла беләбеҙ.

**Шамил Тимербулатов:** Мин Өфө ҡалаһында тыуып үҫтем. Карл Маркс урамында йәшәп, эргәләге 3-сө мәктәпкә уҡырға йөрөнөм. Әлбиттә, миңә, кинйә бала булараҡ, йомшағыраҡ мөнәсәбәт эләкте. Ағайыма һалынған ҡайһы бер яуаплылыҡтар миңә эләкмәне, тиергә лә була.

Атай менән әсәй беҙҙе ниндәйҙер алымдар менән тәрбиәләп, иғтибар үҙәгендә тотоп үҫтермәһә лә, дөйөм кешелеккә хас бөтөн тәрбиәне лә биргән, тип иҫәпләйем. Мәҫәлән, бер туған ағай-ҡустыға татыу булыу, берберенде яҡлап, ҡарап алып йөрөү, йәлләй, аңлай белеү, әҙәп сиктәрен үтмәү, намыҫына ҡаршы бармау, башҡаларҙы кәмһетмәү, кешенекенә теймәү һәм башҡа һабаҡтар төп урында булды беҙҙең тәрбиә мәктәбендә. Беҙ был төшөнсәләрҙе атай-әсәйгә ҡарап, уларҙың ҡылыҡтарын күҙәтеп тә аңланыҡ һәм үҙебеҙгә һеңдерҙек.

**Һеҙҙең ғаиләлә башҡорт донъяһында билдәле булған шәхестәр бар. Улар хаҡында һөйләй алаһығыҙмы?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Әлбиттә. Ғәзим Шафиҡов беҙҙең өләсәйҙең - Ғәлиә Ғәзиз ҡыҙының бер туған ҡустыһы, беҙҙең ғаилә ағзаһы икәнен ишетеп кенә түгел, ә уның менән күп йылдар аралашыуҙан беләм. Йәғни, уның башҡорт донъяһында айырым урын тотҡан шәхес булыуын яҡшы беләбеҙ. Әйткәндәй, өләсәйем Ғәлиә Ғәзиз ҡыҙының тормошо ла медицина институты менән тығыҙ бәйләнгән, ул утыҙ йыл нормаль анатомия кафедраһында ассистент булып эшләгән.

Ә инде олатайыбыҙ Рамаҙан Ҡотошевтың фронтовик-яҙыусы булыуы, уның әлеге 96 йәшендә лә яҙыу-һыҙыу өҫтәле артында ултырыуы, тормошон ҡәтғи эш тәртибендә тота алыуы беҙгә, йәш быуынға, шулай уҡ ҙур өлгө.

Беҙ атай-олатайҙарыбыҙ менән аралашып йәшәгән бәхетле быуын. Һәр кеше үҙен дәүерҙәр сынйырын тоташтырған шәжәрәнең бер өлөшө итеп тойорға тейеш, был бик мөһим, минеңсә. Мин, мәҫәлән, олатайҙарымдың Зәки Вәлидиҙең башҡорт ғәскәрендә һуғышҡанын беләм. Атайҙың олатаһы Сәхиулла Ғөбәйҙуллин Вәлидиҙе Төркөстанға тиклем оҙатып бара ла, Төркиәгә китергә теләмәй, кире боролоп ҡайта. Ә әсәйҙең олатаһы Ғәзиз мулла башҡорт ғәскәре муллаһы була, аҙаҡ эҙәрлекләүҙәрҙән ҡасып, оҙаҡ йылдар Ҡырғыҙстанда йәшәргә мәжбүр була. Уның ҡатыны, оло өләсәйебеҙ Мөкәрәмә уҡымышлы Халиковтар тоҡомонан. Хәҙрәт ҡыҙы булғаны өсөн юғары уҡыу йортона эләгә алмаһа ла, аҙаҡтан, күп балалар әсәһе булғас та, юғары белем алып ҡуя. Бына шундай кешеләр була беҙҙең өләсәйҙәр, олатайҙар.

**Шамил Тимербулатов:** Мин олатайҙың башҡорт телен бөтөн байлығында белеүенә һәм шул байлыҡты ғүмер буйына һаҡлап йөрөтә алыуына һоҡланам. Үкенескә ҡаршы, беҙ туған телде бар нескәлегендә белеп етмәйбеҙ бөгөн. Ә бына Рамаҙан Ҡотошев кеүек кешеләр уны йәшәтә һәм килер быуындарға тапшыра ала. Шулай уҡ тарихты ла ныҡлап өйрәнеүселәрҙең береһе ул. Беҙ, бына, барыбыҙ ҙа табиптар, ә ғаиләнең рухи өлөшөн алып барыу олатай иңенә төшкән. Ул Бөйөк Ватан һуғышы ветераны булараҡ, шул ваҡиғалар тураһында күп яҙҙы, хәҙер тарихи әҫәрҙәр ижад итә. Был хеҙмәт уның миссияһылыр ҙа, бәлки.

Минең бала сағым өләсәйем Ғәлиә Ғәзиз ҡыҙының атаһы Ғәзиз Шафиҡов тураһындағы хәтирәләр менән һуғарылған. Өләсәйем гел генә уның тураһында һөйләй, ә мин олатайҙы бер әкиәт батыры итеп күҙ алдына килтереп, иҫем китеп тыңлайым. Өләсәй 55 йәшендә эшен ҡалдырып, мине ҡарау өсөн өйҙә ултырҙы һәм беҙ уның менән һуңғы көндәренә тиклем бик дуҫ, хатта серҙәштәр булып ҡалдыҡ. Хәҙер әсәйебеҙ Асия Рамаҙан ҡыҙы беҙҙең балаларҙы шулай ҡыҙыҡлы тарихтарҙа, әкиәт-риүәйәттәрҙә тәрбиәләй. Өләсәйҙәрҙең йәш быуынды тәрбиәләүҙәге төп бурысы ошолор, моғайын.

**Һеҙ икегеҙ ҙә Башҡортостан хирургтары ассоциацияһы тарафынан булдырылған юғары награда - "Алтын скальпель"ға лайыҡ булғанһығыҙ. Һеҙ, Мәхмүт Вил улы, алтын скальпелде икенсе тапҡыр алғанһығыҙ, дүрт тапҡыр Рәсәй Президенты грантына эйә булғанһығыҙ, Франция хирургтары ассоциацияһы һәм Луи Пастер исемендәге Страсбург университеты дипломдары менән бүләкләнгәнһегеҙ. Ниндәй операциялар алып килде был уңыштарҙы?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Ғәҙәти булмаған операциялар, тиергә була. Асылда, операция ғәҙәти булғанда ла, ябай һәм еңел үтеп, ауырыу йәһәтерәк һауығып китергә тейеш. Әммә гел генә улай булмай, хирургмын тигән хирург ауыр осраҡтарҙа, йәғни ғәҙәти булмаған осраҡта ғәҙәти булмаған операция башҡарып, ауырыуҙы ҡотҡарып алып ҡалырға бурыслы. Хәҙерге ысынбарлыҡта Рәсәйҙә башҡарылған операцияларҙың етмеш процентҡа яҡыны инновацион технологиялар ярҙамында үтәлә. Бәләкәй роботтар, лапароскоп ҡорамалдар, йыһаздар менән башҡарылған операцияларға ла республикала иң беренселәрҙән булып тотонорға тура килде. Бәләкәй йөйлө операцияларҙан һуң ауырыуҙарҙың йәрәхәттәре тиҙерәк уңала, 2-3 аҙнала хәле яҡшыра. Бына ошондай уңышлы операциялар әлеге алтын скальпелгә хужа итте лә инде.

**Һеҙҙең осраҡта был юғары награданы ниндәй операция алып килде, Шамил Вил улы?**

**Шамил Тимербулатов:** Тәүҙә өҫтәп китергә теләйем: Мәхмүт ағайым ябай хирург ҡына түгел, ғалим да. Ул 15 монография, 36 уйлап табыу, 400-ҙән ашыу фәнни хеҙмәт авторы. Ә уның үҙе етәкселегендә генә 4 докторлыҡ, 13 кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланды. Ә миңә килгәндә, мин түллек биҙендә ун биш килограмлыҡ яман шеше һәм алғы ҡорһаҡ тышсаһында метастаз сығанағы булған 48 йәшлек ҡатынға ҡатмарлы операция яһарға баҙнат иттем һәм уңышлы башҡарып сыҡтым.

**Һеҙҙең күҙәтеүҙәр буйынса нисек: хирург ҡулына ауыл халҡы күберәк килеп эләгәме, әллә ҡала халҡымы?**

**Шамил Тимербулатов:** Беләһегеҙме, проблема хатта "хирург ҡулына килеп эләгеүҙә" лә түгел. Проблема ауыл халҡының ниндәй ҙә булһа табип ҡулына килеп эләгә алмауында. Бөгөн күп райондарҙа дауалаусы табиптар һаны шул хәтлем ҡыҫҡартылды, үҙәк дауаханалар ябылды, ә ауырыусылар һис кенә лә кәмемәне. Баш ҡалаға килеп белгестәргә күренеү өсөн күптәренең мөмкинлеге лә юҡ. Хирург ҡулына улар, ғәҙәттә, "Тиҙ ярҙам" арбаһында ғына килеп етә һәм, үкенескә ҡаршы, күптәренә ярҙам һуңлай. Әле бына район дауаханаларын яңынан тергеҙергә тигән хәбәр бар, әгәр шул үтәлһә, бик шәп буласаҡ.

**Мәхмүт Тимербулатов:** Төбәктәре менән ниндәйҙер ауырыу төрөнә дусар булған райондар бар. Ундай райондарҙа дауаханаларҙы ябыу түгел, киреһенсә, киңәйтергә кәрәк тә бит. Мәҫәлән, Урал аръяғында рак "сәскә ата". Сибай-Учалы тирәләрендәге күрһәткестәр республика кимәлен дә уҙып китә. Халыҡ бит иң тәүге сиратта беренсе тикшереүгә мохтажлыҡ кисерә. Йәғни, ул үҙ хәлен үҙе белмәй һуңғы сиккәсә йөрөп тик ята. Ә хәле үҙен белдерә башлағанда ниндәйҙер аяулы дауалауҙар юлы ябылып өлгөрә. Ауырыуҙың торошон ваҡытында билдәләй алған белгестәр булғанда, улар уны артабан урындағы йәки республика дауаханаларына юллар ине. Ә республика үҙәктәрендә бер ваҡытта ла, бер ауырыуҙы ла кире ҡаҡмайҙар. Бары ауырыуға унда барып урынлашыу юлдарын һәм алымдарын өйрәтеп, йүнәлтеп ебәреүсе урындағы нөктәләр булһын. Бөгөн электрон яҙылыу мөмкинлектәре лә бар. Ошоно ла ҡулланып өйрәнһен ине халыҡ.

**Бына һеҙ икегеҙ ҙә Башҡортостан дәүләт медицина университеты профессорҙары, студенттар менән дә эш итәһегеҙ. Ҡарап торғанда, медицина университетыбыҙҙа студенттар аҙ уҡымай, был иң абруйлы уҡыу йорттарының береһе тип әйтерлек. Ни өсөн табиптар етмәй һуң республикала? Ҡайҙа булып тора уҡып сыҡҡан белгестәребеҙ?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Шәп студенттар, ысынлап та белемле булған белгестәр тағы ла ҙурыраҡ ҡалаларға ынтыла. Мәскәү, Питер, шулай уҡ Себер ҡалаларына китә улар. Был, әлбиттә, эш хаҡына бәйле. Күпмелер белгестәр һөнәрҙәре буйынса эшләмәй. Беҙҙә бит атай-әсәйҙәр балаларын табиплыҡҡа уҡытыуҙы әллә ни урынына күрә һәм уларының теләге бармы-юҡмы, түләп булһа ла уҡытырға тырыша. Ундай студенттар этеп-төртөп булһа ла уҡып бөтә лә, дипломын аҡламай. Һуңғы йылдарҙа ауыл ерлегендәге докторҙарға миллион һумлыҡ ярҙам күрһәтелеүе йәштәрҙе ҡуҙғатты бер аҙ. Шундай ыңғай күренештәр белгестәрҙең райондарҙа ҡалыуына булышлыҡ итер ул, моғайын.

**Шамил Тимербулатов:** Шундай бер әтнәкәһе лә бар: республикалағы район дауаханалары урындағы хакимиәттәргә буйһонмай, улар туранан-тура Һаулыҡ һаҡлау министрлығына ҡарай. Шунлыҡтан, хакимиәттәр районға ҡайтҡан табипҡа нисек ярҙам итергә белмәй. Улар был мәсьәләләрҙе юридик яҡтан дөрөҫ итеп башҡара алырға тейеш. Һәм ошо сетереклек тә һағайта йәштәрҙе.

**Кемдәрҙе был һөнәрҙәге остаздарығыҙ тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Медицинала уҡытыусыһыҙ, остаҙһыҙ булмай. Беҙҙең һөнәрҙә остаз хатта атай-әсәй менән тиң ҡуйыла. Ололар йәштәргә белемен, тәжрибәһен тапшырып ҡалдыра. Шунһыҙ мөмкин дә түгел. Һинең

***✓ Хатта тел мәсьәләһендә ниндәйҙер ҡытыршылыҡтар булған хәлдә лә, милли үҙаң һәм рух, беҙгә һалынған тарихи мөһөр, ҡан көсө юғалырға тейеш түгел. Ул бер ҡайҙа ла юҡҡа сыға алмай.***

# УҠ ЮНҒАН,

## хирург улдары менән әңгәмә



белгәнең, асыштарың, яңылыҡтарың үҙеңдән һуң да кешеләргә хеҙмәт итмәй икән, ул белем юҡ тигән һүҙ. Беҙҙең беренсе уҡытыусыбыҙ, әлбиттә, атайыбыҙ Вил Мамил улы. Атайыбыҙҙың дуҫтары, коллегалары ла ҙур ярҙам күрһәтте башланғыста. Ә инде айырып әйткәндә, мин үҙемдең остазым итеп Венер Ғәзиз улы Сәхәүетдиновты атап китер инем. Ул мине студент сағымдан уҡытты, практикала ла етәкселек итте. Үкенескә ҡаршы, уҡытыусыбыҙҙы быйыл һуңғы юлға оҙаттыҡ. Республика медицинаһы, башҡорт хирургияһы өсөн был ҙур юғалтыу булды.

**Бөгөнгө студенттар һеҙҙең заман студенттарынан айырыламы? Хирург булырға теләүселәр күпме беҙҙә?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Бөгөнгө йәштәргә уҡыу күпкә еңелерәк бирелә. Уларға бер нәмәлә лә эҙләнергә кәрәк түгел. Бөтә әҙәбиәт ҡул аҫтында - интернетта. Йәштәрҙең мейеһе эҙләнеү, уйланыу өҫтөндә үҫешмәй, ә ҡайҙан табып алыу юҫығында ғына эшләй. Мәҫәлән, хирургияны алайыҡ. Әлеге студенттар араһында хирург булырға теләгәндәр бик аҙ. Ни өсөнмө? Сөнки улар үҙҙәренә файҙа килтерерҙәй өлкәне һайларға теләй. Сәғәттәр буйына операция өҫтәле артында тороуҙың хирург өсөн оло яуаплылыҡ икәнен дә белә. Элек был ниндәйҙер романтика, ярҙам итеү, файҙалы булыу идеялары менән һуғарылған булһа, бөгөн - юк. Бөгөн медицина ҡоро фактгарҙа һәм дәлилдәрҙә генә ҡалған.

**Шамил Тимербулатов:** Әлеге мәлдә Американың үҙ йәштәре хирурглыҡҡа уҡымай. Уларҙа һиндтар, кореялылар, ҡытайҙар хирург булып эшләй. Американылар психолог, психиатр, диетолог кеүек белгестәр булып сығырға ынтыла. Был проблема беҙгә лә етеп килә. Бөгөн беҙҙең медицинала тажик халҡы бик әүҙем. Һинд студенттары, ярай, үҙ илдәренә ҡайтып китер, ә таджиктар бында ҡаласаҡ. Уларҙы башта беренсе звенола тотасаҡтар, унан яйлап, тәжрибә туплап, район-ҡала дауаханаларына ла тултыр асаҡтар. Был хәл оҙаҡ көттөрмәйәсәк, сөнки бөгөн үҙебеҙҙең студенттар һаны ситтән килгән студенттар менән бер тигеҙ самала. Нисек кенә толерантлы һәм мәҙәниәтле булырға тырышҡанда ла, был күренеш һәм хәл табип һөнәренең баһаһын бермә-бер төшөрә.

**Медицинаға ҡарата йәмғиәттең ҡарашы нисек? Быны һеҙ тояһығыҙмы?**

**Шамил Тимербулатов:** Беҙҙең заманда "медицина ярҙамы" тигән төшөнсә "медицина хеҙмәтләндереүе" тигән формала ғына ҡалды. Бөтөн юридик документтарҙа был шулай теркәлә. Һәм, ошоға ярашлы, йәмғиәттең дә, медиктарҙың үҙҙәренең дә ҡарашы үҙгәрә бара. Ауырыуҙар табиптан ярҙам һорап килмәй, ә хеҙмәтләндереүен генә талап итә. Мәҫәлән, официант һымаҡ йылмайырға, һатыусы һымаҡ, ауырыуҙың нимә теләгәнен тыңларға, һәм башҡалар. Табип бығатиклем дә ауырыуҙың хәленән һәм торошонан сығып эш итә ине бит инде. "Хеҙмәтләндереү" иһә уны был хеҙмәтен артистарса үтәргә мәжбүр итә.

**Мәхмүт Тимербулатов:** Йәмғиәттең тағы ла бер хата фекере бар: улар дауахана мине дауалай, табип ауырыуҙан ҡурсалай, тип уйлай. Үлем осрағында врач үлтереүсе булып сыға. Асылда, табип менән ауырыу ауырыуға ҡаршы бергә көрәшеүселәр булырға тейеш. Үҙ-үҙенә, сәләмәтлегенә, яҙмышына ҡул һелтәгән кешегә табип бер нисек тә ярҙам итә алмай. Былай ҙа, мәҫәлән, хирургия өлкәһе табиптары үҙҙәренә бер нисек тә ярҙам итергә теләмәгәндәргә әллә күпме көсөн, белемен сарыф итә. Ә күпме көс, препараттар әрәмгә китә? Сәләмәт булырға, йәшәргә, һау быуын ҡалдырырға теләгәндәргә күрһәтелә торған иғтибарҙы, күп осраҡта, ошо үҙҙәренә төкөрөп ҡарап йәшәгән, һуңғы мәлдә, йығылғас ҡына дауаханаға килеп юлыҡҡандарға бүлергә тура килә.

**"Һәр хирургтың үҙ зыяраты була" тигән әйтемде ишеткәнем бар. Быны нисек аңларға?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Был уйһыҙ һәм аҡылһыҙ ғына әйтемдер, тип уйлайым. Бер хирург та ауырыуының үлемен теләмәй. Һәм күп осраҡта ауырыу табип ҡулынан түгел, ә ауырыуының табип ярҙам итә алырлыҡ сиктән үткән булыуы сәбәпле үлә. Үрҙә әйтелгәнсә, беҙҙең медицинаның гуманлы булыуы һәм ауырыуҙы һуңғы сиктә лә операция өҫтәленә һалырға ынтылыуы арҡаһында килеп сыға былар. Беҙҙә бөгөн операцияға алынған күп осраҡтарға сит ил хирургтары әйләнеп тә ҡарамай. Улар был осраҡта үҙҙәренең репутацияларын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйырҙарын яҡшы төшөнә. Унан һуң, үлем осраҡтары дауахананың ниндәй булыуына ла бәйле. Травма үҙәге булған дауаханаға юл һәләкәте, янғын, төрлө ҡырҡылған, һынған яралыларҙы алып киләләр. Һәм бында һәләк булыуҙар күберәк тә килеп сыға. Хирург бындай ауырыуҙарға ниндәй осраҡта ла операция яһаясаҡ, "Юҡ, был пациент барыбер тере ҡала алмай", тигән һүҙҙе әйтә лә алмай ул, ә шунда уҡ эшкә тотона.

Әлбиттә, тормошта яуапһыҙлыҡ күрһәткән табиптар ҙа, ауырыуға ваҡытында ярҙам итмәгән осраҡтар ҙа бар. Кешелек фактоһын берәү ҙә инҡар итә алмай. Хаталанған осраҡта врач үҙ хатаһын төҙәтергә бурыслы. Сит илдә, мәҫәлән, "табип хатаһы" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ. Уларса, табип тотонған икән, тимәк, ул барыһын да дөрөҫ башҡарған. Уларҙа ниндәйҙер үтә ҡырағай хаталар өсөн генә язаға тарттыралар. Ә беҙҙә уңышлы операциянан һуңғы хәл насарайыуы өсөн дә бишәр йыл суд юлдарын тапаған табиптар етерлек.

Һаман да сит ил менән сағыштырғанда, әйтәйек, уларҙа хирургтар ойошмаһы ҡул аҫтындағы табиптарын үҙҙәре контролдә тота. Берәй хирург бер нисә тапҡыр хата ебәрҙе һәм уның рейтингы түбән икән, уны ойошманан сығаралар һәм шул арҡала бер ергә лә эшкә алмайҙар. Ә беҙҙә медицина ишеге шар асыҡ, хирургтың кабинетына теләһә ҡайһы ваҡытта прокуратура ла, тәфтишсе лә килеп инә ала. Улар хатта табип ҡулынан ауырыу тарихын да тартып ала ала. Врачтың бер хоҡуғы ла юҡ.

**Халыҡ медицинаһы үҫешә бара. Был дауалау ысулы фәнни медицинаны ҡыҫырыҡлай аламы?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Халыҡ медицинаһы һәм фәнни медицина йәнәш тороп эшләһә генә бербереһенә файҙалы була ала. Халыҡ медицинаһы сирҙәрҙе иҫкәртеү сараһы. Уны ҡулланып, сәләмәт булырға һәм фәнни медицинаға бер ваҡытта ла мөрәжәғәт итмәҫкә мөмкин. Тик беҙҙең йәмғиәт ағзалары организмының бөтөн мөмкинлектәрен дә тотоноп, туҙҙырып бөткәс кенә табипҡа килергә ғәҙәтләнгән.

Халыҡ медицинаһы, ҡабатлап әйтәм, ярҙам итеүсе, сәләмәтлекте нығытыусы, ауырыуҙарҙы булдырмаусы бер йүнәлеш. Ә инде етди ауырыуҙар алдында ул көсһөҙ. Мәҫәлән, ниндәйҙер тамыр йәки үлән эсеп яман шеште бөтөрҙөм тигән хәбәргә ышанырға ярамай. Шулай уҡ, асығыу юлы менән сирҙән ҡотолдом, тип тә яҙалар. Асыҡҡанда, эйе, шеш тә яйыраҡ үҫә, сөнки уға энергия биреүсе аҙыҡ аҙ, тик ул бер ҡайҙа ла юғалмай, яйлап булһа ла ағзаларҙы емерә. Был юл менән тере ҡалыу мөмкин түгел. Ундай хәлдең тормошта булғаны ла юҡ. Барлыҡҡа килгән етди ауырыуҙы, ярҙам итерлек осраҡта, тик фәнни медицина ғына дауалай ала.

**Шамил Тимербулатов:** Бынан утыҙ йыл элек сирҙәрҙе дауалауҙың иң яҡшы юлы операция тип ҡарайҙар ине, хәҙер операцияға алып барып еткермәү ысулдарын эҙләйҙәр. Бөгөнгө хирургияла операциялар һаны аҙайғандан-аҙая бара. Әммә хирургия юҡҡа ла сыға алмай. Уға мохтажлыҡ ҙур. Әлеге яман шеш темаһына әйләнеп ҡайтҡанда, халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итеп, нимәләрҙер эскәйнем, шеш юғалды тип уйлау, ғәҙәттә, ярҙам итмәҫлек хәлдәргә алып барып еткерә лә инде. Ундайҙар күп килә беҙгә. Был хәл организмдың ваҡытлыса алданыуы ғына. Әйҙә, халыҡ медицинаһы менән дә дауалан, тик фәнни медицина ярҙамынан да баш тартма.

**Элек ауырыуҙар аҙыраҡ, кеше сәләмәтерәк, ғүмер оҙайлыраҡ булған, тип һөйләргә яратабыҙ...**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Бөгөн яңы барлыҡҡа килгән бер ниндәй ҙә ауырыу юҡ. Халыҡ борон сәләмәтерәк булған тип тә әйтә алмайым. Бары элек тәбиғи рәүештә көслө, һау балалар ғына йәшәп китә алған. Шул һау балалар ауырыуҙарға бирешмәгән, оҙон ғүмерле булған да инде. Мәҫәлән, бөгөн 500 грамм булып тыуған балаларҙы алып ҡалабыҙ, йәшәтәбеҙ. Бындай организм сәләмәт була аламы? Хатта аҡылы менән гений булғанда ла, ул йышыраҡ ауырыусан, йөрәк-үпкә-бауыр һымаҡ ағзалары үҙен йыш һиҙҙереүсән буласаҡ. Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә була.

**Шамил Тимербулатов:** Элекке ҡарттар һау ҙа, хәҙерге йәштәр ауырыу, тип тә әйтәләр. Был да шулай аңлатыла: нисә бөртөк булған һуң ул оҙон ғүмерле, сәләмәт ҡарттар? Йөҙ баланан унаүһы ҡалып, оло йәшкә етә алған, ә бөгөн йөҙ баланың туҡһаны йәшәй.

**Хирург булыу һеҙҙең холоҡҡа үҙгәреш индерҙеме? Хирургтарҙа ниндәй уртаҡ һыҙаттар була?**

**Шамил Тимербулатов:** Табиптар араһында хирургтар иң тиҙ хәл итә ала торған төркөм, тип әйтергә була. Мәҫәлән, пациент күп ҡан юғалтып килде йәки операция барышында ниндәйҙер икенсе мәсьәләләр ҙә асыҡланды икән - һин бер нисә секунд эсендә был проблеманы хәл итергә бурыслы. Бер ниндәй паникаһыҙ, икенселәрҙән ярҙам көтмәйенсә, һалҡын аҡыл менән үҙеңә хәл итергә тура килә. Хирургтың ҡурҡыу тулы ҡарашын, аптыранған йөҙөн эргәһендәге ярҙамсылары ла күрергә тейеш түгел. Ул эмоцияларын эскә йәшереп, аныҡ күрһәтмәләр биреп, маҡсатлы эшләп өйрәнергә тейеш. Һәм бөтөн ошо үҙтәртип уның ҡанына ла, аңына ла һеңеп-ултырып, унан ҡаты холоҡло кеше яһай ҙа инде.

**Ғаиләлә атай-әсәйҙәрегеҙ, туғандарығыҙ менән йыйылған ваҡытта күберәк нимәләр тураһында һөйләшәһегеҙ?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Беҙҙең дуҫлашҡан, аралашҡан кешеләребеҙ ҙә, ҡатындарыбыҙ ҙа медиктар. Шунлыҡтан, нимә хаҡында ғына һүҙ башланһа ла, ул шул медицина өлкәһенә килә лә ялғана.

**Шамил Тимербулатов:** Икенсе өлкәнән булған кешеләр менән аралашҡанда улар, ғәҙәттә, медицинаға ҡарата шелтә һүҙҙәре әйтергә ярата. Ул медиктарҙы тетәтетә лә, "Ҡайҙа, ҡустым, телефоныңды яҙып бир әле", тип, номерыңды алып китә шулай ҙа. Шунан уларҙың "үҙ табиптары"на әйләнәһең инде.

**Башҡорт мөхитенән һеҙгә нимәләр яҡын?**

**Мәхмүт Тимербулатов:** Мин башҡортса йырҙар тыңларға яратам. Концерттарға йөрөргә мөмкинлегем самалы, шунлыҡтан, телефонымда йырҙар йыйылмаһы йөрөтәм. Ял иткәндә тыңлап алам. Был миңә ниндәйҙер бер энергия бирә.

**Шамил Тимербулатов:** Мин дә шулай уҡ. Олатайыбыҙ Рамаҙан Ҡотошев бөгөн дә башҡара беҙгә халыҡ йырҙарын, ҡурайҙа ла һыҙҙыра. Атай-әсәйебеҙ менән башҡортса аралашабыҙ. Йыйып әйткәндә, башҡорт мөхитендәге бөтә нәмә лә үҙ, яҡын. Киләсәк быуындарҙы күҙаллап әйткәндә лә, хатта тел мәсьәләһендә ниндәйҙер ҡытыршылыҡтар булған хәлдә лә, милли үҙаң һәм рух, беҙгә һалынған тарихи мөһөр, ҡан көсө юғалырға тейеш түгел. Ул бер ҡайҙа ла юҡҡа сыға алмай. Беҙ рус, йәһүд йәки башҡа милләт булып, ҡушылып, юйыла алмайбыҙ, беҙ башҡорт булып тыуғанбыҙ икән, башҡорт булып ҡалабыҙ ҙа...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ - Бына, улым, - тине Орҡоя ҡарсыҡ Муса эргәһенә килеп, - әҙәйең тешләткән ошо телем һинең ҡайтыуыңды биш йыл көттө. Ризыҡтың хаҡы ысынлап та ҙур,Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң икән - иҫән-аман әйләнеп ҡайттың.**



Ике-өс көн үтеп, оҙон юлдан ҡайтҡан Муса әҙерәк баш-күҙ алғас, Орҡоя әбей улы ҡайтыу хөрмәтенә аш мәжлесе ойошторҙо. Ҡыуаныс бик ҙур ине, шуның өсөн мәжлескә ҡуллашып йөшәгән бөтә туғантыумаса, уларға ҡушып аралағы күрше-күлән саҡырылды. Әйтелгән кешеләр ихлас йыйылдылар. Барыһы ла Мусаны йола буйынса тәбрик итте: олораҡтар уның арҡаһынан ҡаҡты, яратып яурынынан һөйҙө, йәштәр үҙҙәренсә сәләмләне. Мәжлестә бүтән йәштәр менән бергә Әбделфәуаристың иң оло улы Ғаззалдан тыуған Әбүбәкер, йәнә Ибраһим булды. Улар икеһе лә Мусаға ҡусты тейеш булып, кеселәре Ибраһим Йософ хәҙрәттә белем алып ҡайтып, Көсөктә үҙе хәлфәлек ҡылып йөрөгән көнө ине.

Мәжлесте Айса башлап ебәрҙе. Киләһе кешеләр килеп, малайҙар еҙ ҡомған, еҙ тас йөрөтөп ҡунаҡтарҙың ҡулын сайҙыртып сыҡҡас, ул инәһе өйрәткәнсә, аяҡ үрә баҫты ла, тулҡынланыуҙан тамағын ҡырғылап һүҙ башланы:

- Ағай-эне! Йәмәғәт!.. Биш йыл фарызын үтәп, ҡустыбыҙ Муса иҫән-һау иленә ҡайтып төштө. Бына шуның хөрмәтенә һеҙҙе бимазалап, тип әйтәйемме, йыйған көн инде...

Ҡазанлыҡтағы ҡашыҡ-аяҡ шалтырауы аҫтында ҡунаҡтарҙың хуплау тауыштары ишетелде:

- Ниңә, бимазалап тип ни, бик һәйбәт.

- Йоланы һанлағас, яҡшы инде.

- Шулай, бик изге эш.

- Ололауығыҙға рәхмәт.

Бындай хуплауҙарҙан дәртләнгән Айса, тәүге ҡаушауын еңеп, дауам итте:

- Шунан инде мәжлесте башлап ебәрәйек. Йола буйынса, мулла абзый, аръягын һин ялғап алып китәһеңдер, моғайын.

Һүҙҙең үҙенә алып килеп туғарылыуын ишетеп, әле сағыштырмаса йәш, мыҡты кәүҙәле Сәғит мулла, тамағын ҡырып, "Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир ражим"ды әйтеп тауышын көйләп алды ла, алдындағы ашъяулыҡҡа теҡләп, үҙенә генә хас бер мәҡам менән аят уҡырға кереште.

Ҡазанлыҡта ҡашыҡ-аяҡ шалтырауы тынды, барыһы ла бөйөк ғәрәптең илаһи һүҙҙәренән сихырланып, аят тыңлауға иждиһат һалды.

Аяттан һуң ҡатын-ҡыҙ дәррәү ҡуҙғалышып тағы ҡазанлыҡта мәж килә башланы, ир-ат, йәнләнә төшөп, донъяуи әңгәмәләргә күсте. Әгәр кемдер берәү ике уртала тороп өй эсендәге тауыштарға ҡолаҡ һалһа, ул бер-береһенә һис тә йәбешмәгән бынау хәбәрҙәрҙе ишетер ине:

- Килен, тоҙон самаланыңмы?

- Хәҙер батша булмағас, ҡалайыраҡ була инде ул?

- Ҡоротто иҙергә онотмайыҡ әле беҙ.

- Батша булмаһа ла, шуға оҡшашыраҡ берәйһе ултырыр инде ул ил башына, унһыҙ нисек инде ул.

- Ә-ә, яңы иҫкә төшөп тора: беҙҙең тәгәстәр етешмәй бит!

Аш оҫталары ризыҡ өлгөрткәнсе, оло ҡорҙағылар йәйлап-йәйлап революция, фронт хәлдәренә төшөп киттеләр.

- Муса улым, һин Петроград мәхшәрен күрҙеңме шул?

- Юҡ, беҙ Румыниянан сығып өлгөрә алмай ҡалдыҡ ул саҡта, - тип яуапланы Муса.

- Румындар нисек, кемде яҡлай?

- Уларҙың кем яҡлы икәнен белеп булмай. Үҙҙәрен яҡлай, тиһәң, шунан да дөрөҫө булмаҫ.

Ҡарттар шау-гөр килеп алды:

- Ҡара һин уларҙы!

- Беҙҙең батшаға ла баш һалмаған халыҡтар бар икән, ә?

- Ниңә, шулай инде ул, ҡайһы яҡтың енерен кем белә.

- Кеше араһына ҡыҫылыуҙан да насары юҡ бит был донъяла.

Айсаның кәләше Өммөкамал өтә баҫып табынға боҫо борҡорап торған ҡуллама килтереп ҡуйыуға, унан бөркөлгән хуш еҫ әңгәмәне ваҡытлыса бүлдереп торҙо.

Ҡыуанысы йөҙөнә сыҡҡан Орҡоя әбей ирҙәр яғына үҙе үк килеп инеп:

- Йәгеҙ, хуш күрегеҙ, етешегеҙ! - тип һыйҙы башларға ишара яһаны.

Сәғит мулланың "Йә, бисмилла", тип фатиха биреүе булды, табындағылар уның артынса доға башын ҡабатлап, ҡалаҡтарын ҡулға алдылар ҙа, ашъяулыҡ уртаһындағы табаҡҡа ынтылдылар.

Мулла тәүге ҡалъяны урынына оҙатып ебәргәс:

- Ашауҙан башҡаға эшкинмәй был, - тигән һыйымта яһаны.

Табындағылар уны дәррәү күтәрмәләне:

- Эһем.

- Аштың шулай булғаны яҡшы.

Өммөкамал еңгәһе лә әҙер торған икән, йүгертеп һурпа алып килгән, эргәлә генә уның:

- Ҡәйнеш, мә, һурпа, әтеү тешең үтмәҫ тә, тамағыңа торор, - тип шаяртыуы ишетелде.

Муса ирекһеҙҙән йомшаҡлыҡ күрһәтеүенән оялынҡырап, еңгәһе ҡулынан тәгәсте ҡабул итеп алды, икмәк киҫәген ҡайнар һурпаға һалды. Мәжлес дауам итте. Ирҙәр ҡоронон дилбегәһен үҙ ҡулына алған Айса: "Инәйҙең бәләкәс зәм-зәм һыуы ла ултырған икән дәһә", - тигән булып табындағыларға бал аяҡлай башланы. Һары баллы ике сеүәтә ултыртылған батмус ҡорҙо бер уратып сығыуға, мәжлес йәнләнә төштө, телдәр сиселә башланы. Мөхәммәтҡужа урындыҡ ширлегендә һөйәүле торған ҡынын алып, ҡурай һайларға тотондо. Йыраусылар һиҙҙермәҫкә тырышып, әкертен генә тамаҡтарын ҡырғыланы. Электән араҡы, бал һымаҡ эсемлектәрҙе һөйһөнмәгән Муса һауа алыштырырға тип тышҡа сыҡты, унең артынан Ибраһим эйәрҙе.




- Әйҙәгеҙ, әйҙә, йылы сағында һәләк итәйек беҙ уны.

- Борон берәү: "Яҡшы аш әрәм булғансы, яман ҡорһаҡ ярылһын", - тигән.

Мәрәкәләшеп, бер-береһен ҡыстайҡыстай һыйланышҡан ирҙәр яғына ҡулына аҡ сепрәк тотҡан Орҡоя әбей йәнә килеп сыҡты. Ул әлеге сепрәкте тағатып, унан шырпы ҡабындай ғына ҡатҡан арыш икмәге алды. Ҡорҙағыларҙың бөтөн иғтибары уға йүнәлде.

- Бына, улым, - тине Орҡоя ҡарсыҡ Муса эргәһенә килеп, - әҙәйең тешләткән ошо телем һинең ҡайтыуыңды биш йыл көттө. Ризыҡтың хаҡы ысынлап та ҙур,Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң икән - иҫән-аман әйләнеп ҡайттың. Тешләтмеңде әҙәйең үҙ ҡулы менән һиңә тапшырырға хыялланғайны ла, насип булманы инде, уның фарызын мин үтәйем, мә, ашап бөтөп ҡуй.

Мусаның тамағына ҡаты бер төйөр килеп тығылды, усындағы ошо кескәй икмәк киҫәгенән әзәй ҡулдарының йылыһы ла, тыуған ерҙең әйтеп аңлата алмаҫлыҡ яҡынлығы ла бөркөлгәндәй булды уға. Яу яландарында сыныҡҡан, иң ауыр мәлдәрҙә лә илауҙың ни икәнен белмәгән егерме алты йәшлек егеттең күңеле халҡының рухи күркәмлеге менән тыуып-үҫкән еренең ғәзизлеген тойоуҙан тетрәнде, йәшкәҙәгән күҙҙәре тирә-яҡты күрмәҫ булды. Ҡайҙандыр, томан эсенән тауыштар ишетелде.

- Күңелен йомшарттығыҙ егеттең.

- Һай, тыуған еркәйҙәрҙең ғәзизлеге!

- Йә, йә, тешең үтерме икән?

- Ҡуйығыҙ, һурпаға ебетеп ашаһын, хәҙер ул ташҡа әйләнде инде.

Ә тышта иҫ киткес аяҙ төн ине. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар мәңгелектең ғорур бейеклегенән мөлдөрәшеп һалҡын нур һибә. Етегәндең ете йондоҙо үҙҙәренә билдәләнгән күсәр буйынса өн-тынһыҙ әйләнә, Тимер Ҡаҙыҡ үҙ тәҡдиренә тоғро рәүештә хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалған. Күктең көмбәҙен ҡап урталай бүлеп, көмөш билбауҙай Ҡош юлы һуҙыла. Бөтәһе лә элеккесә, әйтерһең дә, биш оҙон йыл һис үтмәгән дә, дарья һиуҙары аҡмаған. Шулай инде, киңлек бер ҙә, ҡанун башҡа. Әҙәм балаһы ерҙәге тормоштоң мәңгелек икәнлегенә тик йондоҙҙарға ҡарап ҡына инаналыр ул.

- Шунан, ҡустым, хәлфәлек итеп буламы? - тип һораны Муса, күкрәген тултырып һалҡын саф һауа һулап туйғандан һуң.

- Була, хәлфәлек ҡайҙа ҡасһын, тик бына...

- Нимә?

- Артабан кемгә, нимәгә таянып йәшәп алып китербеҙ - халыҡ шуға төшөнә алмайыраҡ ҡаңғыра.

- Эйе, бөтә ерҙә лә болғансыҡ шул. Бында ла күптәр яңы власҡа күнегә алмай ятайыр инде.

- Һин күнегеүҙе һөйләйһең, - тине Ибраһим, - беҙҙә ни советтар бөтөнләй ойошторолмаған ул.

- Тукта, ә улыс үҙәгендә кемдәр ултыра?

- Унда ни, шул инде: элеккесә старшина Ишкәримов та, уның һүҙен һөйләүселәр. Боронғоса йәшәп ятҡан көн.

- Ә һеҙ нимә ҡарап ятаһығыҙ? - тип һораны Муса.

- Беҙ артынан йөрөүсе кеше булмаған, аптырап тик ятабыҙ.

- Ундай кеше күктән төшөр тип уйлайһығыҙмы инде?

- Ҡалайтырға һуң? - тине Ибраһим һораулы ҡарашын Мусаға төбәп.

Шул саҡта өй эсенән ишетелгән наҙлы ҡурайға кемдеңдер көслө лә, моңло ла тауышы ҡушылды:

Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды
Еҙ ҡурайҡай итеп тартайым...

Мусаның иң яратҡан йырҙарының береһе, мәшһүр "Таштуғай" ине был. Йыраусының аһәңле тауышынан, моңдон ҡабатланмаҫ биҙәгенән әҫәрләнгән егеттәр, һәр береһе үҙ кисерештәренә бирелеп, тын ҡалдылар. Ә йыраусының иркен йөрәк моңо үткәндәрҙе терелтеп, илен сикһеҙ һағынған башҡорт ҡыҙының һағышын артабан ҡуйыртты:

*Ялан ғына ерҙең көкүге юҡ,*
*Үҙ Уралҡайыма ҡайтайым.*

Күктәге һанһыҙ йондоҙҙар башҡорт моңонон илаһилығынан тетрәнеп, шым ғына дерелдәнеләр. Гүйә, улар ҙа мәңгелектең ғорур юғарылығынан тороп: "Ниндәй бөтҡөнөҙ хәсрәт был, ниндәй йөрәк өҙгөс моң ул?" - тип һорамаҡсылар, тик телдәре генә юҡ. Мәңгелек йондоҙҙар! Әгәр һеҙгә ундай тел аҫҡысы бирелә ҡалһа, өҫтәп шуларҙы ла һорарға тейеш булыр инегеҙ: "Башҡорт берәй заман бәхет менән рәхәт тормош тигәнде күрер микән? Башҡорт халҡының берәй саҡ яҡты тормошто күрер көнө булырмы?"

Йыр тамамланды. Болоҡһоу кисерештәренән арынып киткән Муса баяғы һөйләшеүҙе иҫенә төшөрөп:

- Ҡалайтырғамы? - тип һүҙҙы уйсан ғына. Уның электән үк үҙ фекеренән үҙе тоҡана торған ғәҙәте бар ине, әле шул әҫкә ҡалҡып сыҡты. - Ә бына ҡалайтырға: үҙебеҙгә йөрөргә, советтарҙы ойоштороп ебәрергә. Боронғоларҙың: "Үҙе йөрөгәндең үлеһе лә терелә", - тигән һүҙе бар ине шикелле, әгәр хәтерем яңылышмаһа. Сәйнәп, ауыҙға ҡаптырғанды ғына йоторлоҡ хәлебеҙ барҙыр бит.

Әйткән һүҙ - атҡан уҡ. Иртәгеһенә үк Муса Ибраһимды ултыртып алды ла, Күбәләк-Тиләү волосының яҡын-тирә ауылдары буйлап сәйәхәткә юлланды. Тәүәкәлләгән таш ярған, тигәндәй, халыҡтың уйын белеү, ҡылын сиртеп ҡарау ине уның ниәте.

Егеттәр эште элек-электән иң яҡын күрше булған Сорамандан башлап ебәрҙе. Муса һымаҡ уҡ ошо көндәрҙә генә фронттан ҡайтҡан Әхмәҙи Мамилин уларҙың ниәтен ихлас күтәреп алды, ҡунаҡтарҙың атын туғарышып, үҙҙәрен өйөнә индереп, ата-әсәһе ҡарамағына тапшырҙы ла өтә баҫып халыҡты йыйырға сығып та китте.

Сораман халҡы борондан үҙҙәренең өйөрөм, әүҙем булыуы менән данлыҡлы ине, әле лә йолаларына тоғро ҡалған икән: Муса менән Ибраһим берике сынаяҡ сәй эсеп өлгөрҙөмө, юҡмы - Әхмәҙи йүгереп ҡайтып та инде:

- Әйҙәгеҙ, халыҡ йыйыла башланы!

Инәһе уға һуҡранды:

- Ней, ҡоҙаларҙың йәнен алып килән, көтөрҙәр әле!

Атаһы ла ризаһыҙлыҡ белдерҙе:

- Эсә бирһендәр инде, йылынып та өлгөрмәнеләр бит. Үҙең дә ултырып, ҡунаҡтар менән берәй сынаяҡ эсер инең.

- Аҙаҡ, аҙаҡ! - тине Әхмәҙи өтәлән төҫ менән.

- Ҡунаҡ - хужаның ишәге инде. - Муса ҡалғандарға һиҙҙермәй генә Әхмәҙигә күҙ ҡыҫып, мәрәкәләп сынаяғын түңкәрҙе.

Изге күңелле ҡарттар:

- Ярай улайһа, эшегеҙ булғас.

- Аҙаҡ килерһегеҙ, - тип ҡалдылар.

**(Дауамы бар).**

ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# АҪА ҺАЙЛАУ



**Ҡатнашалар:**
**Ҡыҙҙар**
**Өләсәй**
**Әсәй**
**Аҫалар:**
**1. Айсыҡ**
**2. Баҙыян**
**3. Батмус**
**4. Буйылҡай**
**5. Йондоҙ**
**6. Көнбағыш сәскәһе**
**7. Кәкерсәк**
**8. Ҡаҙаяҡ**
**9. Ҡусҡар**
**10. Самауыр тояғы**
**11. Сулпы**
**12. Әҙрәс**

## БЕРЕНСЕ КҮРЕНЕШ

*Ике ҡыҙ һандыҡ тотоп инә.*

**Ҡыҙ-1:** Был ниндәй һауыт?
**Ҡыҙ-2:** Сер итеп кенә әйтәм. Берәүгә лә әйтмәҫһеңме?
**Ҡыҙ-1:** Юҡ, бер кемгә лә әйтмәм. (Беренсе ҡыҙ икенсеһенең ҡолағына бышылдай.)
**Ҡыҙ-2:** Ха-ха! Туй һандығы? Һин кейәүгә сығаһыңмы?
**Ҡыҙ-1:** Уй, шаулама әле, бөтә донъяға һөрән һалдың.
**Ҡыҙ-2:** Һиңә бит ун ике йәш. Минә лә шулай. Һандыҡ нимәгә кәрәк?
**Ҡыҙ-1:** Оләсәйем миңә бүләк итте, ул әйтә: 12 йәштән ҡыҙҙар һандыҡ тултырып, үҙенең донъяһын йыя башлай, ти.
**Ҡыҙ-2:** Ә-ә, баҙарҙа әйбер тау шикелле өйөлөп ятҡанын оләсәйең белмәйме ни?
**Ҡыҙ-1:** Белә. Был һандыҡҡа беҙ иң кәрәкле, иң серле нәмәләрҙе һалабыҙ.
**Ҡыҙ-2:** Ниндәй нәмәләр улар? Әйт әле.
**Ҡыҙ-1:** Тағы ҡыҫҡыраһыңмы?
**Ҡыҙ-2:** Юҡ, юҡ! Ҡолағыма ғына әйт (Беренсе ҡыҙ йәнә икенсеһенең ҡолағына бышылдай).
**Ҡыҙ-1:** Әйҙә, бергә!
**Ҡыҙ-2:** Әйҙә һуң (Сығалар).

*Өсөнсө ҡыҙ менән Дүртенсе ҡыҙ инә.*

**Ҡыҙ-3:** Ҡарале, был нимә? Белмәйһең! Был - Ҡортбаш! Матурмы?
**Ҡыҙ-4:** Ҡортбаш? Нимәгә ул?
**Ҡыҙ-3:** Күҙ теймәһен, тип, әсәйем тегеп ҡуйҙы.
**Ҡыҙ-4:** Мин яратмайым ундай нәмәне.
**Ҡыҙ-3:** Ҡортбашты яратыу кәрәкмәй. Насар кешенән, сихырҙан һаҡлай ул.
**Ҡыҙ-4:** Ниңә мин был әкиәткә ышанырға тейеш?
**Ҡыҙ-3:** Ә нимәгә ышанаһың?
**Ҡыҙ-4:** Ҡояш, Ай. Көн. Төн. Йәй, ҡыш... Улар бар. Улар була. Быңа шуға ышанам.
**Ҡыҙ-3:** Дөрөҫ әйтәһең. Донъя мәңгелек, ә кеше ғүмере - бер осҡон ғына. Ләкин шул осҡон донъяны аңлап, яратып, ышанып, матурлап, хатта үҙгәртеп йәшәргә теләй. Әсәйем әйтә, донъя ышаныуға ҡоролған, ышанмаған - буш йәшәгән, ти.
**Ҡыҙ-4:** Ярай, етте, башым әйләнә. Хәҙер ҡайҙа барабыҙ? Киноғамы? Парккамы?
**Ҡыҙ-3:** Аҫалар янына. Аҫалы балаҫ оҫтаһына.
**Ҡыҙ-4:** Әкиәт! Ярай, барам, барам, бер юлға һиненсә булһын! *(Йүгереп сығалар).*

## ИКЕНСЕ КҮРЕНЕШ

*Музыка. Балаҫ һуғыу оҫтаһы менән уға эйәреп Аҫалар йырлап инә.*

*Аҫалы балаҫ өсөн әҙерләгән йөн ептәрҙе уйнатып, эш-хәрәкәтте күрһәтәләр.*

**Оҫта:**
Аҡ һарығым, бәр-бәр,
Күк һарығым, бәр-бәр,
Йөнөң атып бәр-бәр,
Орсоҡ иләр ләр-ләр.
**Аҫалар:**
Ҡыҙыл йомғаҡ бул-бул,
Һары йомғаҡ бул-бул.
Зәңгәр йомғаҡ бул-бул,
Йәшел йомғаҡ бул-бул...
**Оҫта:**
Ал балаҫым бул-бул,
Гөл балаҫым бул-бул,
Ҡыуанысым бул-бул,
Йыуанысым бул-бул...

## ӨСӨНСӨ КҮРЕНЕШ

*Дүрт өләсәй инә. Дүрт ҡыҙ килеп ҡушыла.*

**Өләсәй-1:** Иҫәнмеһегеҙ. Балаҫ һуғыусы оҫта ни хәлдәрҙә?
**Оҫта:** Һауғынабыҙ әле, рәхим итегеҙ. Ҡотло аяғығыҙ менән. Эш башларға торабыҙ.
**Өләсәй-2:** Икендегә етмәһен, ике кеше һиҙмәһен.
**Өләсәй-3** Алла ярҙам бирһен.
**Оҫта:** Бирһен, һеҙҙе лә ҡушып бирһен.
**Ҡыҙ-4:** Беҙ ҡыҙҙарыбыҙға аҫалы балаҫ һуҡтырырға, аҫа һайларға килдек. Аҫалы балаҫ ҡыҙ һандығына ҡот булыр.
**Оҫта:** Ысын Аҫаны танымаусы, боҙоусылар бик күп. Аҫаларҙы үҙгәртергә ярамай, дөрөҫ итеп күсерергә кәрәк. Йөгеҙ, аҫаларым, әйләнеп бейеп күрһәтегеҙ.
- Йондоҙ аҫа! Әү-әү,
- Ҡусҡар, Батмус! Әү-әү,
- Кәкерсәк, Сулпы! Әү-әү,
- Ҡаҙаяҡ, Әҙрәс! Әү-әү!
- Бәхет аса Йондоҙ аҫа,
- Байлыҡ бирә Ҡаҙаяҡ!
- Аҙаштырмай Баҙыян аҫа...
- Ҡалҡан - Самауыр тояҡ.

**Өләсәй-1:** Аҫаларҙың исемдәре есемдәренә тура килеп торалыр инде ул?
**Оҫта:** Һәр аҫаның исем-атамаһы бар. Сығығыҙ алға, аҫалар, һеҙҙе һайлап алалар. Кемгә ниндәйе ҡарар, кемгә ниндәйе ярар?
**1. Айсыҡ аҫа** - Дим буйҙарында күп таралған боронғо аҫа. Әлшәй, Ишембай, Миәкә яҡтары уны белә.
**2. Баҙыян аҫа** - Ғафури, Миәкә, Бишбүләк яғында яратып һуғылған иң боронғо башҡорт балаҫтарында осрай.
**3. Батмус аҫа** - Миәкә, Әлшәй, Архангел яғында таралған күркәм аҫа.
**4. Буйылҡай аҫа** - бөтә Башҡортостанда тиерлек һуғылған буй балаҫ биҙәге.
**5. Йондоҙ аҫа** - иң күп таралған киң билдәле башҡорт аҫаһы. Уны төрләсә әйтәләр: Йондоҙ, Баҙыян, Һигеҙ ожмах аҫҡысы... бөтә райондарҙа ла бар.
**6. Көнбағыш сәскәһе** - Миәкә оҫталары күберәк һуға көнбағыш сәскәһен.
**7. Кәкерсәк аҫа** - Миәкә, Дәүләкән, Йәрмәкәй, Бишбүләк, Әлшәй яғында кәкерсәкте бигерәк яраталар.
**8. Ҡаҙаяҡ аҫа** - Миәкә, Әлшәй оҫталары белә Ҡаҙаяҡты.
**9. Ҡусҡар аҫа** - Аҫҡын, Ғафури, Ауырғазы, Бөрйән яғында ҡусҡар аҫаһы осрай.
**10. Самауыр тояғы аҫа** - Әлшәй, Миәкә, Бишбүләктәрҙең яратҡан аҫаһы.
**11. Сулпы аҫа** - Әлшәй, Ауырғазы, Дәүләкән, Йәрмәкәй яғында Сулпы аҫа бар.
**12. Әҙрәс** - Әлшәйҙә, Учалыла осрай Әҙрәс тигән аҫа.
**Аҫалар:**
Аҫа, аҫа, аҫа, аҫа...
Аҫа иле тылсымлы,
Аҫа биҙәктәре бер саҡ
Таң ҡалдырыр донъяны.
Ҡояштан алдыҡ төҫтәрҙе,
Йәйғорҙан отгоҡ биҙәк.
Мең-мең йылдар был аҫалар
Донъяны тора биҙәп.
Аҫа, аҫа, аҫа, аҫа...
Аҫа иле тылсымлы,
Аҫа биҙәктәре бер саҡ
Таң ҡалдырыр донъяны.

## ДҮРТЕНСЕ КҮРЕНЕШ

**Өләсәй-1:** Беҙ һайланыҡ Самауыр тояғы аҫаһын.
**Оҫта:** Самауыр тояғы донъяның дүрт яғын бергә төйнәй. Аҙашыуҙан сара, һаташыуҙан дауа, ҡурҡҡан йөрәккә ҡалҡан була.
**Өләсәй-2:** Беҙҙең балаҫта Йондоҙ аҫа булһын.
**Оҫта:** Йондоҙ аҫа, тигәне йырлы-моңло, ҡуш йөрәкле, тура һүҙле итә. Бәлә-ҡазаға бирешмәҫ өсөн Йондоҙ аҫаны таны.
**Өләсәй-3:** Минең ҡыҙыма - Айсыҡ тигәне. Айҙай алсаҡ булһын ғүмере.
**Өләсәй-4:** Беҙ Баҙыян аҫаны алайыҡ. Байлыҡ, муллыҡ бәркөп тора бит.
**Оҫта:** Һәр кем үҙ күңеленә, йәненә яҡын аҫаны ала. Тимәк, аҫалар ҙа һеҙҙе һайлай.

*Аҫалар менән өләсәйҙәр бейей:*

*Аҫалы балаҫ, йондоҙ аҫалы ...*
*Өләсәйемдең һуҡҡан балаҫы!*
*Таныйым һеҙҙе, гүзәл аҫалар.*
*Һеҙҙә мөғжизә,*
*һеҙҙә хикмәт бар.*

*Күҙ нурынан нурланған,*
*Йырға ҡушып йырланған.*
*Моңға манып туҡылған,*
*Хыял булып тулҡынған.*

## БИШЕНСЕ КҮРЕНЕШ

*Өләсәйҙәр иҫтәлек һөйләй, йөн тетә, иләй, урай...*

*Аҫалар һәм ҡыҙҙар шул ваҡиғаларҙы эш-хәрәкәттә сағылдыра.*

**Өләсәй-1:** Баласаҡтан уҡ күрҙек балаҫтарҙы. Инәй-нәнәйҙәр, еңгәләр шуның менән йәшәне. Арыу-талыу белмәне улар. Буяуын әҙләрҙәр ине, әллә ҡайҙарҙан алдырырҙар ине. Үҙҙәре буяу яһарҙар ине. Ҡаҙандарҙа ҡайнаталар, буяуы кергәнме, тип, тотоп-тотоп ҡарайҙар. Йөндө йыуалар, таҙарталар, иләйҙәр. Күмәк йыйылалар ине өмәләргә.
**Өләсәй-2:** Беҙгә туй ваҡытында аҫалы балаҫ бүләк иттеләр. Бик ҡәҙерле булды улар, беҙҙең өсөн ҡәҙерле ҡомартҡы. Һаҡлайбыҙ, мин уларҙы байрамдарҙа ғына сығарып элэм. Өйгә элгәс, йәм керә. Сәңгелдәктән үк шуны күреп үҫә балалар. Был - боронғо биҙәктәр. Улар балаға энергия бирә. Бала таҙа-сәләмәт булып үҫә.
**Өләсәй-3:** Боронғонан килгән ул аҫалар. Меңәр йыл элек булған. Башҡорттарҙың орнаменттары, биҙәктәре борондан бер-береһенә тапшырылған. Уларға хаҡ ҡуйып булмай, хаҡы-бәйәһе юҡ. Шул тиклем ҡыйбатлы. Белгән әҙәмгә. Белмәгәне инде...
**Өләсәй-2:** Инәйемдең артынан килгән кейеҙе менән балаҫы булған. Егерме беренсе йылда нығ аслыҡ ваҡытында атайым уларҙы бер биҙрә алабутаға алмаштырған. Йүгереп ҡайтып кергән дә, балаҫ менән кейеҙҙе урҙанан һыпыра тартып-тартып төшөрөп алып сығып киткән. Алабутаға алмаштырып алып ҡайтты, ти, алабута ла үҫмәгән бит ул йылды.
**Оҫта:** Ҡыҙ оҙатыр булһалар, әҙер балаҫың бармы, тип һораша башлайҙар. Ҡыҙға әйбер төрмәйҙәр икән, балаҫы булмаһа. Ҡайҙа балаҫы, тип һорайҙар бит. Өй һайын бишәр балаҫ һуғып бирҙем. Иренмәһен, исемен дә яҙ, тип әйтәләр. Яҙып һуғам инде ундайҙарға. Береһен дә кире ҡаҡманым...
**Өләсәй-3:** Дим буйында балаҫ һуғыусы күп булды. Мин бында килен булып төшкәндә һуға белә инем, ҡәйнәм аптыраны. Ул сүбек иләгән, кәзә йөнөн иләгән, буй балаҫ һуҡтырған. Кит, инәйем әйтә торғайны, бер буй балаҫ һуҡҡансы, ике аҫалы балаҫ һуғаһың, ти ине. Бер балаҫты тотҡоҡ та һүттек, ҡәйнәм буяуҙар алып ҡайтты, яңыртып бууны. Шунан ике аҫалы балаҫ һуҡтым. Шундуҡ Ташкенттағы ике ҡыҙына ебәрҙе.
**Өләсәй-4:** Аҫалы балаҫ эленгән йортта ҡунаҡ булһаң, хәл кереп, күңел күтәрелеп ҡайтаһың. Боронғо орнамент кешегә хәл бирә. Беҙ әле уларҙы тоябыҙ, аңлайбыҙ. Кеше ҡулы менән эшләнгән әйберҙең энергияһы ҡаласаҡ һәм телгә киләсәк. Уларҙы һөйләтергә була. Киләсәктә уларҙы һөйләтәсәктәр, һөйләтә аласаҡтар. Был энергия мәңге юғалмай ул.
**Өләсәй-2:** Мин кейәүгә сыҡҡанда инәйем бирнә итеп дүрт аҫалы балаҫ бирҙе. Ул бик ҙур хазина булды. Ҡәйнәмә лә балаҫ бүләк итте. Ул бик шатланды. Электән ҡыҙға бер балаҫ булһа ла бирергә тырышҡандар.
**Оҫта:** Ҡунаҡтарым, инде танынығыҙ, бындай элек-электән аҫалы балаҫтар бөтә Башҡортостанда тиерлек һуғылған, башҡорт аҫалары Мәскәү, Себер, Урта Азия, сит илдәргә таралған.

(Дауамы 13-сө биттә).

**✓ 41 мең йүгереүсегә ете йыл буйына тикшереүҙәр үткәргән. Һөҙөмтә шундай: ни тиклем йышыраҡ һәм ҙурыраҡ араға йүгергән һайын, уларҙың күҙҙәре әлеге сирҙәргә бирешмәйенсә, сәләмәт булып ҡала килгән.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ОЛОЛАРҘА...

## тойғолар көслөрәк

■ Пассив тәмәке тартыу күп ауыр сирҙәр барлыҡҡа килтерә. Иң хәүефле төркөмгә иң тәүҙә балалар инә, ти белгестәр. Яңыраҡ ғалимдар тағы ла бер асыш яһаған. Цинциннати университеты хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ғаиләлә бәләкәй саҡтан тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булған балаларҙың ете йәштә үпкә сирҙәренә дусар булыуы теркәлгән. Етмәһә, улар аллергияға тиҙерәк бирешеп бара. Атаһы, әсәһе йәки башҡа ғаилә ағзалары тәмәке тартыуы һөҙөмтәһендә ҡыҙҙарҙың үпкәләре малайҙарҙыҡына ҡарағанда 6 тапҡырға насарыраҡ эшләүе лә билдәле булған. Бигерәк тә 4 йәшкә тиклемге балаларҙың сәләмәтлегенә тәмәке төтөнө күберәк зыян килтерә икән.

■ Йүгереү йөрәкте һәм ҡан әйләнеше системаһын нығытып ҡына ҡалмай, күҙҙәр өсөн дә файҙалы, ти сит ил офтальмологтары. Мәҫәлән, ул айырыуса күҙ яҫмығы тоноҡланып, катаракта башланғанда һәм башҡа ҡайһы бер ауырыуҙарҙан ҡотолорға ярҙам итә. АҠШ-тың Беркли биҫтәһендәге Лоуренс исемендәге милли лаборатория врачтары 41 мең йүгереүсегә ете йыл буйына тикшереүҙәр үткәргән. Һөҙөмтә шундай: ни тиклем йышыраҡ һәм ҙурыраҡ араға йүгергән һайын, уларҙың күҙҙәре әлеге сирҙәргә бирешмәйенсә, сәләмәт булып ҡала килгән.

■ Ғалимдар химик элемент калийҙың ҡан тамырҙарын һаҡлау сифатына торған һайын йышыраҡ иғтибар бирә. ГФР университеты клиникаһы физиологтары аңлатыуынса, калий ҡан тамырҙарын уны "эҙбизләнеүҙән" һаҡлай торған эндотелий күҙәнәктәрен эшләп сығарыуҙа төп роль уйнай. Ябайлаштырып әйткәндә, эндотелий - ул йөрәк, ҡан һәм лимфа тамырҙарының эске ҡыуышлығын һаҡлап, ҡаплап тороусы күҙәнәктәр ҡатламы. Ғалимдар эндотелий ҡалынлығының ҡанда тупланған калийға туранан-тура бәйле булыуын асыҡлаған.

■ Ҡайһы йәштә тойғолар көслөрәк, тип уйлайһығыҙ? Канаданың Монреаль университеты ғалимдары кеше ни тиклем олораҡ, улар араһында тойғолар ҙа көслөрәк, тип иҫәпләй. Белгестәр быны махсус иҫәпләү системаһы ярҙамында асыҡлаған. Оло йәштәгеләр әйтеүенсә, бәхетле ғаилә тормошоноң рецебы ябай һына: ир менән ҡатын бер береһе менән ни тиклем күберәк аралаша, тойғолар ҙа шул тиклем көслө була.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сөтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көртмәле, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

ХӘТЕРКИТАП

# СОВЕТТАР СОЮЗЫ ДӘҮЕРЕ...

## халыҡтар дуҫлығы өлгөһө ине



**Бынан ике-өс тиҫтә йылдар элек етенсе ноябрь көнөн "Октябрь байрамы" тип билдәләгәнебеҙҙе бөтә оло быуын кешеләре яҡшы хәтерләйҙер. Ә хәҙер "Ата-бабаларыбыҙ ун етенсе йылда батшаны ҡолатып, илдә социализм төҙөп, Советтар Союзы барлыҡҡа килтереп, бөтөнләй дөрөҫ эшләмәгән", тип һанай күпселегебеҙ. Әлеге "иң бөйөк" байрамды икенсе төрлөгә әйләндереп, "Берҙәмлек көнө" тип атауҙарына ла тап ана шул сәбәпле. Берҙәмлек, халыҡ-ара татыулыҡ, дуҫлыҡ мәсьәләләре, әлбиттә, ниндәй генә дәүләт ҡоролошо булыуына ҡарамаҫтан, нәҡ үҙебеҙҙең күләгәбеҙ һымаҡ, көнкүрешебеҙҙә беҙҙе һәр саҡ оҙатып бара инде ул. Күп милләтле илебеҙ өсөн был хәл - тәбиғи.**

Әйе, әле күптән түгел Ер йөҙөндә иң ҙур, иң көслө булып һаналған Советтар Союзында йәшәй инек. Күп кенә йәштәр был осорҙо тарих биттәренән уҡып һәм ололарҙың һөйләүе буйынса ғына белә. Ана шул ваҡыттарҙы хәҙер инде һәммәбеҙ "рәхәтләнеп сөйнәйбеҙ", тәнҡит утына тотабыҙ. Бынан, әйтәйек, утыҙ-ҡырҡ йылдар элек "бөйөк Коммунистар партияһы" етәкләгән совет ҡоролошо хаҡында берәй ҡырын һүҙ әйтеп кенә ҡара! Әйтеү түгел, хатта ул турала уйларға ла ҡурҡҡан мәлдәр булманы түгел. "Ләғнәтле" империалистик илдәрҙең, буржуаз ҡоролоштоң берәй ыңғай яғы хаҡында низәр "ыҫҡындырып ебәреүҙән" дә ҡурҡа инек. Ошо темаға бихисап анекдоттар булыуына ла ҡарамаҫтан, кешеләр уларҙы, "тейешле органдарҙың" һизгер ҡолағына барып ишетелеп ҡуймағайы тип, бер-береһенә тик аулаҡта, үҙҙәренең яҡындарына ғына һөйләй ине. Әгәр һине ышанысты юғалтҡан, йәки шул ваҡытта йыш ҡына телгә алынған "несознательный элемент" тип табалар икән, тыныс йәшәүмен, тыныс йоҡлармын тип уйлама. Һәр тарафтан: партия, комсомол ойошмалары, эштәге етәкселәрең аша һине "аҡылға ултыртыу рычагтары" ифрат та күп ине, һәм үҙ заманында ул "аппарат" һис кенә "ватылмай" эшләне.

Оҙайлы хеҙмәт иткән осоромдағы үҙемдең госпиталь начальнигы менән бәйле бер лаҡапты иҫләйем (ул саҡта был подполковникта көлкө ҡайһыһы юҡ ине, әлбиттә). Йыш ҡына "товарищ солдат", "товариш майор", "товарищ генерал", тип һөйләшеп өйрәнгән, ҡанына "хәрбилек һеңгән" был начальнигыбыҙ йома көндө офицерҙар йыйылышында политинформация үткәрә. Америка Ҡушма штаттары башында ул саҡта Рейган исемле президент тора ине. Ана шул ил башлығының "агрессив" яҡтары хаҡында бара ине һүҙ. Барыбыҙ ҙа оло иғтибар менән тыңлап ултырабыҙ. Дөрөҫ, ифрат дөрөҫтө һөйләй беҙҙең начальник, АҠШ президентының тетмәһен тетә, афарин! Тик кинәт начальнигыбыҙ "товарищ Рейган" тип ысҡындырмаһынмы! Залда ултырған офицерҙар үҙ ара быш-быш килә башланы. Ә начальнигыбыҙ ни әйткәнен үҙе лә һиҙмәгәндер, әлеге һүҙҙе тағы бер мәртәбә ҡыҫтырып ебәрҙе. Был юлы хатта: "...товарищ Рейган, как бы продолжает политику захвата Мира, подобно товарищу Гитлеру..."-тип тә әйтеп ебәрҙе. Мин көлкөмдө тыя алмай, парта аҫтынаса әйлерге мәжбүр булдым. Залдағы башҡа офицерҙар ҙа шундай уҡ хәлдә. Тик беребеҙҙең дә начальникты төҙәтеп ебәрергә баҙнатыбыҙ етмәй. Доклад һөйләүҙән ҡыҙып киткән ағайыбыҙ шулай был ике дошманды "иптәш" тип атай-атай, үҙенең "ялҡынлы" телмәрен тәҡи һөйләп бөттө. Барыбыҙ ҙа таралыштыҡ... Киләһе йома көндө йәнә политинформацияға йыйылдыҡ. Был юлы командирыбыҙҙың йөҙө етди, кәйефе ҡырылған ине. Ул беҙгә былай тип өндәште: "Офицер иптәштәр, мин фәләнсә йылдан алып Коммунистар партияһында торам, фәләнсә йыл Демократик Германияла хеҙмәт иттем. Күп тапҡырҙар һыналғанмын. Үткән дәрестә Рейганға бәйле яңылыш ҡына әйтеп ебәргән һүҙем хаҡында кемегеҙ "Особый отдел"ға еткерҙе?" Һәммәбеҙ аптырашта ҡалдыҡ. Арабыҙҙа әлеге Дәүләт хәүефһеҙлеге органдарының берәй йәшерен агенты булған булһа кәрәк... Эйе, ул саҡта шул "ағайҙарҙың" "ҡолағы һәм күҙе" һәр ҡайҙа ине.

Бер аҙ хәтирәләргә төшөп китеп, һүҙбашымдан боролоп китә яҙғанмын. Күптәребеҙ ана шул үткән заманды тәнҡитләүҙән ҡәнәғәтлелек кисергән фонда Союзыбыҙҙың яҡшы яҡтары булыуы хаҡында ла бер аҙ әйтеп үтмәк булғайным бит. Совет иленең иң яҡшы сифаттарының береһе, хатта бөтә замандағы кешеләр өсөн үрнәк булырлығы - халыҡтар дуҫлығы ине. Быны шул темала айырыуса туҡталып китергә ниәтем. Күп кенә "теләнгән нәмәне ысынбарлыҡҡа һанаған" ("Принимать желаемое за действительность", тип урыҫтар күберәк ҡуллана был һүҙбәйләнеште) осор ине бит инде ул саҡ. Әммә, "халыҡтар дуҫлығы" тигән ошо төшөнсәнең һис кенә лә яҙған түгеллеген, шул дәүер өсөн фәҡәт ысынбарлыҡ ҡына булғанын һәр оло быуын кешеһе раҫлар. Бөтә Союздан йыйылған милләт вәкилдәрен - таныштарымды, хатта дуҫтарымдың бик күптәрен әле булһа яҡшы хәтерләйем. Барыны ла бер иштән совет һалдаты формаһы кейгән "хахол" Печиборщ, "Дүшәмбе" Фәруҡ, "генацвали" Курашидзе, "ара" Мнацян, молдован Вася Зглавуца, үзбәк Ибраһим һәм башҡа бик күп иптәштәремдең яҡты йөҙҙәре, һәр эштә бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тороуҙары, һәр кемеһенең үҙенсәлекле акцент менән мине "Халик" йә "Халил әкә" тип атауҙары әле булһа күҙ алдымда. "Һин нацмен, ә беҙ - бөйөк милләт", тип кемдеңдер берәүҙе кәмһеткән осраҡтарҙы хәтерләмәйем. Хатта әлеге мәлдә немец фашистарын үҙҙәренең азат итеүселәре итеп тойған Балтик буйы илдәре вәкилдәре лә беҙҙең менән бер рәттә ине. Һәр кем башҡаларға тик уның кешелеклегенә ҡарап мөнәсәбәт ҡыла ине. Һәммәбеҙ ҙә һәр союздаш республикала үҙебеҙҙе иркен тойҙоҡ. Ял йорттарына барыу булһынмы ул, хәҙерге ваҡытта әйтмешләй, әлеге "яҡын сит ил"дәрҙең береһенә барып йәшәү һәр кемебеҙ өсөн бер ни ҙә торманы. Сөнки барыбыҙ ҙа СССР-ҙы дөйөм бер ил тип һананыҡ.

Баштараҡ иҫкә алған Скибюк тигән фамилиялы подполковникты - бар булмышы менән "хохол" булған командирымды тағы бер иҫкә алып китәйем әле. Хәрби табиптар араһында уның яҡташтары - украин милләтенән булған медицина хеҙмәте офицерҙары ифрат та күп ине. Шуға ла ҡарамаҫтан, уның мине - әлегә тик "өлкән лейтенант" званиеһында ғына булған йәп-йәш "кара башҡорт" балаһын госпиталь бүлеге на-

✓ ***Бер офицерҙың ошо һүҙҙәре хәтеремдә: "Бындай музыкаль инструментты беренсе тапҡыр ишетеүем. Уйнаған көйөгөҙ бигерәк һағышлы. Уны тыңлағанда матур тәбиғәтле, икһеҙ-сикһеҙ иркен далалар күҙ алдына килә..."***



чальнигы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләп ҡуйыуы күп нәмәгә ишара. "...Я знаю, товариш Суюндуков, у тебя в "верхах" нет "волосатой руки", чтоб поддерживать...", тигән һүҙҙәрен әле булһа иҫләйем. Офицерҙарҙың фәҡәт тырыш хеҙмәтенә генә ҡарап ярҙам итәсәге хаҡында ла әйткәйне ул. Милләтенә түгел, ә һәр кешенең эшкә, үҙенә йөкмәтелгән бурыстын үтәүенә ныҡ иғтибар ителә ине ул саҡтарҙа... Октябрь байрамымы, йә булмаһа Совет армияһы көнөмө, һәр частан йыйып, үҙешмәкәр артистар араһында конкурстар ҙа йыш ҡына үткәрә инеләр. Ана шул байрамдарҙа ла "халыҡтар дуҫлығы" темаһы иң алғы планда торҙо. Һәр милләт вәкиле үҙенең концерт номерын әҙерләй... Украиндар, молдовандар, Балтик буйы, Кавказ вәкилдәре һәм башҡаларҙың араһында йырсылар, бейеүселәр күп кенә. Барыһы ла үҙенең милли кейемендә сығыш яһарға тейешле. "Ни булһа - булһын", тип, бер мәл мин дә тәүәкәлләргә булдым. Төрлө яҡтан йыйылған ана шул халыҡҡа үҙебеҙҙең башҡорт ҡурайын күрһәтәйем әле, тигән теләгем тыуҙы. Инәмә оҙон аҡ елән һалып, башыма "төлкө кәпәс" кейеп, ғәмүмән, бороңғо ата-бабаларыбыҙға оҡшатырға тырышып, үҙемсә яһандым. Аяғыма кейергә аҡ итек булмағас, үҙемдең "офицерский" хром итегемде аҡҡа буяп, ҡунысына милли башҡорт биҙәген төшөргәс, ҡәҙимге килешеп ҡалды. "Дом офицеров"тың сәхнәһендә "Сынрау торна" һәм бер нисә бейеү көйөн уйнаным. Дәррәү ҡул сабыуҙарға баштараҡ үҙем дә ышана алмай торҙом хатта (ҡурайҙы бер кем дә аңламаҫ, тип уйлағайным). Концерттан һуң ҡайһы берәүҙәр килеп ҡурайҙы тотоп, әйләндергеләп ҡарай, өрөп тә маташтылар. Араларында бер офицерҙың ошо һүҙҙәре хәтеремдә: "Бындай музыкаль инструментты ғүмеремдә беренсе тапҡыр ишетеүем. Уйнаған көйөгөҙ бигерәк һағышлы. Уны тыңлағанда матур тәбиғәтле, йәнлек, ҡош-ҡорттар менән тулы икһеҙ-сикһеҙ иркен далалар күҙ алдына килә..." Ә иң ҡыҙығы - Ракета частары дивизиялары араһында уҙғарыла торған ярышҡа, йәғни финалға үтеүем, шунда төрлө милләт вәкилдәренән торған жюри ағзаларының башҡорт ҡурайына беренсе урынды биреүе булды! Ул осорҙа милләт-ара ҡапма-ҡаршылыҡтар булыу мөмкинлеген хатта күҙ алдына ла килтерә алмай инек бит. Эйе, ябай халыҡтарҙың һәммәһе һәм һәр саҡ үҙ-ара дуҫ йәшәргә тырышты...

Тик илдә әлеге "үҙгәртеп ҡороу" башланғас, "ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡан" һымағыраҡ булып китте шул. Элекке союздаш республикаларыбыҙ барыһы ла айырым дәүләткә әүерелде. Бәғзе берәй милләт вәкиленең - аныҡ бер кешенең фәҡәт үҙ яғын ғына ҡайырып, башҡаларҙы "һанға һуҡмауы", ул ғына ла түгел, айырыуса, халҡын, телен яратҡандарҙы милләтселеккә япһарып хәсәт таратыуы, башҡа милләттәргә ҡарата кире ҡараш пропагандалау осраҡтары ла күренеп ҡалғылай башланы. Һәр халыҡта тиерлек "ойоштороусылар" табылып тора шул инде. Был, әлбиттә, бер ҡасан да яҡшыға алып бармай. Миләтселектең ниндәй һөҙөмтәләргә алып килгәнен беҙ хәҙерге көндә көнбайыш Украина, Балтик буйы илдәре миҫалдарында күрәбеҙ. Хатта элекке фашистарға "оло ихтирам" тойғоһо йөрөтөүселәр ҙа ярайһы ғына иркенләп "баш ҡалҡыта" башланы. Ошондай темаға һүҙ алып барғанда үзебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙы ғорурланып телгә алам. Миләттәр дуҫлығының өлгөләренең өлгөһө була килде беҙҙең халҡыбыҙ һәр дәүерҙә лә. Хатта әле әйтелгән "үҙгәртеп ҡороу" мәлендә лә! Кемдәрҙе генә үҙ ҡуйынына һыйындырманы эскерһеҙ, изге күңелле йомарт, ҡунаҡсыл башҡорт халҡы!

**Шулай итеп, үҙем һәр саҡ М.Горбачевтың үҙгәртеп ҡороуҙар дәүерен сәләмләп, совет иле сәйәсәтен йыш ҡына тәнҡитләгеләүемә ҡарамаҫтан, үткән дәүерҙең, йәғни СССР-ҙың бына ошо бик тә мөһим бер яғы хаҡында ла әйтмәй булдыра алманым. Һәр нәмә тик кире сифаттарҙан ғына тормай һәм шул уҡ ваҡытта гел яҡшы ғына ла була алмай шул.**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Артабан ғалимдар хайуандарҙан кешеләргә прививка итеп эшләнгән орлоҡ биҙҙәре гормондары, һис шикһеҙ, организм күҙәнәктәрен стимуллай һәм эшмәкәрлеген көсәйтә икәнлеген асыҡлаһа ла, быны хирургик операция юлы менән түгел, ә барыбер ҙә тәбиғи ысул менән нормалләштереү, нығытыу һәм стимуллау яҡшыраҡ.

Илебеҙҙә йәшәреү теорияһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе билдәле ғалим Илья Мечников була. Үҙенең күп йыллыҡ фәнни тикшеренеүҙәре нигеҙендә ул шундай һығымтаға килә: ҡартлыҡ - ул ауырыу, һәм уның ваҡытынан алда килеүе - "организмдың үҙ-үҙен ағыулауы - автоинтоксикация" һөҙөмтәһе.

Экспериментль биология һәм патология институтына нигеҙ һалыусы һәм һуңынан Украина Фәндәр академияһы президенты булып китеүсе украин ғалимы Александр Богомолец үҙенең оҙаҡ йәшәү теорияһын булдыра. Уға ярашлы, кешенең йәше артыу менән организмдың туҡлыҡлы матдәләрҙе һәм һыуҙы үҙенә алыу һәләте кәмей. Берләштереүсе туҡымала күҙәнәктәрҙең тукланыуы боҙолғас, йәшәү әүҙемлеге лә түбәнәйә. Һөҙөмтәлә ҡартлыҡ килә.

Ғалимдың туғаны Виктор Богомолец хатта йәшәреү ысулын эшләй, уның асылы "берләштереүсе туҡыманы һәм эндокрин системаһын (эҙемтә булараҡ, кеше организмының барлыҡ күҙәнәктәрен) тире аша стимуллау һәм тукландырыуға" ҡайтып ҡала. Тире организм күҙәнәктәренә йоғонто яһаған, уның функцияларын активлаштырған һәм шулай итеп организмды тотош йәшәрткән билдәле биологик актив матдәләрҙе үҙенә ала.

Атаҡлы совет биологы, профессор Владимир Филатов теләһә ниндәй йәшәреүҙең һөҙөмтәле ысулы йәки регенерация тотош организмдың энергетик системаһына тәьҫир итеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүен раҫлаған. Филатов шулай уҡ туҡыма терапияһына иң яҡшы йоғонто яһаусы биостимулятор булып кеше плацентаһының бер өлөшө тороуын асыҡлаған.

Замандашыбыҙ, Англияла ғына түгел, тотош донъяла билдәле ғалим-геронтолог Джустин Гласс үҙенең билдәле "Жить до 180 лет" китабында енси биҙҙәр яҡшы енси тормош өсөн генә түгел, ә кеше организмының нормаль эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим булыуы тураһында яҙа. "Ҡайһы бер йәшәреү проблемаһы менән шөғөлләнеүсе ғалимдар махсус теория эшләгән, - ти ул. - Унда йәшәү энергияһы сығанағы булған енси биҙҙәргә мөһим роль бирелә. Тимәк, был биҙҙәрҙе йәшәртеү тотош организмға йоғонто яһай... Енси биҙҙәр тышҡы (балалар) ғына түгел, эске секреция продукттары ла эшләп сығара. Улар ҡан ағымына эләгеп, кешенең организмын тотош йәшәртә".

Д. Гласс шулай уҡ шундай фактты ла билдәләй: "Хәҙер һеҙ эске секреция биҙҙәренең нормаль эшләүе - сәләмәтлек һәм оҙаҡ йәшәү нигеҙе икәнлеген беләһегеҙ. Һүҙемде йомғаҡлап, шуны ла әйткем килә: биҙҙәр етди иғтибарға бик һиҙгер. Әгәр һеҙ ниндәйҙер биҙгә иғтибар туплап, уның яҡшы эшләүен күҙаллаһағыҙ һәм шулай тип ҡабатлаһағыҙ, тиҙҙән, ысынлап та, уның эшмәкәрлеге яҡшырғанына ышанырһығыҙ. Иғтибар туплау ысулын даими, көн һайын ҡулланырға кәрәк".

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**

## ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# АҪА ҺАЙЛАУ

**(Башы 11-се биттә).**

### АЛТЫНСЫ КҮРЕНЕШ

*Өләсәйҙәр иҫтәлектәр һөйләй. Ҡыҙҙар аҫалар менән бергә тарих тыңлай.*

**Оҫта:** Беҙҙең ауылда балаҫ һуғыусы күп ине. Әйбәт һуғаһың, тип миңә килделәр. Көсөндә йәлләмәйһең инде. Буяуы әйбәт булһа, һуҡҡанда беше итеп, тартып һуҡһалар, шул сифатлы була. Атаһың да тартаһың, тиҙәр ҙә бит ул. Йәненде, көсөндө йәлләмәй һуҡһаң, әйбәт була. Йәнде, көстө биреү шул инде - иғтибарлап, яңылышмай һанап, ҡарап һуғырға кәрәк. Аҫалы балаҫлы йортҡа керһәң, күңел тыныслана бит.

**Өләсәй-1:** Башҡорт халҡы бик тырыш бит ул. Ғүмер буйы халыҡ ҡул эше менән донъя көткән. Крәҫтиән, игенсе булған, йөн иләгән, тире иләгән, һуғыш мәлендә фронтҡа бөтә нәмә бәйләп ебәргәндәр. Хатта ҡулдәктәрҙе лә бәйләп кейҙеләр. Балаҫ һуғыу инде - обязательно. Сүпләм шаршау, таҫтамал, ашъяулыҡтарын, балаҫтарын бәләкәй ҡул арбаһына тейәп баҙарҙа игенгә, икмәккә, иткә, кейемгә, тоҙға, кәрәсингә, ярмаға алмаштырғандар.

**Өләсәй-2:** Был балаҫым йөҙ илле йыл әүәл һуғылған. Атайымдың әсәһенең әсәһе уны ҡабатлап күсереп баҫҡан, миңә бүләк итте. Беҙ - мең ырыуы башҡорттары. Кәкерсәкле балаҫ аҫаһы - беҙҙең нәҫел орнаменты. Ошо ырыуҙың тамғаһы ла. Кешеләр уны еләнгә, ҡулъяулығына, балалар кейеменә, һуғышсылар ҡалҡанға, эйәренә тамға итеп ҡуйған. Һунарсы, ҡортсо кейемендә, ҡоралында ла ошо орнамент булған. Ҡәбер таштарына ла сүкелгән. Нәҫел йәшәгән төбәктең сиктәрен дә билдәләп, ырыу тамғаһы ҡуйғандар. Шул тамға аҫалы балаҫта һаҡланған. Кәкерсәкле сулпы аҫа ул.

**Өләсәй-3:** Инәйемә ун йәш булғанда, балаҫ баҫа башлай. Тәбелдереккә аяғы етер-етмәҫтән, урын артына ултырған. Иң тәү һуҡҡан балаҫын ул гел иҫкә ала. Көҙә йөнөн иләп, балаҫҡа тәкә мөгөҙө тигән биҙәк һалып һуҡҡан. Аслыҡ көсәйгән. Инәһе менән Нарыҫтауҙан Әүриз тигән ауылға йәйәүләп киткәндәр. Теге аҫалы балаҫты һатҡандар. Бер кешенең һикеһендә бәҙлап ябып, матур булып ятып ҡалды, күҙҙәремдән йәштәр сыҡты, ти инәйем. Балаҫ аҡсаһына бер ҡапсыҡ бәрәңге алғандар. Аҙаҡ нәнәйем тағы сатин тауар алып, өс бәбәй итәкле күлдәк тегеп кейҙергән. Күңелен уйлаған инде ҡыҙының.

**Оҫта:** Инәйем мине тәүҙә уҡ өйрәтте: балаҫ башлар алдынан тәһәрәт ал, әлхәмде уҡы, бисмиллаһыҙ башлама, тине. Балаларым - ҡыҙҙарым, малайҙарым теҙешә торғайны. Балаҫ һуғыуҙың ырымдары бар уның. Икендегә етмәһен, ике һуҡыр күрмәһен, тиһең. Ян-яғына ҡарайһың. Ҡайбер кешенең ҡулы ауыр була бит. Икешәр йыл һуғылмай ятҡаны була. Ҡабат уның эшен алмаҫтай булаһың. Бөтөргән саҡта, ауылдағы иң ҡарт, иң оҙаҡ йәшәгән кешенең исемен әйтеп ҡыркаһың. Шуның ғүмерен ҡырҡам, тиһең. Йәштәргә ҡағылмаһын, улар йәшәһен, тиһең инде.

### ЕТЕНСЕ КҮРЕНЕШ

*Өләсәйҙәр, ҡыҙҙар һәм аҫалар бергә.*

**Ҡыҙ-1:** Өләсәйемә рәхмәт, һандыҡ төбөн ҡотлап, аҫалы балаҫ һуҡтырҙы. Самауыр тояғы. Ҡарале.

**Ҡыҙ-3:** Мин Йондоҙ аҫаны һайланым.

**Ҡыҙ-4:** Ә мин бөтә төрлө аҫаларҙы ла үҙем һуғырға өйрәнәм.

**Оҫта:** Бына рәхмәт. Оҫталарға алмаш үҫә. Бәрәкәт ҡулына, иман уйына!

**Ҡыҙ-3:** Аҫалар ҙа, биҙәүестәр ҙә - кешенең яҡты хыялдары, йәшәүгә, тормошҡа ышаныуы.

**Ҡыҙ-4:** Ышаныуы? Мин күлдәгемә ҡортбаш тегеп алыр инем.

**Ҡыҙ-1:** Ҡашмау, селтәрҙәр теҙеп кейәйек, ҡыҙҙар.

**Ҡыҙ-2:** Мин дә һандыҡ йыя башлайым.

**Өләсәй-1:** Ҡотло булһын һандыҡтарығыҙ, балалар, бәхет, ырыҫ менән тулһын. Аҫалы балаҫтарығыҙ ғүмер юлығыҙға бәрәкәт бирһен. Әйҙәгеҙ, оҫтаға хаҡын түләп, сәй эсереп ҡайтайыҡ: ҡулының ҡороһо ҡайтмаһын!

**Аҫалар йырлай:**

*Аҫа, аҫа, аҫабыҙ,*
*Алға сығып баҫабыҙ.*
*Балаҫ һуғыу серҙәрен*
*Бар донъяға асабыҙ.*

*Аҫа, аҫа, аҫа беҙ,*
*Матурлыҡтың үҙе беҙ,*
*Ай-ҡояштың күҙе беҙ,*
*Сал тарихтың эҙе беҙ,*
*Ата-баба һүҙе беҙ.*
*Аҫа, аҫа, аҫа,*
*Аҫа иле тылсымлы,*
*Аҫа иле серле, моңло.*
*Аҫа иле нур тулы.*

*Аҫалар халыҡҡа биҙәктәрен күрһәтеп бейей.*

*Ҡыҙҙар менән өләсәйҙәр Оҫтаны ҙурлап, бүләк, аҡса бирә, бергә бейеп сығалар.*

Тамам.

**Сәрүәр СУРИНА.**

✓ *Һәр насарлыҡтан ике дарыу бар: беренсеһе - ваҡыт, икенсеһе - өндәшмәү.*

*(Француз мәҡәле).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

## "БАШҠОРТ ЙЫРЫ"НЫҢ БАҺАЛАМА АҒЗАЛАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**46-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ағуна. Ғәбитов. Һабантуй. Хазина. Ғәйет. Әмәл. Ирәүән. Имеҙ. Рәғиә. Шик. Меню. Еңел. Март. Лирика. Оло. Регби. Сүре. Арыш. Таба. Елкә. Тула.

**Вертикаль буйынса:** Ғимранов. Һөйәрғолов. Тәгәрмәс. Ғата. Үтәшев. Ниәт. Ғибрәт. Трест. Ике. Афәт. Йылым. Герб. Анонс. Ауыл. Хәмиҙуллина. Мырҙа. Инәү. Авантюра.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

## МИЛЛИЛЕКТЕ БАҺАЛАП...

**Ошо көндәрҙә Красноярск ҡалаһында XIII "Азия-Себер" милләт-ара матурлыҡ һәм талант конкурсы үтә. Быйыл финалда 10 милли мәҙәниәтте күрһәткән 12 һылыуҡай ҡатнашҡан һәм улар араһында Башҡортостан Республикаһы исеменән Өфө дәүләт нефть техник университеты студенты Милена Вәхитова сығыш яһай. Ул Азия һәм Себерҙең иң сибәр һәм һәләтле 5 ҡыҙы иҫәбенә инә.**

Конкурс барышында ҡыҙҙар үҙҙәренең таланттарынан тыш, тамашасыларға хикәйәттәр һәм легендалар, милли кейемдәр аша туған халҡының мәҙәниәтен дә күрһәтә алған. Улар "Визитка. Милли кейем", "Милли талант", "Ҡатын-ҡыҙҙың барлыҡҡа килеүе тураһында кинәйәле хикәйә", "Ҡатын-ҡыҙ - үҙ халҡының хазинаһы" этаптарында ярыша. Конкурста ҡатнашыусылар баһалама ағзаларын башҡорт, эвенк, хакас, тажик, әзербайжан, монгол, татар, сыуаш, ҡаҙаҡ, бүрәт, яҡут, тыва мәҙәниәте менән таныштыра. "Ижади милли сығышта мин тамашасыларға яугир ҡыҙ бейеүен бейеп күрһәттем. Артабанғы этапта уларҙы "Урал батыр" эпосы, атап әйткәндә, Һомайҙың мифологик образы һәм уның легендалағы әһәмиәтле роле менән таныштырҙым. Конкурста республикабыҙҙа юғары баһаланған аҫыл таш образында сыҡтым, мин нефрит ташын һайланым", - ти Милена Вәхитова. Жюри конкурста ҡатнашыусыларҙы халҡының мәҙәниәтен, йолаларын һәм тарихын белеү, туған телендә аралашыу кимәле, сәхнә мәҙәниәтен белеүе һәм йыр-бейеүгә маһирлығы кеүек критерийҙар буйынса баһалай.

## ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨҺӨ

**Өфөлә Miss International Ufa - 2019 этник матурлыҡ һәм талант республика конкурсы тамамланды. Сара "Таврида 5.0" йәш мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре форумы еңеүсеһе, Өфө ҡурайсыһы Земфира Рәшитова етәкселегендә ойошторолдо. Проектты тормошҡа ашырыу өсөн ул 2019 йылдың йәйендә 650 мең һумлыҡ грант отҡайны.**

Конкурста республикала йәшәгән һәм үҙ милләтенең матурлығын күрһәтергә теләгән 18-28 йәшлек ҡыҙҙар ҡатнашты. Быйыл төрлө милләт ҡыҙҙарынан бөтәһе 60 ғариза килгән, 12-һе проект финалсыһы тип танылған. Улар 12 халыҡтың - Ангола, Һиндостан, Куба, Ҡытай, Әрмәнстан, Әзербайжан, Грузия, Ҡырғыҙстан, шулай уҡ Рәсәй халыҡтары - рус, башҡорт, татар, сыуаш мәҙәниәтен күрһәтте. Рәсәй һәм Башҡортостан биләмәһендә йәшәгән халыҡтарҙың милли мәҙәниәтен актуалләштереү, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыуға булышлыҡ итеү, йәштәр араһында хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙының ыңғай образын булдырыу маҡсатында үткәрелгән ярышта ҡыҙҙар дуҫлыҡ бейеүен башҡарып, барыһы ла башҡорт мәҙәниәтен белеүен күрһәтте. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының бишенсе курс студенты Ленария Хәсәнова еңеүсе тип табылды. Беренсе вице-мисс исеменә Ҡырғыҙстандан Айназ Усенканова, икенсе вице-мисс исеменә Ангола ҡунағы Франку Ванда Гизела Албину лайыҡ булды. Сыуаш милләте вәкиле Марина Васильева онлайн тауыш биреү йомғаҡтары буйынса "Мисс интернет" исемен алды.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Ноябрь - Декабрь (Рабиғел әүүәл - Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (28) дүшәмбе | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 26 (29) шишәмбе | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 27 (30) шаршамбы | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 28 (1) кесе йома | 7:42 | 9:12 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 29 (2) йома | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 30 (3) шәмбе | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 1 (4) йәкшәмбе | 7:47 | 9:17 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 ноябрь "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**27 ноябрь "Эскәмйә"** (А. Гельман), драма. 12+

**29 ноябрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+

**30 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

**1 декабрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**30 ноябрь "Алиса в стране чудес"** (С. Чураева) 12.00, 14.00 0+

**"Что такое Новый Год?"** (В. Щербакова) 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 ноябрь "На стыке времен"** Ҡурайсы Илнур Хәйруллиндың концерты. 6+

**29 ноябрь "Һандуғастан моңдар отоп..."** Башҡортостандың халыҡ артисы Римма Амангилдинаның концерты. 6+

**Ғөбәйҙуллиндарҙың музыкаль династияһы.** Программала урыҫ һәм сит ил композиторҙары әҫәрҙәре. 6+

**✓ Бәлки, шул ҡәҙәре үк насар кимәлдә лә түгелдер был тамаша һәм йәш йырсылар сығыштары. Әммә сәхнә артисына талаптарҙың ҡырҡа үҙгәреүен һәм артыуын иҫтә тотһаҡ, был концертты күккә күтәреп булмай.**



БӘХӘС ҠОРО

# ЙӘШТӘР ИЖАДЫ...

## ни өсөн бер көнлөк?

**Башҡорт йәштәре өсөн ойошторолған тамашаларҙың, күңел асыу сараларының сифат кимәле, йөкмәткеһе һәр ваҡыт һорау тыуҙыра. Ысынлап та, ул сараларҙан кемдең генә тулыһынса ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисергәне бар икән? Ошо көндәрҙә баш ҡалала үткән сираттағы "Йәшлек шоу" республика йәштәр фестиваленән һуң да тәьҫораттар бик үк шәп булманы: сәхнә уттары күҙҙе сағылдырһа ла, яңы йондоҙҙарҙан ҡолаҡтар тонdo.**



"Йәшлек шоу" тамашаһы тәүге тапҡыр 1992 йылда ойошторолған, был юлы ул 27-се тапҡыр үткәрелде. Уның бихисап маҡсаттары араһында иң мөһиме - республика йәштәренең ижади кимәлен күтәреү, яңы таланттарҙы халыҡ алдына сығарыу. Бына ошо йәһәттән ҡарағанда заманында "Йәшлек шоу" мәктәбе башҡорт эстрадаһының бик күп сағыу йырсылары исемдәрен асты. Улар араһында "Аҡйондоҙ" төркөмө, Рөстәм Ғиззәтуллин, Гөлсөм Бикбулатова, Гөлдәр Ишҡыуатова, Венер Камалов, "Бүреләр" төркөмө кеүек бөгөн дә популяр артистар бар. Ул саҡта йәштәр ҙә, оло-лар ҙа был сараны яратып ҡабул итеп, "Нефтсе" мәҙәниәт һарайына хатта 1500 тамашасы йыйған булған. Бына шул осорҙо хәтерҙә тотоп булһа кәрәк, сифаты түбәнәйә килеүгә ҡарамаҫтан, баш ҡала тамашасыһы "Йәшлек шоу"-ға йөрөүен дауам итә. Уйлай китһәң, бәлки, шул ҡәҙәре үк насар кимәлдә лә түгелдер был тамаша һәм йәш йырсылар сығыштары. Әммә сәхнә артисына талаптарҙың ҡырҡа үҙгәреүен һәм артыуын иҫтә тотһаҡ, барыбер ҙә был концертты күккә күтәреп булмай икәнен самалау ауыр түгел.

Ә шулай ҙа кемдәрҙән үрнәк ала бөгөнгө йәш йырсылар? "Йәшлек шоу-2019" фестивалендә Сергей Лазарев, Дима Билан, Ольга Бузова, "Фабрика" төркөмөнән, ҡайһы бер башҡорт һәм татар эстрада, бөгөн йәштәр араһында популяр булған мамбл-рэп йүнәлешендәге йырсыларҙан үрнәк алыусыларҙы тыңланыҡ. Әйткәндәй, хатта махсус музыкаль белеме булмағандар ҙа ҡайһы бер йырсы башҡарған йырҙарҙың билдәле сит ил йырсыларының ижад емешенә оҡшаш булыуын аңғарғандыр.

Һәм тағы. Сараны ойоштороусылар йәштәрҙең ижад кимәлен генә түгел, уларҙың сәхнәлә үҙен тотоуын, тамашасы менән аралашыуын да баһалаһын ине. Был да бик мөһим. Мәҫәлән, йырсы эргәһендә бейеүсе ҡыҙҙарҙың, гүйә, башҡарыусының мәғәнәһеҙ йыр тексынан иғтибарҙы икенсегә йүнәлтергә теләгәндәй кейенеүе башҡорт сәхнәһендә популяр булып китеүен аңғармай ҙа ҡалдыҡ бит. Был тренд нисек тиҙ барлыҡҡа килгән, шулай үтер ҙә, ти. Әммә "дамп-домп" килеп торған ҡоро музыкаға (уныһы ла алдан яҙҙырылған) сәхнәне бер итеп һикереп йөрөү һәм тамашасыны ла үҙ ыңғайына бейергә мәжбүр итеү ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Йәштәр сәхнәләрҙең "дәрәжәһен" айырырға өйрәнһен ине: урамдағы тамашаларҙа ырғып-ҡысҡырһаң да, төрлө йәштәге тамашасылар йыйылған мәҙәни усаҡ сәхнәһенә был ҡыланыш килешеп етмәй бит.

"Йәшлек шоу-2019" республика йәштәр фестивале өр-яңы форматта, "Продюсерҙар алышы" рәүешендә үтәсәген хәбәр иткәйнеләр. Ғәмәлдә был һайлап алыу турының жюри составында булғандарҙың: "Арғымаҡ" төркөмө солисы Ринат Рамазанов, йырсылар Илнур Рамазанов, Таһир Әсәҙуллин, "Girzamusic" продюсеры Реналь Абыҙгилдин, "Ҡурай" телеканалы, "Һомай" театр-студияһы етәксеһе Айгөл Үтәгәнованың йәштәргә остаз булараҡ тәғәйенләнеүенә ҡайтып ҡалды. Ғәҙеллек өсөн улар араһынан иң һөҙөмтәле эшләгән остазды тамашасы үҙе һайларға тейеш булғандыр, бәлки. Шулай ҙа сара үтте һәм еңеүселәр түбәндәгесә билдәләнде: III урынды Индира Сибәғәтуллина (остазы Ринат Рамазанов) һәм Тимур Сөләймәнов (остазы Реналь Абыҙгилдин) бүлеште, II урынға - Илүзә Иҙрисова ("Ҡурай" каналы), I урынға - Илнар Ғәниев (Илнур Рамазанов) сыҡты. Фестивалдең Гран-приһын Илнур Рамазанов остазлығындағы Әбйәлил районы егете Хәйҙәр Ибраһимов яулаheny. Шулай уҡ йыл дауамында һөҙөмтәле ижад иткән йәштәр төрлө номинацияларҙа билдәләнде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт йәштәре тарафынан тиҫтәрҙәре өсөн ижад ителгән музыка донъялағы популяр йүнәлештәргә ауаздаш булған хәлдә лә, башҡорт халҡының менталитетын иҫәпкә алырға тейеш-тер. Бер нисә йылдан ошо йәш йондоҙҙар бөтөнләй башҡаса йырҙар менән сәхнәләргә күтәрелә башлар, моғайын (быға асыҡ миҫал Радик Юльяҡшин). Ә "Йәшлек шоу" фестивале ураy юлдар менән билдәлелек яуламаһындар өсөн йәш йырсыларҙы алдан уҡ башҡорт тамашасыһының ихтыяжына тап килергә өйрәтергә бурыслылыр. Ни тиһәң дә, сағыу биҙәлгән сәхнә, уйынкөлкөгә һәм шаяртыуҙарға ҡоролған сценарий, профессиональ тәнҡит аша үткәрмәй генә сәхнәгә күтәреү башҡорт йәштәрен һәм башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүгә булышлыҡ итә алмай. Һәм бер көнлөк билдәлелекте яуаплылыҡтан, сифаттан өҫтөн ҡуйыуҙан туҡтарға ваҡыттыр. Башҡалар нисек уйлай?**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

### ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

#### Ноғала

"Уй, ошо беҙҙең күрше ноғала ла инде, эшләгән эшенең бер рәте, ашһыуының бер таты юҡ", - оҙаҡ йылдар ут күрше булып йәшәгән ҡатын тураһында әсәйем уңайы сыҡҡан һайын шулай һөйләй торғайны. Уның эшлекһеҙлеген, аш-һыу тирәһенә барымһыҙлығын үҙенсә ошо һүҙҙәр менән баһалай ине ул. Хатта уның өсөн әлеге апайҙың ҡушаматы ла "Ноғала" булды. Беҙ берәй нәмәгә иренеберәк тотонһаҡ та: "Йә, ноғалағыҙ ҡойолмаһын",- тип ҡаты ғына өндәшер ине. Ә һүҙлектәрҙә был һүҙгә шекәрә, йәғни мал күҙенә төшкән аҡ, тигән аңлатма бирелә. Әммә әсәйем, ғөмүмән, беҙҙең яҡ ҡатындары уға үҙ мәғәнәһен һалған, күрәһең.

#### Ытыйыр

Әсәйемдең телмәренән тағы бер һүҙ иҫтә ҡалған. Ҡушҡан йомошона ырыя ғына ҡуҙғалһаң, ул мотлаҡ: "Ытыйыр булдыңмы әллә? Йәһәтерәк йөрө", - тиер ине. Был һүҙҙең дә мәғәнәһенә биртабан төшөндөм. Баҡтиһәң, ололар уны ИТР (инженерно-технический работник) тигән ҡыҫҡартылған һүҙҙән алған икән. Ысынлап та, бәләкәй генә портфелгә эйә булһа ла, етәкселәр үҙ дәрәжәһен белеп кенә, яй ғына баҫып йөрөргә ярата шул.

**Мотал РӘМОВ,**
**Йылайыр районы.**

### АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НӘФСЕ ТЕҘГЕНЕ...

## аҡыл ҡулында

Йыраҡ, тип ханға тел тейҙермә - ҡулы етер, насар, тип ирҙе әрләмә - ҡарыуы етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Быcраҡ әйберенде өйҙә йыуыу яҡшыраҡ.

**(Мексика мәҡәле).**

Минә төшөмдә, йәшәү - ул бәхет, тигәнде белгерттеләр, уянғас, йәшәү - ул хеҙмәт итеү, икәнен аңланым. Мин хеҙмәт итә башланым һәм хеҙмәт итеүҙә генә бәхет табыла икәнен аңланым.

**(Рабиндранат Тагор).**

Аҡылы менән балҡыусылар һәм аҡылы менән ялтыраусылар була. Тәүгеләре - балҡыта, икенселәре - һуҡырайта.

**(Мария Энбер-Эшенбах).**

Бөтөн кешелек аҡылы ике һүҙгә һыя: көтөү һәм өмөт итеү.

**(Александр Дюма-атай).**

Бөйөк ҡаҙаныштарға ынтылыусылар бөйөк ғазаптарҙы ла кисерергә тейеш.

**(Плутарх).**

Һәр насарлыҡтан ике дарыу бар: беренсеһе - ваҡыт, икенсеһе - өндәшмәү.

**(Француз мәҡәле).**

Кешегә әйбергә ҡараған кеүек ҡарарға ярамай, уның хаҡы барыбер әйберҙеке кеүек үк түгел.

**(Патрик О,Рурк).**

Танау аҫтындағыһын күреү өсөн күп талант кәрәкмәй, ә бына танауҙы ҡайһы яҡҡа борорға икәнде белеү ябай эштәрҙән түгел.

**(Уистен Оден).**

Ваҡ мәсьәләләр беҙҙең иғтибарыбыҙҙы нығыраҡ йәлип итә: филдән ҡасыуға ҡарағанда себендән ҡотолоу ауырыраҡ.

**(Генри Уилер Шоу)**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Фермала бер ат ауырып киткән.**

**- Иртәнсәк аяҡҡа баҫмаһа, хушлашырға тура килер, - тигән мал табибы.**

**Иртәнсәк ат тормаған, эргәһендә ятҡан һарыҡ быны: "Үләһең бит, тор!"- тип өгөтләп, аяҡҡа баҫтырған. Быны күргән хужа:**

**- Ниндәй мөғжизә был! Байрам итергә кәрәк! Хәҙер үк һарыҡты һуйҙыртам! - тип шатланған.**

**Кеше эшенә ҡыҫылырға ярамай, әлбиттә, әммә сысҡанға ҡуйылған ҡапҡан тураһында ла онотмаҫҡа кәрәк..."**


1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танығлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
22 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2327/11